М.Х. ӘХТӘМОВ

# ӘСӘ

## МӘКӘЛДӘР ҺӘМ ӘЙТЕМДӘР

ҺҮҘЛЕК

**М.Х. ӘХТӘМОВ**

**Әсә. Мәкәлдәр һәм әйтемдәр. Һүҙлек**

**Кешеләге бөтә гүзәллек — ҡояш нурҙарынан һәм ӘСӘ һөтөнән.**

**М. Горький**

# И.Х. ӘХТӘМОВ

# ӘСӘ

## МӘКӘЛДӘР ҺӘМ ӘЙТЕМДӘР

**ҺҮҘЛЕК**

***Башҡортостан Республикаһы***
***Министрҙар Кабинетының***
***«Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәрен***
***һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү буйынса***
***дәүләт программаһы»на индерелде***

ӨФӨ
«КИТАП»
**2002**

УДК 398 (03)
ББК 82
Ә 89

Әсә: Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Һүҙлек./ Автор-төҙөүсе
Ә 89 М. Х. Әхтәмов — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте,
2002. — 104 бит.

ISBN 5-295-02987-5

**Был йыйынтыҡта *эсә* һүҙенә бәйләнешле 106 һүҙ менән шул һүҙҙәр осраған 2452 мәҡәл һәм әйтем бар.**

**Унда ҡөрәкле материалдар тупланған ике ҡушымта ла бирелә.**

**Китап киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә.**

**УДК 398 (03)**
**ББК 82**

**ISBN 5 -295-02987-5**

**© М.Х. Әхтәмов, 2002**

*Һөйөклө тсәрсәйем менән әсәйемдең ятсты иçтәлегенә*

## БАШ ҺҮҘ

*Әсә, эсэй, инә, инәй...*

Был һүҙлектә *әсэ* һүҙенә бәйләнешле 106 һүҙ менән шул һүҙҙәр осраған 2452 мәҡәл һәм әйтем бар. Унда теркәлгән барлыҡ мәҡәлдәр һәм әйтемдәр «Башҡорт халыҡ ижады. Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр» (Өфө, 1980, 472 бит) йыйынтыгынан алынды.

Китапты, ҡыҙыҡ күреп, баштан алып аҙаҡҡа тиклем тотош уҡып сығырга мөмкин. Уның теләһә ҡайһы битен асып, шул биткә тура килгән һүҙгә йәки һүҙҙәргә бирелгән мәҡәлдәрҙе һәм әйтемдәрҙе генә уҡырға ла була.

Һүҙлектән теге йәки был һүҙ менән ниндәй һәм нисә мәҡәл һәм әйтем барлыгын билдәләүе, йә булмаһа теге йәки был һүҙ менән кәрәкле мәҡәлде һәм әйтемде табыуы ауыр түгел. Ғәмәлдәге йыйынтыҡтарҙың төҙөлөү принциптары икенсе булганлыҡтан, уларҙа теге йәки был һүҙ менән кәрәкле мәҡәлде йәки әйтемде табыу — ҙур проблема. Э инде уларҙа теге йәки был һүҙ менән ниндәй һәм нисә мәҡәл, әйтем барлығын белеү тураһында уйларга ла ярамай. Мәçәлән, был һүҙлек төҙөлгәс, сығанаҡ йыйынтыҡта *әсә* һүҙе менән 30 мәҡәл һәм әйтем барлыгы асыҡланды. Ләкин сығанаҡ йыйынтыҡтан шул мәҡәлдәрҙең һәм әйтемдәрҙең береһен табыу ҙа ауыр.

Һүҙлек теге йәки был мәҡәлдең һәм әйтемдең ғәмәлдәге йыйынтыҡтарҙа теркәлеү-теркәлмәүен билдәләү өсөн дә һәйбәт ҡулланма була ала.

Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр һүҙлек статьяһы эсендә бирелә.

Һүҙлек статьяһы башына *әсә* һүҙе менән бәйләнгән һүҙҙәр сығарыла. Улар үҙҙәренең башлангыс формаһында ҡалын хәрефтәр менән алфавит тәртибендә урынлаштырыла.

Һәр һүҙлек статьяһы эсендәге мәҡәлдәр һәм әйтемдәр ҙә үҙҙәренең беренсе һүҙҙәренән башлап алфавит тәртибендә бирелә.

Һүҙлек статьяһын башлаусы һүҙ, шул һүҙлек статьяһы эсендә бирелгән мәҡәлдәрҙең һәм әйтемдәрҙең ҡайһы урынында (башындамы, уртаһындамы, аҙағындамы) килеүенә ҡарамаçтан, *курсив* менән айырып бирелә.

һәр мәҡәл һәм әйтем аҙағында йәйәләр эсендәге һан йәки һандар был мәҡәл йәки әйтем сыганаҡ йыйынтыҡтың нисәнсе битендә йәки биттәрендә торғанлыгын күрһәтә.

Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр йыйынтыҡтағыса үҙгәрешһеҙ алына.

# Башҡорт теленең алфавиты

| | | |
|---|---|---|
| Аа | Ҡҡ | Фф |
| Бб | Лл | Хх |
| Вв | Мм | Һһ |
| Гг | Нн | Цц |
| Ғғ | Ңң | Чч |
| Дд | Оо | Шш |
| ȝ? | Өө | Щщ |
| Ее | Пп | Ъъ |
| Ёё | Рр | Ыы |
| Ж ж | Сс | Ьь |
| Зз | Çç | Ээ |
| Ии | Тт | Әә |
| Йй | Уу | Юю |
| Кк | Үү | Яя |

# А r

**абыштка**

Аптыраған ҡатын *абыштkahын* «атай» тигән (149).

**аға**

*Аға* булыр егеттең итәк-еңе киң килер (78).
*Ағаhы* барҙың hағы бар, балаhы барҙың ялы бар (147).
*Ағаhын* күрен эне үҫер, апаhын күреп hеңле үҫер (147).
Аҡыллы ир — ил *ағаhы,* аҡылhыҙ ир — ил бәләhе (362).
Баҫалҡы булhаң, баҫырҙар,
    Уҫал булhаң, аҫырҙар,
    Уртаса уҫал булhаң, ил *ағаhы* яhарҙар (263).
Иҙел — Яйыҡтың *ағаhы,*
    Ағиҙел — илдең яғаhы (82).
Илен ҡурсыған ил *ағаhы* булыр,
    Илен борсоған ил буҫағаhы булыр (84).
Иллеләге — ил *ағаhы* (367).
Тун яғаhыҙ булмаҫ, ил *ағаhыҙ* булмаҫ (89).
Үҙ *ағаhын* ағаламаған кеше *ағаhын* hағалай (183).
Күҙ тейhә — *ағаға,* уҡ тейhә — боғаға (92).
Энеhе яҡшы булhа — *ағаhының* бәхете,
    Балаhы яҡшы булhа — атаhының бәхете (185).

**аға-эне**

Атың яман булhа, hатып ҡотолорhоң;
    *Аға-энең* яман булhа, ҡасып ҡотолорhоң;
    Ҡатының яман булhа, нисек ҡотолорhоң? (151).

**ағай**

***Ағай*** **алганда, еңгә йыйганда яҡшы (146).**
***Ағай*** **булыр егеттең итәк-еңе киң булыр (193).**
***Ағай*** **булыр егеттең әйткән һүҙе им булыр.**
**Булыр-булмаҫ егеттең әйткән һүҙе ел булыр (339).**
***Ағай*** **— оло, мин — ҙур, атҡа бесән кем һалыр? (61).**
***Ағайым*** **алгансы, еңгәм килгәнсе (яҡшы) (441).**
***Ағайым*** **кемде алһа — еңгәм шул,**
**Апайым кемгә барһа — еҙнәм шул (147).**
***Ағайым*** **өйө — аҡ йәйләү, энем өйө — өң төбө (147).**
**Аптыраганда ахмаҡка ла *«ағай»* тиерһең (324).**
**Йәйләүгә тугай яҡшы, кәңәшкә *ағай* яҡшы (168).**
**Үлгән *ағайға* югалган тай (193).**
**Яҡшы *ағай* ил көтһә, йорт кәрәген үтенер.**
**Яман *ағай* ил көтһә, илгә дошман килтерер.**
**Яҡшы *ағай* йорт көтһә, йортка шатлык килтерер.**
**Яман *ағай* йорт көтһә, йәм-байлығын бөтөрөр (93).**

**ағайҙыҡы**

***Ағаиҙъпсы*** **алғансы, еңгәнеке елгәнсе (146).**

**ағай-эне**

***Ағай-эне*** **— агай-эненең көҙгөһө (146).**
***Ағай-эне*** **аҙһа, ала булыр (146).**
***Ағай-эне*** **бер үлелә, бер терелә кәрәк (146).**
***Ағай-эне*** **менән аш татлы (147).**
***Ағай-эне*** **талашыр, атҡа менһҙ ярашыр (147).**
***Ағай-эне*** **татыу булһа, ат күп булыр.**
**Апһын-әзе татыу булһа, аш күп булыр (147).**
***Ағай-эне*** **татыу булһа, менергә ат етә,**
**Килендәштәр татыу булһа, ашарға аш етә (441).**
***Ағай-эне*** **яуга кәрәк, мал дауга кәрәк (147).**
***Ағай-энегә*** **ҡарап мал үҫер, ҡарагайга ҡарап тал үҫер (146).**
***Ағай-эненең*** **аты уҙғансы, ауылдашыңдың тайы уҙһын (146).**
***Ағай-эненең*** **аты үткәнсе, үҙ ауылыңдың эте үтһен (441).**
***Ағай-эненең*** **ҡыҙыгы — алыш-биреш,**
**Ҡоҙалыктың ҡыҙығы — барып килеш (147).**
***Ағай-эненең*** **тартышы — туй бүләге йыртышы (147).**

*Агай-эненэн* айыу-бүре ҡурҡҡан (146).
*Ағай-энең* бар ерҙә «дошманым юҡ» тимә,
Апһының бар ерҙә «көндәшем юҡ» тимә (146-147).
Алты *ағай-эненән* айыу-бүре ҡурҡыр (148).
Арғымаҡты яманлап, толпарҙы ҡайҙан табырһың?
*Ағай-энеңде* яманлап, яҡынды ҡайҙан табырһың? (149).
Аргымаҡты яманлап, толпар ҡайҙан табырһың,
*Ағай-энеңде* яманлап, туған ҡайҙан табырһың? (441).
Ата-инә ҡәҙерен балалы булғас белерһең,
*Ағай-эне* ҡәҙерен ялалы булғас белерһең (152).
Ҡайҙа үҫкән — шунда үҫкән, бүтәкәле күлдә үҫкән,
Тауҙа йәйелеп таштта үҫкән, *ағай-эненән* башҡа үҫкән (191).
Тауға ҡарап тау булма, *ағай-энеңә* яу булма (179).
Түшке айылдың батҡанын эйәһе белмәҫ, ат белер;
Ир-егеттең ҡәҙерен *ағай-эне* белмәҫ, ят белер (180).
Үҙенең башын ҙур тотҡан, *ағай-эне* башын хур тотҡан —
туган тапмай яуҙа үлер (183).
Ярлы булыр егет бейәһен атҡа һатыр,
Яңғыҙ булыр еғет *ағай-энеһен* ятка һатыр (189).

**ана**

Агасына күрә алмаһы, *анаһына* күрә балаһы (147).
*Ана* күңеле балала, бала күңеле далала (149).
*Ана* һөтө менән инмәгән тана һөтө менән инмәй (149).
Атаң алтмышҡа етһә, ялсы кәрәкмәҫ,
*Анаң* алтмышҡа етһә, ашнаҡсы кәрәкмәҫ (153).
Бала шатлығы — *ана* шатлығы (155).
Был да балам балаһы — балдан татлы *анаһы.*
Был да балам балаһы — ҡара йылан *анаһы* (190).

**апа**

Ағаһын күрен эне үҫер, *апаһын* күрен һеңле үҫер (147).

**апай**

Ағайым кемде алһа — еңгәм шул,
*Апайым* кемгә барһа — еҙнәм шул (147).
Ишек бауы — бер алтын, беҙлең *апай* — мең алтын (145).

**апһын**

Ағай-энең бар ерҙә «дошманым юҡ» тимә,
*Апһының* бар ерҙә «көндәшем юҡ» тимә (146-147).
*Апһын* ағарып алдыма сыҡмаһын, ҡарайып артымда ҡалмаһын (149).
*Апһынды апһын* күрә алмай (149).

**апһын-әзе**

Ағай-эне татыу булһа, ат күп булыр,
*Апһын-әзе* татыу булһа, аш күп булыр (147).

**ата**

Аҡылһыҙ атҡа менһә, *атаһын* танымаҫ (363).
Алтмыштағы *атаңдың* алдап-йолдап көнөн күр (148).
Алты көн ас булһаң да, *ата* ғәҙәтен ҡуйма (148).
Аптыраған *атаһының* ҡуйынын аҡтарғап (332).
Аптыраған бала *атаһының* һаҡалы менән уйнар (149).
Ас *атаһын* тыңламаҫ (229).
Аҫылһыҙ атҡа менһә, *атаһын* танымаҫ (149, 262).
Аҫылын һорамай аш бирмә, *атаһын* һорамай мал бирмә (220).
Ат башы менән уйнағансы, *атаң* башы менән уйна (65).
Ата алмаған *атаһына* үпкәләр (36, 151).
*Ата* — алтын ҡаҙаҡ, инә — алтын ҡанат (151).
*Ата* — ата ҡаҙ, инә — инә ҡаҙ (151).
*Ата* байлығы улға йоҡмаҫ, әсә байлығы ҡыҙға йоҡмаҫ (151).
*Ата* балаһы алтмышҡа етмәй аҡыл тапмаҫ (365).
*Ата* балаһы ҡайғыға сыҙаһа ла, шатлыҡҡа сыҙамаҫ (339).
*Ата* балаһы хур булмаҫ (151).
*Ата* балаһында хата була (324).
*Ата* булмай атайың ҡәҙерен белмәҫһең,
Әсә булмай әсәйең ҡәҙерен белмәҫһең (151).
*Ата* ғәйрәтле булһа, бала ғибрәтле була (151).
*Ата* ҡарғышын күк күтәрмәҫ, әсә һағышын ер күтәрмәҫ (152).
*Ата* маҡтағанды алма, ауыл маҡтағанды ҡуйма (127).
*Ата* малы менән ул тормаҫ,
Инә малы менән ҡыҙ тормаҫ (208).

*Ата* улды белмәй, инә ҡыҙҙы белмәй (151).
*Ата* үлеп, бала ҡалһа — моратына еткәне.
Бала үлеп, *ата* ҡалһа — бөкрәйеп үлеп киткәне (151).
*Ата* үлеү — арҡа һыныу, инә үлеү — бәғер итең һулыу (151).
*Ата* һәнәре — балаға мираҫ (152).
*Ата* һүҙен тотмаған, әсә һүҙе йоҡмаған — яуға сабыр ир булмаҫ (151).
*Ата* юлы балаға таҡыр (151).
*Атаға* ул булмаһаң, ҡайныға ҡол булырһың (151).
*Атанан* алтау тыуһаң да, башыңа бер яңғыҙлыҡ төшөр (152).
*Атанан* алтау тыуһаң да, бәләң яңғыҙ башыңа (152).
*Атанан* бала йәш ҡалһа, көн итеүен көн дә уйлар (152).
*Атанан* бала тыуһа ине, атаһы юлын ҡыуһа ине (152).
*Атанан* бала тыуыр, атаһының юлын ҡыуыр (152).
*Атанан* йәш ҡалдым, аҡылдан буш ҡалдым (190).
*Атанан* күргән уҡ юныр, инәнән тыуған нағыш тегер (441).
*Атанан* күргән уҡ юныр, инәнән күргән тун бесер (152).
*Атанан* тыумай ул булмаҫ, әсәнән тыумай ҡыҙ булмаҫ (152).
*Атанан* тыуһын ул,
*Ата* юлын ҡыуһын ул.
*Ата* юлын ҡыумаһа,
Тыуғанынан тыумағаны (444).
*Атанан* ул тыуһа ине, *ата* юлын ҡыуһа ине,
Биленә һаҙаҡ быуһа ине,
Битенә килер оятты үҙе белеп йыуһа ине (190).
*Атанан* яҡшы тыуһа — ятып ашар,
*Атанан* яман тыуһа — һатып ашар (152),
*Атанан* яҡшы ул тыуһа, ҡар өҫтөндә ут яғыр.
*Атанан* яман ул тыуһа, ат өҫтөндә эт ҡабыр (152).
*Атаны* күрен ул үҫер, инәне күрен ҡыҙ үҫер (153).
*Атаң* алтмышҡа етһә, ялсы кәрәкмәҫ.
Анаң алтмышҡа етһә, ашнаҡсы кәрәкмәҫ (153).
*Атаң* барҙа дуҫ эҙлә, атың барҙа юл эҙлә (199).
*Атаң* барҙа ир таный, нәҫелең барҙа ил таный (153).
*Атаң* менән маҡтанма, атың менән маҡтан (153, 262).
*Атаң* усағын һүндермә (153).
*Атаң* утынсы булһа, ҡулыңда балтаң булһын (153).
*Атаң* яҡшы, инәң яҡшы, һин кемгә оҡшап шаҡшы? (190).

*Атаңдан* айырылһаң айырыл, илеңдән айырылма (79).
*Атаңдың* гына улы булма, халҡыңдың да улы бул (79).
*Атаһы* айырымды яу ҡушыр, өйөрө айырымды яу ҡушыр (117).
*Атаһы* башҡа менән ҡуян аулама (199).
*Атаһы* башҡаның бабаһы башҡа, бабаһы башҡаның доғаһы башҡа (153).
*Атаһы* башҡаның батаһы башҡа (153).
*Атаһы* болан атмағандың балаһы ҡолан атмаҫ (153).
*Атаһы* болан танымағандың балаһы ҡолан танымаҫ (441).
*Атаһы* дуҫтың балаһы дуҫ (199).
*Атаһы* күрер — улы һөйләр, әсәһе күрер — ҡыҙы һөйләр (153).
*Атаһы* ҡолан атмағандың балаһы ҡуян атмаҫ (441).
*Атаһы* ҡорҙаштың балаһы ҡорҙаш (153).
*Атаһы* ни эшләй, балаһы шуны эшләй (153).
*Атаһы* тороп, улы һөйләгәндән биҙ,
Инәһе тороп, ҡыҙы һөйләгәндән биҙ (153).
*Атаһы* һуҡкан ҡыҙ бәхетһеҙ була, ти (153).
*Атаһы* һуҡкан ул уңыр, инәһе һуҡкан ул уңмаҫ (153).
*Атаһы* юҡ ул — ҡуштан, инәһе юҡ — инмәй тыштан (153).
*Атаһы* юҡтың яҡ-яғы юҡ (153).
*Атаһын* күр ҙә — улын ҡос, әсәһен күр ҙә — ҡыҙын ҡос (127).
*Атаһын* күр ҙә — улына ҡыҙ бир (127).
*Атаһын* үлтергәнде уғлан онотмаҫ,
Ҡойроғон киҫкәнде йылан онотмаҫ (153).
*Атаһына* оҡшап ул тыумаҫ, инәһенә оҡшап ҡыҙ тыумаҫ (153).
*Атаһының* аты бар, инәһенең туны бар — иҫәүәнгә ни ҡайғы? (262).
*Аты* юғалған атаһының кеҫәһен ҡарар (һатманымы икән тип) (324).
Атың барға ҡыуанма, *атаң* барға ҡыуан (151).
Ахыры заман килһә, *атаһы* тороп — улы һөйләр, инәһе тороп — ҡыҙы һөйләр (341).
Бай кешенең ҡыҙын алһаң, *атаһы* менән маҡтаныр,
Ярлы кеше ҡыҙын алһаң, өҫтәл аҫтын аҡтарыр (128).
Бала башында бер ҡайғы, *ата* башында мең ҡайғы (154).

**Бала өсөн әсәнең йөрәге, *атаның* беләге һыҙлар (155).**
**Балаһы атка менеп сапһа, *атаһы* ботон кыҫыр (157).**
**Башһыҙ өйҙә *ата* тороп, ул һөйләр, инә тороп, ҡыҙ һөйләр (157).**
**Бер *ата* туғыҙ улды аҫрар, туғыҙ ул бер атаны аҫрамаҫ (158).**
**«Бир»ҙең *атаһы* үлгән (227).**
**Бохар даны менән буҙ үтер, *ата* даны менән ҡыҙ үтер (158).**
**Буштың *атаһы* үлгән (227).**
**Дан килер ҙә китер, якшы исем *атанан* балага етер (265).**
**Ете *атаға* еткәс, ҡыҙ бауыры алышыр (130).**
**Ете *атаһын* белмәгән — етемлектең билгеһе (161).**
**Ете *атаһын* белмәгән — мөртәт (161).**
**Етемдең *атаһы* ете (162).**
**Иҙел даны менән боҙ китә, *ата* даны менән ҡыҙ китә (162).**
**Илағыһы килгән бала *атаһының* һаҡалы менән уйнар (163).**
**Илар бала *атаһының* һаҡалы менән уйнар,**
**Илар түрә иле менән уйнар (82).**
**Инә ҡаҙ йомортка баҫканда, *ата* ҡаҙ янында бейер (163).**
**Инә ҡаҙ ҡаңғылдамаһа, *ата* ҡаҙ бармай (131).**
**Инәң үлһә — йылғаң ҡороно, *атаң* үлһә — таянған тауың ауҙы (163).**
**Ир арыҫланы — *ата* балаһы, ҡайҙа барһа ла сер бирмәҫ (195).**
**Йүнһеҙ бала *ата* йортон хурлар (186).**
**Командирҙың приказы — *атаң* наказы (120).**
**Көслө *атаһын* йығыр (302).**
**Күтәреп бәйләһәң, *атаң* туны ла таман була (250).**
**Ҡорал менән уйнағансы, *атаңдың* башы менән уйна (121).**
**Ҡояш ҡарағанда йөрөп ҡал, *атаң* ҡарағанда кейенен ҡал (250).**
**Ҡыҙ ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә,**
**Ул уллы булмаҫ, *ата* ҡәҙерен белмәһә (175).**
**Ҡыҙҙы әсәһе һаҡлаһын, улды — *атаһы* (175).**
**Мөгөҙөн һындырғанды болан онотмаҫ,**
***Атаһын* үлтергәнде уғлан онотмаҫ (304).**
**Мөгөҙөн һындырғанды болан онотмаҫ,**
***Атаһын* хурлағанды уғлан онотмаҫ (176).**
**Мәкәл — һүҙҙең *атаһы,* вәғәҙә — ирҙең вафаһы (349).**

Сусҡаның балаһы, *атаһынан* күреп, мырҡылдарға өйрәнә (179).
«Тик»тең *атаһы* дегәнәккә батҡан (361).
Төп *атаһы* — Майҡы бей (288).
Уҡыған угыл *атанан* оло (372).
Улы урманга барһа, *атаһы* урамга һыймай (182).
Үҙе булган егеттең төп *атаһын* төпсөмә (440).
Үҙең *ата* булмайса, *ата* ҡәҙерен белмәҫһең (183).
Үҙеңде күргән үлһә үлһен, *атаңды* күргән үлмәһен (184).
Үс *атаһын* үлтерер (306).
Хәйерһеҙ ул *ата* нигеҙен таратыр (184).
Һарандың ашын көткәнсе, *атаңдың* башын көт (282).
Һүҙ юҡта һүҙ булһын — *ата* ҡаҙың күкәй һаламы? (361).
Энеһе яҡшы булһа — агаһының бәхете,
Балаһы яҡшы булһа — *атаһының* бәхете (185).
Эт *атаһын* танымаҫ (186).
Эттең инәһе — бер, *атаһы* — ҡырҡ (186).
Эшләгәнең *атаң* менән әсәң өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙең өсөн (146).
Яҡшы *атаның* балаһы — яҡшы тундың ягаһы (187).
Яҡшы бала яман *атаның* ишектәге башын түргә һалыр,
Яман бала яҡшы *атаның* түрҙәге башын ишеккә һалыр (187).
Яҡшы балага *ата* малы кәрәкмәй,
Яман балага мал ҡалдырыу кәрәкмәй (187).
Яҡшынан яҡшы ни яҡшы?
Туган менән тиң яҡшы,
Алтын-көмөш сыҡкан ерҙән
*Атаның* өйө иң яҡшы (188).
Ялкауга эш ҡушһаң, *атаң* бирмәгән өгөттө бирер (60).
Яуыз бала *атаһының* ауыҙын ябыр (189).

ата-баба

*Ата-бабам* баҡҡан ер — кендек ҡаным аҡҡан ер (79).

**ата-инә**

Астан үлһәң дә, *ата-инәңде* ташлама (149).
*А та-инә* алғышы утка-һыуга батырмаҫ (152).

*Ата-инә* — алтын һөйәк (152).
*Ата-инә* берҙәм булһа, балалары күндәм була (152).
*Ата-инә* йәше менән, улы-ҡыҙы эше менән (152).
*Ата-инә* ҡәҙерен балалы булғас белерһең.
Ағай-эне ҡәҙерен ялалы булғас белерһең (152).
*Ата-инәгә* ҡәҙер күрһәткән бала-сағанан ҡәҙер күрер (152).
*Ата-инәнең* ҡайғыһы — улда-ҡыҙҙа,
Улдың-ҡыҙҙың ҡайғыһы — тауҙа-ташта (152).
*Ата-инәнең* үлгәне — баланың хурлыҡ күргәне (152).
*Ата-инәң* барҙа хөрмәт ит, үлгәс, зыярат ит (152).
*Ата-инәңә* ни ҡылһаң, алдыңа шул килер (152).
*Ата-инәһен* һөймәгән ҡыҙ яман,
Ҡан-ҡәрҙәшен һөймәгән ул яман (151).
*Ата-инәһен* яманлаған ят дошманға таи булыр (152).
*Ата-инәһенә* изгелек күрһәтмәгән үҙе лә изгелек күрмәҫ (152).
Бала *ата-инәгә* алтын бағана (154).
Баланың ғәйебе — *ата-инәнеке* (156).
Донъяла *ата-инәнән* башҡа бар нәмә лә табыла (160).
Үҙе уңған еғеттең *ата-инәһен* һорама (141).
Ыласын ҡошҡа һауа ҡәҙерле,
Санҡан атҡа дала ҡәҙерле,
*Ата-инәгә* бала ҡәҙерле (185).

**ата-әсә**

Астан үлһәң дә, *ата-әсәңде,* тыуған иленде ташлама (78).
*Ата-әсәнән* ҡасҡан — яманлыҡ менән күҙен асҡан (152).
Ир бала — *ата-әсәгә* таяу, ҡыҙ бала — өйгә яҡкан буяу (164).
Яман ат башҡа һуҡтырыр, яман бала *ата-әсәһен* һүктерер (188).

**атай**

Алтмышҡа еткәс, *атайыңдан* аҡыл һорама (364).
Аптыраған ҡатын абышҡаһын *«атай»* тигән (149).
Ата булмай *атайың* ҡәҙерен белмәҫһең,
Әсә булмай әсәйең ҡәҙерен белмәҫһең (151).
*Атай* байлығы ерғә һеңер (208).

*Атай* — еҙнә, инәй — ҡаҙна (151).
*Атай* — кешән менән тышау, инәй — йөрәк менән үҙәк (151).
*Атай* малы — ҡатай малы (151).
*Атай* малы мал булмаç (208).
*Атай* оло, мин ҙур (359).
*Атай* тапҡан малдың ҡәҙере юҡ (208).
*Атай* үлде — иркен ҡалды, ҡыҙыл тышлы тун ҡалды (190).
*Атай* үлһә — маллы үлһен, ҡортоң үлһә — баллы үлһен (208).
*Атайҙар* һүҙе — аҡылдың үҙе (340).
*Атайым* ай күргән, иртәгә байрам икән (359).
*Атайым* йорто һаламдыр — һарай булып күренә.
Ҡайным йорто ҡабыҡтыр — тамуҡ булып күренә (190).
*Атайым* үлгәндә бер туйҙым, әсәйем үлгәндә бер туйҙым (190).
*Атайың* алтмышҡа етһә, ҡол итмә, үҙең дә ҡол булырһың (153).
*Атайың* үлһә лә, атайыңдың дуçын ташлама (199).
*Атайыңда* булғансы, алҡыныңда булһын (208).
*Атайыңдан* оло кеше менән уйнап һөйләшмә (340).
Атың барҙа ер таны, *атайың* барҙа ил таны (151).
Кеше малы мал түгел, *атай* малы йәл түгел (211).
Үҙ телем — үҙ ҡылысым.
*Атайҙан* ҡалған ҡоросом,
Илдә-көндә тынысым (354).
Үҙең тырышып тапмаһаң, *атай* малы — бер айлыҡ (215).
Эс серендә *атайыңа* ла әйтмә (356).
Әсәйең үгәй булһа, үҙ *атайың* да ят була (186).
Яҡшы балага *атай* малы кәрәкмәй.
Яман балага мал ҡалдырыу кәрәкмәй (216).
Яңгыҙ бала *атайға* баш (189).

**аталы**

*Аталы* бала — арҡалы, инәле бала — иркәле (152).
*Аталы* баланың ҡулы уйнаганда, атаһыҙ баланың күҙе уйнай (152).

**атаһыҙ**

Аталы баланың ҡулы уйнаганда, *атаһыҙ* баланың күҙе уйнай (152).

*Атаhыҙ* бала алты кешегә хаслыҡ итер (153).
*Атаhыҙ* бала етем түгел, әсәhеҙ бала етем (153).
*Атаhыҙ* етем — ярты етем, әсәhеҙ етем — гел етем (153).
*Атаhыҙ* тороп була — балтаhыҙ тороп булмай.
Инәhеҙ тороп була — энәhеҙ тороп булмай (36).
*Атаhыҙ* ул аҫрама, инәhеҙ ҡыҙ аҫрама (153).
*Атаhыҙға* ат бирмә, инәhеҙгә ҡыҙ бирмә (153).
*Атаhыҙҙы* кейәү итмә, инәhеҙҙе килен итмә (127).
*Атаhыҙҙы* ул итмә, инәhеҙҙе ҡыҙ итмә (150, 153).
Әсәhеҙҙе «килен» тимә, *атаhыҙҙы* «кейәү» тимә (186).

# Б

**баба**

Атаhы башҡаның *бабаhы* башҡа.
*Бабаhы* башҡаның доғаhы башҡа (153).

**бабай**

Әбей белен бешерә, *бабай* ҡабыҡ тошөрә (64).

бажа

*Бажа* менән *бажа* татыу, кәҙә менән кәҙә татыу (154).
*Бажаның* барлығы — кәзәнең маллығы (154).
Барыр ере булмаған *бажаhы* өйөнә барыр (157).
Ете *бажаны* бер бүре ашаған (161).
Нужа күргең килhә, юлға сығып ҡун.
Фатир тапмаhаң, *бажаңа* кереп ҡун (177).
Өс *бажаны* бүре ашамай (178).
Эттең *бажаhы* күп, ҡоҙаhы юҡ (186).

**бала**

Ағасына күрә алмаhы, анаhына күрә *балаhы* (147).
Ағаhы барҙың hағы бар, *балаhы* барҙың ялы бар (147).
Айыу *балаhын* алга hалhаң да иш булмаҫ (94, 198).
Айыу *балаhын* итәккә hалhаң да илекмәҫ.
Бүре *балаhын* бүреккә hалhаң да берекмәҫ (148).
Алғы итәгендә *бала* баҫhын, арт итәгендә мал баҫhын (189).

Ана күңеле *балала,* бала күңеле далала (149).
Аптыраған *бала* атаһының һаҡалы менән уйнар (149).
Арыҫлан *балаһы* арыҫлан булыр (149).
Аҫыл ҡоштоң *балаһы* алдына ҡуймай аш ешмәҫ(й) (149, 230).
Ат булыр ҡолондоң түше яҫы килер,
Әҙәм булыр *баланың* маңлайы яҫы килер (150).
Ат яманы тай менән уйнар, әҙәм яманы *бала* менән уйнар (150).
Ата *балаһы* алтмынгка етмәй аҡыл тапмаҫ (365).
Ата *балаһы* ҡайғыға сыҙаһа ла, шатлыҡҡа сыҙамаҫ (399).
Ата *балаһы* хур булмаҫ (151).
Ата *балаһында* хата була (324).
Ата ғәйрәтле булһа, *бала* ғибрәтле була (151).
Ата-инә берҙәм булһа, *балалар* күндәм була (152).
Ата-инәнең үлгәне — *баланан* хурлыҡ күргәне (152).
Ата үлеп, *бала* ҡалһа — моратына еткәне,
*Бала* үлеп, ата ҡалһа — бөкрәйеп үлеп киткәне (151).
Ата һәнәре — *балаға* мираҫ (152).
Ата юлы *балаға* таҡыр (151).
Аталы *бала* — арҡалы, инәле *бала* — иркәле (152).
Аталы *баланың* ҡулы уйнағанда, атаһыҙ *баланың* күҙе уйнай (152).
Атанан *бала* йәш ҡалһа, көн итеүен көн дә уйлар (152).
Атанан *бала* тыуһа ине, атаһы юлын ҡыуһа ине (152).
Атанан *бала* тыуыр, атаһының юлын ҡыуыр (152).
Атаһы болан атмағандың *балаһы* ҡолан атмаҫ (153).
Атаһы болан танымағандың *балаһы* ҡолан танымаҫ (441).
Атаһы дуҫтың *балаһы* дуҫ (199).
Атаһы ҡолан атмағандың *балаһы* ҡуян атмаҫ (441).
Атаһы ҡорҙаштың *балаһы* ҡорҙаш (153).
Атаһы ни эшләй, *балаһы* шуны эшләй (153).
Атаһыҙ *бала* алты кешеғә хаслыҡ итер (153).
Атаһыҙ *бала* етем түғел, әсәһеҙ *бала* етем (153).
Атына күрә санаһы, заманына күрә *балаһы* (150).
Ауыҙы-мороно ҡыйыш булһын, бай *балаһы* һөйләһен (95).
Бай *балаһы* байға оҡшар, бей *балаһы* бейғә оҡшар (95).
Бай *балаһы* ун бишкә еткәс баш,
Ярлы *балаһы* утыҙға еткәс тә йәш (95).

Һайҙы мал баҫыр, ярлыны *бала* баҫыр (97).
Баҡмаһаң — *бала* китер, ҡарамаһаң — ҡатын китер (154).
Бал татлы, балдан *бала* татлы (154).
*Бала* — ата-инәгә алтын бағана (154).
*Бала бала* булһа — *бала, бала* булмаһа — бәлә (154).
*Бала балаһы* балдан татлы (154).
*Бала* бар ерҙә батша юҡ (154).
*Бала* баҡмаҡ — йән сыҡмаҡ (154).
*Бала* — бауыр, дуҫ — тамыр (199).
*Бала* — бауыр ите, ир — йөрәк ите (154).
*Бала* башында бер ҡайғы, ата башында мең ҡайғы (154).
*Бала* — бәғер (154).
*Бала* бәләкәй сағында беләккә ауыр, үҫкәс, йөрәккә ауыр (155).
*Бала* заманына оҡшап тыуа (155).
*Бала* илай-илай үҫә (155).
*Бала* йөрәк ярып сығыр (155).
*Бала* көйөгө — йөрәктә, ир көйөгө — итәктә (155).
*Бала* көлкөгә туймаҫ (155).
*Бала* көлкөғә туймаҫ, ялҡау йоҡоға туймаҫ (37).
*Бала* күргәнен эшләр (155).
*Бала* күрмәгән — балдан ауыҙ итмәгән (155).
*Бала* ҡарама ҡыуышынан төшмәй (әсәнән тыуа) (155).
*Бала* ҡәҙерен әсә белер, ил ҡәҙерен ир белер (79).
*Бала* менән *бала* булма (155).
*Бала* өсөн әсәнең йөрәге, атаның беләге һыҙлар (155).
*Бала* саҡта һөйҙөрә, үҫә-килә көйҙөрә (155).
*Бала* саҡтан кергән гәҙәт ғүмергә ҡалыр (155).
*Бала* таба белдең, үҫтерә лә бел (190).
*Бала* табыу — бер ҡыйын, *бала* бағыу — мең ҡыйын (155).
*Бала* — тал сыбыҡ (155).
*Бала* тапмаҫ ҡатын булмаҫ — торорон әйт,
Мал тапмаҫ еғет булмаҫ — тоторон әйт (208).
*Бала* уңған ҡатындың бер ҡулын бәйләй,
Уңмаған ҡатындың ике ҡулын бәйләй (155).
*Бала* — уңһа ғына *бала,* уңмаһа — бәлә (155).
*Бала* үҫтерһәң, буйын ғына үҫтермә, аҡылын да үҫтер (155).
*Бала* шатлығы — ана шатлығы (155).

*Бала* әтәс кәпрәйеп бөркөт була алмай (263).
*Бала* яйына торһаң, *бала* булырһың (155).
*Бала* яратмаған кешенең *балаһы* күп булыр (155).
*Балаға* ике ат бер тин (155).
*Балам* бар тип һөйөнмә, һау тип һөйөн (156).
*Баланан* бәхетең булһа, ҡарт көнөңдә йәш итер.
*Баланан* бәхетең булмаһа, иртә йәштән ҡарт итер (156).
*Баланы* баштан, талды йәштән бөк (156).
*Баланы* бишектә, ҡатынды йәшлектә өйрәт (156).
*Баланы* бишектә өйрәт (156).
*Баланы* иркәләү типкеләүҙән яман (156).
*Баланы* йәштән өйрәт (156).
*Баланы* ҡыйнағансы, бағананы ҡыйна (156).
*Баланы* табыу һәнәр түгел, бағыу һәнәр (156).
*Баланы* туҡмап йыуатма, көйләп йыуат (156).
*Баланы* яй бөкһәң — күндерерһең, ҡапыл бөкһәң — һындырырһың (156).
*Баланың* аҙары булһа ла, биҙәре булмай (156).
*Баланың* ғәйебе — ата-инәнеке (156).
*Баланың* бармағы ауыртыр, инәнең йөрәге ауыртыр (156).
*Баланың* башына һуҡма: аңра булыр (156).
*Баланың* тинтәк булыуы өйөнән, еғеттең тинтәк булыуы бейенән (156).
*Баланың* тыуғанына ҡыуанма, торғанына ҡыуан (156).
*Баланың* хәсрәте үҙе менән берғә үҫә (156).
*Баланың* һүҙе батмандай (ауыр) (156).
*Балаң* булһа ине ураҡта, булмаһа ине ҡунаҡта (156).
*Балаң* булһа — күп булһын, булмаһа — юҡ булһын (156).
*Балаң* булһа — шуҡ булһын, шуҡ булмаһа — юҡ булһын (156).
*Балаң* йомошҡа китһә, артынан үҙең бар (156).
*Балаң* үлде — алтын бағанаң ауҙы (156).
*Балаң* үлһә, балда ла тәм булмаҫ (156).
*Балаң* үлһә, бер төнгө йоҡоң осор.
Ҡатының үлһә, бер өйөрлө йылҡың сығыр (156).
*Балаң* яман булһа — әжәлең өйөңдә (156).
*Балаңды* боҙғоң килһә, маҡта (157).
*Балаңдың* уйнағанына, ҡаҙандың ҡайнағанына ҡыуан (157).

*Балаһы* атҡа менеп сапһа, атаһы ботон ҡыҫыр (157).
*Биҙәү* ҡатын — *бала* тапмаган ҡатын (442).
Биләүҙәге *бала* бишкә төрләнә (442).
Бишек *балаһы* — бей *балаһы* (158).
Булыр ат ҡолон саҡтан билгеле, булыр *бала бала* саҡтан билгеле (159).
Булыр *бала* биләүҙән (билдәле) (159).
Булыр *баланың* ҡылыгы яҡшы булыр (159).
Булыр-булмаҫ *баланың* барынан югы артыҡ (159).
Бурлыҡ ир *балала* сыбыртҡынан, ҡыҙ *балала* энәнән башлана (325).
Бүре *балаһын* аҫрап, эт булмаҫ (159).
Бүре *балаһын* бүрек эсенә һалһаң да ятмаҫ (200).
Бүре *балаһын* бүреккә һалһаң да илекмәҫ (438).
Бүре *балаһын* бүреккә һалһаң да иш булмай,
Кеше *балаһын* ҡултыҡҡа ҡыҫһаң да ҡол булмай (159).
Бүре *балаһын* бүреккә һалһаң да урманга ҡарай (101, 159).
Бүре *балаһын* тоторга өйрәтһә, һарыҡ бәрәсен ҡасырға өйрәтер (159).
Был да *балам балаһы* — балдан татлы анаһы,
Был да *балам балаһы* —ҡара йылан анаһы (190).
Бәхетленең *балаһы* ун бишендә баш булыр.
Бәхетһеҙҙең *балаһы* утыҙҙа ла йәш булыр (159).
Дан килер ҙә китер, яҡшы исем атанан *балаға* етер (265).
Етеҙ *бала* етегә еткәнсе тешәй (161).
Етем *бала* байрамы — яңы күлдәк кейгәндә (161).
Етем *бала* — ете ауыҙ (161).
Етем *бала* тип кәмһетмә: бәхете булһа, ир булыр (161).
Етем *бала* ырыҫы ерҙән, ерҙән булмаһа — илдән (161).
Етем *балаға* балауыҙ ҙа аш (161).
Етем *балаға* йөҙөм еләге лә аш (161).
Етем *баланың* күңеле китек (161).
Етем быҙау аҫраһаң, ауыҙ-мороноң май булыр,
Етем *бала* аҫраһаң, ауыҙ-мороноң ҡан булыр (161).
Етем бәрәс һөткә туймаҫ, етем *бала* ашҡа туймаҫ (161).
Етем тыуған *бала* үҙ кендеген үҙе ҡырҡыр (161).
Ике *баланы* бергә иҫәплә, бер *баланы* юҡҡа иҫәплә (162).
Илагыһы килгән *бала* атаһының һаҡалы менән уйнар (163).

Илаҡ *баланы* илап тымыҙып булмай (163).
Иламаган *балаға* имсәк бирмәйҙәр (299).
Илар *бала* атаһының һаҡалы менән уйнар,
Илар түрә иле менән уйнар (82).
Илар *бала* инәһенең имсәген тешләр (163).
Инәнең һөтө — бал, *баланың* теле — бал (163).
Ир арыҫланы — ата *балаһы,* ҡайҙа барһа ла сер бирмәҫ (195).
Ир *бала* — алтын, алтын табаҡтан аш ашар (164).
Ир *бала* — ата-инәгә таяу, ҡыҙ *бала* — өйгә яҡҡан буяу (164).
Ир *бала* — йортҡа терәк, ҡыҙ *бала* — йорт эсендә биҙәк (164).
Ир *бала* тап, иркенләп ят (164).
Ир *балаға* ат кәрәк, ҡыҙ *балаға* — ҡанат (164).
Ир ҡайгыһы итәктә, *бала* ҡайгыһы йөрәктә (165).
Иргә — баш,
Ир *балаға* — аяҡ,
Ҡыҙ *балаға* — ҡанат,
Ҡатынга — ҡойроҡ (246).
Ирҙән оялгандың *балаһы* булмаҫ (166).
Ирем һүҙе аш кеүек, *балам* һүҙе таш кеүек (191).
Иркә *бала* байрамы — яңы күлдәк кейгәндә,
Етем *бала* байрамы — ауыҙы ашҡа тейгәндә (167).
Иркә *бала* итәкте буяй (167).
Ирмен тигән ир эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр.
Ҡатынмын тигән ҡатын эсендә бишекле *бала* ятыр (167).
Йүнһеҙ *бала* ата йортон хурлар (186).
Йылан үлтерһәң — *балаһын* ҡалдырма (119).
Йыландың *балаһы* ла йылан (120).
Кеше *балаһы* — кешән дә тышау, үҙ балаң — үҙәк тә бауыр (168).
Кеше *балаһы* кешәнләһәң дә тормаҫ,
Үҙ *балаң* үҙәгенә типһәң дә китмәҫ (168).
Кешене белгең килһә, ҡылыгына ҡара,
*Баланы* белгең килһә, уйынына ҡара (168).
Көтә белһәң — *бала,* көтә белмәһәң — бәлә (170).
Күлдең йәме ҡама менән, өйҙөң йәме *бала* менән (170).
Күнел — *бала:* күргәнен теләй (269).
Кәкүктең *балаһы* күрше ояһында (170).
Ҡарга ла *балаһына* «аппагым» тиер,
Керне лә *балаһына* «йомшагым» тиер (171).

Ҡатын кеше ҡамыр менән ҡартая, *бала* менән һарғая (171).
Ҡатын үлһә — юлдан табыла, *бала* үлһә — билдән табыла (172).
Ҡарында ятҡан *баланың* хан булаһын кем белер?
Биләүҙә ятҡан *баланың* бей булаһын кем белер? (171).
Ҡатынды яҡшы күрһәткән — алдындағы *балаһы.*
Һыйырҙы яҡшы күрһәткән — артындағы танаһы (172).
Ҡорттоң инәһе ҡайҙа ҡунһа, *балаһы* шунда һарыр (174).
Ҡоштоң ҡошо *бала* өсөн ҡапҡанға эләгә (174).
Ҡуян *бала* тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған (217).
Ҡыҙ *бала* — ҡаңғыл а ятҡан уҡ (174).
Ҡыҙ *бала* — ҡунаҡ ҡына (174).
Ҡыҙ *бала* миһырбанлы булыр (174).
Ҡыҙ *бала* — өй зиннәте (174).
Ҡыҙ *бала* төшкән ерендә таш булып батһын (136).
Ҡыҙ *баланы,* еткәс, тапшырған яҡшы (136).
Ҡыҙ *баланы* ҡыҙыл эт ҡойроғона бәйләһәң дә китер (136).
Ҡыҙ *баланың* аты эйәрле, башы бәйле (174).
Ҡыҙ *баланың* дәрте күкрәктә, ир баланың дәрте йөрәктә (136).
Ҡыҙ *баланың* сибәр булыуы яҡшы (174).
Ҡырҡ *бала* тапҡан, керер урын тапмаған (192).
Ҡыҫыр ҡатындан *бала* таптырма (46).
Ҡәйнәһенән оялған килен *бала* тапмаҫ (176).
Мал — бауыр ите, *бала* — йөрәк ите (176).
Мал булһа, *балаларға* мал ҡала, булмаһа — бурыс ҡала (176).
Мал менән *бала* — донъя зиннәте (176).
Мал менән *бала* — үҫкән һайын мәшәкәт тә бәлә (176).
Мал тапмаҫ ир булмаҫ, *бала* тапмаҫ ҡатын булмаҫ (177).
Нәҫеле ниндәй — *балаһы,* шундай (177).
Өйҙөң йәме *бала* менән, күлдең йәме ҡама менән (177).
Өйөңдә ни булмаһа, *бала* шуны һорай (178).
Сусҡаның *балаһы,* атаһынан күрен, мырҡылдарға өйрәнә (179).
Тауҙа тыуған ҡолондоң ике күҙе ташта булыр.
Аслыкта тыуған *баланың* ике күҙе ашта булыр (179).
Тауҙа тыуған ҡолондоң ике күҙе ташта булыр.
Етем үҫкән *баланың* ике күҙе йәштә булыр (443).

Теләп алған *бала* йүнһеҙ була (180).
Тыумаған *балаға* бишек элмәйҙәр (278).
Тыумаған *балаға* туҙ бишек (288).
Тыумаған *баланың* кендеген ҡырҡма (278).
Тәүге *балаға* һуңынан тыуған туғыҙ *баланың* ҡәҙере эләгә (181).
Уңған өйҙөң *балаһы* бер-береһенә «батыр» тир.
Уңмаған өйҙөң *балаһы* бер-береһенә «кафыр» тир (182).
Уңмаған ҡатындың *балаһы* тыңлауһыҙ булыр (182).
Ураҡ урмаҡ — уйнамаҡ, *бала* баҡмаҡ — йән сыҡмаҡ (182).
Ут асыуын — табанан, ир асыуын — *баланан* (192).
Үғәй *бала* үпкәсел (183).
Үҙ *балаң* — үҙәк менән бауыр, кеше *балаһы* — кешән менән тышау (183).
Үҙ *балаң* — үҙәктә, кеше *балаһы* — кештәктә (183).
Үҙ ғәйебеңдең низә икәнен *балаң* үҫкәс белерһең (183).
Үҙең ҡарға булһаң, *балаң* һандуғас булмаҫ (184).
Үкһеҙ *бала* үҙ кендеген үҙе киҫә, имеш (184).
Үҫер илдең *балаһы* бер-береһенә «батыр» ти.
Үҫмәҫ илдең *балаһы* бер-береһенә «бахыр» ти (91).
Үҫер илдең *балаһы* береһен береһе «батыр» ти,
Бөлөр илдең *балаһы* береһен береһе «кафыр» ти (437).
Үтеп киткән ямғырҙы ямылсы алып ҡыуырмы?
Аҫыл ирҙең *балаһы* аҫылһыҙ булып тыуырмы? (184).
Хәбәр һораһаң, *баланан* һора (354).
Хәйерсене *бала* баҫыр (107).
Хәйерһеҙ *бала* хәйерсе була (184).
Баран ҡатын ҡунаҡ алдын д р *балаһын* ҡыйнар (281).
Бөйөклө *бала* көйөклө була (184).
Бөрөлмәгән ер өҫтөндә тыумаған ҡуян *балаһы,* (289).
Бүҙҙең тураһын *баланан* ишет (356).
Ьыймаҫ ҡунаҡ *балаһын* эйәртен килер (243).
Ьәр бүренең *балаһы* алты булыр, биш булыр,
Араһында ғәйрәтлеһе бер булыр,
Шул ғәйрәтленән айырылһа, һәр ҡайһыһы һәр көндә
Ьәр бер эткә ем булыр (193).
Ыласын ҡошҡа һауа ҡәҙерле,
Санҡан атҡа дала ҡәҙерле,
Ата-инәгә *бала* ҡәҙерле (185).

Энеһе яҡшы булһа — агаһының бәхете,
    *Балаһы* яҡшы булһа — атаһының бәхете (185).
Эт *балаһы* — эт (186).
Эт *балаһы* бүрегә иш булмаҫ (107).
Эт тә эт *балаһын* тешләмәҫ (186).
Эттең *балаһы* эсендә өрә (315).
Эшкә ялҡау *(бала)* һабаҡҡа аңҡау булыр (55).
Әсә янында *бала* етем булмай (186).
Яҡшы атаның балаһы — яҡшы тундың ягаһы (187).
Яҡшы *бала* иленә баш булыр,
    Яман *бала* иленә хас булыр (187).
Яҡшы *бала* яман атаның ишектәге башын түргә һалыр.
    Яман *бала* яҡшы атаның түрҙәге башын ишеккә һалыр (187).
Яҡшы *балаға* ата малы кәрәкмәй,
    Яман *балаға* мал ҡалдырыу кәрәкмәй (187).
Яҡшы *балаға* атай малы кәрәкмәй,
    Яман *балаға* мал ҡалдырыу кәрәкмәй (216).
Ялган ҡатын *бала* тапмаган (188).
Ялҡау ҡатынға *бала* һылтау (193).
Яман ат башҡа һуҡтырыр,
    Яман *бала* ата-әсәһен һүктерер (188).
Яман ат, яман ҡатын — ирҙе шулар ҡартайтыр,
    Яман *бала,* яман ҡорал — ирҙе шулар һарғайтыр (188).
Яман *бала* өйгә һыймаҫ, өйҙән сыҡһа, илгә һыймаҫ (188).
Яман *баланың* барынан юғы (188).
Ямгыр яуһа — ер ырыҫы, яҡшы *бала* тыуһа — ил ырыҫы (189).
Яңғыҙ *бала* атайға баш (189).
Яңғыҙ *бала* яуҙан яман (189).
Яңғыҙ ҡош *балаһы* ҡунырға оя тапмаҫ (338).
Ярлы кешенең *балаһы* күп булыр (109).
Ярлыла — *бала,* байҙа — тана (109).
Ярлының байлығы — *бала* (110).
Яуыз *бала* атаһының ауыҙын ябыр (189).

**бала-саға**

Ата-инәгә ҡәҙер күрһәткән *бала-сағанан* ҡәҙер күрер (152).
*Бала-саға* тәрбиәһе утҡа-һыуға төшөрөр (155).

**балалы**

Ата-инә ҡәҙерен *балалы* булғас белерһең,
Ағай-эне ҡәҙерен ялалы булғас белерһең (152).
*Балалы* йортта бур булмаҫ (155).
*Балалы* кеше — бай кеше (155).
*Балалы* ҡаҙға ем теймәҫ (155).
*Балалы* ҡарга емғә туймаҫ (442).
*Балалы* ҡатындың балағы сыҡҡан (190).
*Балалы* ҡунаҡ — бәләле ҡунаҡ (232).
*Балалы* өй — баҙар, балаһыҙ өй — тулы зар (155).
*Балалы* өйҙә сер ятмаҫ (155).
Балаһыҙ бер илар, *балалы* мең илар (157).
Балаһыҙ кеше кеше һөйләр, *балалы* кеше балаһын һөйләр (157).
Ҡыҙ күңелендә — *балалы* бишек, ир күңелендә — эйәрле ат (136).
Этле ҡунаҡ йортҡа һыймаҫ, *балалы* ҡунаҡ өйғә һыймаҫ (244).

**балаһыҙ**

Ағасһыҙ йортҡа ҡош ҡунмаҫ, *балаһыҙ* йортта ҡот булмаҫ (147).
*Балаһыҙ* баш — ярылған таш (157).
*Балаһыҙ* бер илар, балалы мең илар (157).
*Балаһыҙ* кеше кеше һөйләр, балалы кеше балаһын һөйләр (157).
*Балаһыҙ* ҡатын — емешһеҙ ағас (157).
*Балаһыҙ* өйҙөң йәме юҡ (157).
*Балаһыҙҙың* малы хәрәм, эшлекһеҙҙең йәне хәрәм (37).
Балһыҙ ғөлғә ҡорт ҡунмаҫ, *балаһыҙ* өйгә ҡот ҡунмаҫ (154).

**балдыҙ**

Ағас башы — ҡаҙыҡ, *балдыҙ* алыу — яҙыҡ (147).
Ай байыһа — йондоҙ бар, ҡатын үлһә — *балдыҙ* бар (189).
*Балдыҙ* — көмөшкә ҡойған алтын йондоҙ (157).
*Балдыҙы* сибәр кеше ҡатынына үлем теләй (157).

**бикә**

Бер йортка ике *бикәнең* тауығы һыймаҫ (80).

Биҙәү ҡатын *бикә* булыр (158).
*Бикә* биҙәнгәнсе, туй үткән (144).
*Бикәләр* түр өсөн талашыр (100).
Бирнә биргән — *бикә* килен (158).
Көң сәсендә көмөш бар, ул да булһа *бикәгә* (111).
Хан йорто — ханым йорто, бей йорто — *бикә* йорто (106).

бисә

«Алла» тиһәң, мулла ҡыҙын бирә,
  «Бисмилла» тиһәң, *бисәһен* дә ҡушып бирә (112).
Аттың юрғаһын, *бисәнең* уңғанын ал (150).
Бай *бисәһе* — бей *бисәһе* (95).
Баш көн килде — байым алып китте *бисәмде,*
  Буш көн килде — байым килтереп ҡуйҙы *бисәмде* (111).
Башҡорт байыһа, *бисә* ала, урыҫ байыһа, йорт һала (79).
*Бисәң* матур — бай тирмәһендә ятыр (100).
*Бисәң* матур булһа, байың үсле булыр (100).
Ил терәге — ир, ир терәге — *бисә* (83).
Ирҙ(л)әр, *бисәһе* йүнһеҙ булһа, сирләр (166).
Ирле *бисә* — сирле *бисә,* ирһеҙ *бисә* — бауһыҙ уймаҡ (167).
Кеше була бесән менән, һин булаһың *бисәң* менән (191).
Көтөүсе *бисәһе* кис биҙәнер (170).
Ҡапҡан һайын ҡалъя булмаҫ, *бисәң* сама белмәһә (171, 237).
Матур сәсә тайҙыҡы, матур *бисә* байҙыҡы (104).
Нужа бесән ашата, дошман *бисәң* ташлата (177).
Уңған *бисә* — аҡ бәхет, уңмаған *бисә* — ҡаҡ бәхет (182).
Шаршамбы менән кесаҙна алып китте *бисәмде.*
  Дүшәмбе менән шишәмбе килтереп бирҙе *бисәмде* (438).
Эт — туйған ерендә, *бисә* — һыйған ерендә, ир — тыуған ерендә (93).
Әсәм яҡын булһа ла, арба артынан баралыр,
  *Бисәм* ситтән булһа ла, янға ултырып баралыр (193).
Яҡшы *бисәнең* һаламы ла әлбә булып күренә (187).
«Ярап торор»ға ой һалма, «ярап торор»ға *бисә* алма (144).

**бисәнеке**

Кеҫәғә керғән — *бисәнеке* (168).

**брат**

*Брат браттың* көтөү көткәненә рад (158).
*Брат браттың* тирмән тартҡанына не рад (442).

## Ғ

**ғаилә**

Ҡулың пак булһа, йөҙөң аҡ булыр.
Эшең хаҡ булһа, *ғаиләң* шат булыр (312).

## Е

**егет**

Аға(й) булыр *егеттең* итәк-еңе киң булыр (килер) (78, 193).
Агай булыр *егеттең* әйткән һүҙе им булыр.
Булыр-булмаç *егеттең* әйткән һүҙе ел булыр (339).
«Аҙашмам» тигән *егетте* ҡара томан аҙаштырыр (323).
Айыу алыр *егетте* атынан танырмын,
Бүре алыр *егетте* бүркенән танырмын (64).
Айыу беләгенә ышаныр, *егет* йөрәгенә ышаныр (289).
Аҡылһыҙ *егет* — ауыҙлыҡһыҙ ат.
Йүнһеҙ *егет* — йүгәнһеҙ ат (193).
Арба яҡшы йөрөһә — дегеттән, ҡатын яҡшы йөрөһә — *егеттән* (441).
Арбаны дегет тота, ҡатынды *егет* тота (441).
Арбаны йөрөткән дегет, ҡатынды йөрөткән *егет* (149).
Аргымаҡ ат юл башлар.
Аҡыллы *егет* ил башлар.
Батыр *егет* яу башлар.
Сәсән *егет* дау башлар (289).
Аргымаҡтың билгеһе — ҡаҙылыҡ йыймаç, ял йыйыр.
Яман *егет* билгеһе — ҡатын алмаç, мал йыйыр (149).
Ат арыҡлыҡта, *егет* гәриплектә һыналыр (194).
Ат — *егеттең* юлдашы (253).
Ат ҡартайыр — майҙан ҡартаймаç.
*Егет* ҡартайыр — заман ҡартаймаç (194, 376).

Ат тауҙа, *егет* яуҙа һынала (448).
Ат тешенән билгеле, *егет* түшенән билгеле (290).
Ат тоҙ тип ҡартайыр, *егет* ҡыҙ тип ҡартайыр (194).
Ат үлер — майҙан ҡалыр, *егет* үлер — дан ҡалыр (290).
Ат әйләнеп өйөрөн табыр, *егет* әйләнеп төйәген табыр (194).
Ат юлда һынала, *егет* яуҙа һынала (290).
Ат ялһыҙ, *егет* малһыҙ булмаҫ (208).
Аттың даны *егет* ҡулында (66).
Аттың даны *егет* ҡулында, егеттең даны үҙ ҡулында (290).
Аттың күрке ял менән, *егеттең* күрке мал менән (208).
Аттың матурлыгы башында, *егеттең* матурлығы түшендә (290).
Аттың өркәге, *егеттең* ҡурҡағы яман (290).
Аттың яҡшыһы алга сыға, *егеттең* яҡшыһы данға сыға (290).
Ашҡаҙар менән Ағиҙел
Йөрәктауҙа табышҡан;
Яҡшы *егет,* яҡшы ҡыҙ
Шулай килеп табышҡан,
Яр иткәнде пар иткән,
Айырылтмаҫҡа ҡауышҡан (144).
Аяҡлы ҡаза күрәһе *егет* аяғы һыҙлау ҡатын алыр (128).
Бал тапмаған ҡорт булмаҫ, мал тапмаған *егет* булмаҫ (208).
Бала тапмаҫ ҡатын булмаҫ — тороҏон әйт,
Мал тапмаҫ *егет* булмаҫ — тоторон әйт (208).
Баланың тинтәк булыуы өйөнән, *егеттең* тинтәк булыуы бейенән (156).
Барһаң, табып бар, *егетте* танып бар (128).
Батыр *егет* — яу күрке, сәсән *егет* — дау күрке (291).
Башмаҡ тапһа — башҡа ашар, *егет* тапһа — бергә ашар (334).
Бер *егеттең* ҡыйыулығы мең *егеткә* дан килтерер (292).
Бөркөттө осоуынан, *егетте* эшенән таныйҙар (194).
Бөтөшө яман ҡамышты һыу эсендә үрт алыр,
Йөрөшө яман *егетте* ил эсендә яу алыр (194).
Буйҙаҡ *егет* бай булмаҫ (159).
Бүре ала торған ат бөйөрөнән таныла.
Бүре һуға торған *егет* беләгенән беленә (293).
Бүре алыр *егетте* бүрегенән танырмын,
Ҡуян алыр *егетте* ҡуйынынан танырмын (293).

**Данлы *егет* ил өсөн үлер (81).**
**Дәртһеҙ *егет* йоҡосан булыр (40).**
**Дәртһеҙ *егет* — мунса ташы (130).**
**Дәүләт күрке мал менән, *егет* күрке дан менән (293).**
**Ебәк билгау — бил күрке, батыр *егет* — ил күрке (293).**
***Егет* бул — дегет булма (194).**
***Егет* булған *егет* еңенән йылан сығарыр (194).**
***Егет* булһа, батыр булһын (293).**
***Егет* булһа, батыр булһын, ҡыҙ булһа, матур булһын (130).**
***Егет* булһа — ебеп тормаҫ, ебеп торһа — *егет* булмаҫ (194).**
***Егет* булһа, егәрле булһын (194).**
***Егет* булһа, мут булһын, ике күҙе ут булһын (194).**
***Егет* булһа, мут булһын, мут булмаһа, юҡ булһын (194).**
***Егет* булһаң, ебегән булма (194).**
***Егет* булһаң, *егет* бул — һыуҙа йөрөгән һөлөк бул (194).**
***Егет* булһаң, йоҡлап ятма (40).**
***Егет* булһаң, тауҙай бул, яуға ҡорған ауҙай бул (293).**
***Егет – егеттең* көҙгөһө (194).**
***Егет* егәр, ҡыҙ сибәр булһын (130).**
***Егет* еле менән йөрөр (195).**
***Егет* елле лә, еләне ҡыҫҡараҡ (144).**
***Егет* — ил күрке, ҡыҙ — өй күрке (160).**
***Егет* инем — солтан инем,**
**Ҡыҙ йәрәштем — хан булдым,**
**Ҡатын алдым — хур булдым (144).**
***Егет* — йорттоң терәге, ҡыҙҙар — йорттоң биҙәге (160).**
***Егет* йөрәгенә ышаныр (195).**
***Егет* йәрһеҙ булмаҫ (130).**
***Егет* кеше — бер кеше, арыҫланға тиң кеше (195).**
***Егет* кеше — мут кеше (195).**
***Егет* кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ (әҙ) (40, 195).**
***Егет* кешегә етмеш төрлө һөнәр күп түгел,**
**Күп булһа ла йөк түгел (195).**
***Егет* күңеле йүләрҙә, ҡыҙ күңеле көләрҙә (130).**
***Егет* күрке — ат-яраҡ (195).**
***Егет* күрке дан менән, айғыр күрке ял менән (293).**
***Егет* ҡартаймай, донъя ҡартайта (195).**
***Егет,* ҡыҙ алғас, тәүфиҡ таба (130).**

*Егет* ҡыйыу, ҡыҙ һылыу булған яҡшы (130).
*Егет* ҡәҙере мал менән (445).
*Егет* маллы булһын, ат яллы булһын (210).
*Егет* малы ер аҫтында (210).
*Егет* менән ат башы күрә (195).
*Егет* саҡ — егәрле саҡ, арыҫлан тотоп егерлек саҡ (195).
*Егет* үҙ һүҙенә үҙе хужа (195).
*Егет* үлһә — аты ҡалыр, үгеҙ үлһә — ите ҡалыр (195).
*Егет* фырт, аты хөрт (144).
*Егет* һөйһә — ала, ҡыҙ һөйһә — ҡала (130).
*Егет* һүҙе бер булыр (195).
*Егет* һүҙен *егет* йыҡмаҫ (195).
*Егет* һүҙенән, арыҫлан әҙенән ҡайтмаҫ (195).
*Егет* ярлы — намыҫ бай (198).
*Егетте* дуҫынан таны (203).
*Егеттең* бер йорто — ҡыҙ тирмәһе, бер йорто — яу эсе (195).
*Егеттең* егетлеге ат егеүенән билдәле (195).
*Егеттең* егетлеге майҙанда беленер (195).
*Егеттең* тешенә ҡарама, эшенә ҡара (130).
*Егеттең* төҫөн әйтмә, эшен әйт (40, 195).
*Егеттең* үҙе үлһә лә, һүҙе үлмәҫ (195).
*Егеттең* һүҙе — тимерҙең үҙе (195).
Етен башын ел киҫә, *егет* бәгерен ҡыҙ киҫә (131).
Иҙел кисмәй ил булмаҫ, ҡурҡаҡ *егет* ир булмаҫ (293).
Иҙәне ер, ишеге ел булһа ла, *егете* ир булһын (131).
Ике *егет* аулаһаң, берһеҙ ҡалырһың (131).
Ике кәңәш бер булһа, илле *егет* йөҙ була (336).
Ил маҡтаған *егеткә* ҡыҙ бармай (131).
Илдә *егет* һанаулы (84).
Ир икмәге иректе, ҡыҙҙар һөйә *егетте* (131).
Ир малһыҙ булмаҫ, *егет* йәрһеҙ булмаҫ (132).
Иртә торган *егеттең* ырыҫы артыҡ,
Иртә торган ҡатындың өлөшө артыҡ (42).
Йоҡосан *егеттә* дәрт булмаҫ (42).
Ҡалын-йыуан булһа ла,
Яңғыҙ ағас өй булмаҫ,
Күпме изге булһа ла,
Яңгыҙ *егет* бей булмаҫ (449).

Ҡанса «мин» тиһә лә, яңғыҙ еғет бей булмаҫ,
Ҡанса йыуан булһа ла, яңғыҙ ағас өй булмаҫ (337).
Ҡасып киткән ил булмаҫ, ҡурҡаҡ *егет* ир булмаҫ (294).
Ҡатынды кеше иткән — *егет,* арбаны яҡшы иткән — деғет (172).
Ҡорос утта сыныға, *егет* яуҙа сыныға (121).
Ҡош һауала, ат тауҙа, *егет* яуҙа һынала (294).
Ҡуштан ҡатын ирғә яраған, ҡуштан *егет* түрәғә яраған (104).
Ҡыҙ *егеткә* ҡушыла — әбәк булып ишелә (136).
Ҡыҙ кемғә бармаҫ ине, *егет* кемде алмаҫ ине, ҡалым малы булмаһа (136).
Ҡыҙ тыйнаҡ булһа, *егет* йыйнаҡ була (136).
Ҡыҙыл төлкө — ер күрке,
Матур *егет* — ил күрке,
Матур ҡыҙҙар — өй күрке (176).
Малһыҙ *егет*— һанһыҙ еғет (213, 438).
Матур ҡатын— ир күрке, батыр *егет* — ил күрке (295).
Ни ҡыланһа, шул килешә өйләнмәгән *егеткә* (145).
Оялсан *егет* — йүгәнһеҙ ат (138).
Оялсан *егет* йәр тапмаҫ (138).
Өйө ситән булһа ла, *егете* бүтән (145).
Табышһыҙ *егеттән* ҡолонлаған бейә артыҡ (225).
Тапҡан *егет* түғел, тотҡан — *егет* (214).
Түрә бойорогона, төлкө ҡойроғона, ярлы беләғенә, *егет* йөрәгенә ышаныр (89).
Үҙе булған *егеттең* төп атаһын төпсөмә (440).
Үҙе булған *егеттең* төп нәҫелен һорама (440).
Үҙе уңған *егеттең* ата-инәһен һорама (141).
Ыыу һыйған ярында, *егет* һөйғән янында (142).
Эт өрөп, *егет* йөрөп, ҡыҙ көлөн ҡартая (396).
Юлы уңыр *егеттең* еңғәһе алдан сығыр (258).
Юлы уңыр *егеттең* юлдашы сығыр алдынан (258).
Ябага тайҙы хурлама: яҙға сыҡһа, ат булыр;
Йәш *егетте* хурлама: уҡыһа, илғә баш булыр (93).
Яҡшы *егет* ил ғәйебен асмаҫ (93).
Яҡшы *егеттең* аты ҡалыр, яман *егеттең* таты ҡалыр (316).
Яман айғыр өйөрөн яуға алдырыр,
Яман *егет* юлдашын дауға ҡалдырыр (320).

Яман *егет* туй боҙор, яман ҡатын өй боҙор (188).
Яман *егет* — яман эт (198).
Яман *егетте* ил эсендә яу алыр (198).
Яманаты сыҡҡан *егеттең* өйөн күрмә (144).
Яңғыҙ батыр яу еңмәҫ, яңғыҙ *егет* дау еңмәҫ (338).
Яңғыҙ батыр яуға юҡ, яңғыҙ *егет* дауға юҡ (124).
Яңғыҙ булыр *егеткә* биҙәү ҡатын тап булыр (189).
Яңғыҙ тирәк өй булмаҫ, яңғыҙ *егет* бей булмаҫ (338).
Ярлы беләгенә, *егет* йөрәгенә ышаныр (108).
Ярлы булыр *егет* бейәһен атҡа һатыр,
    Яңгыҙ булыр *егет* агай-энеһен ятҡа һатыр (189).
Ярлы булыр *егеткә* ҡазалы мал тап булыр,
    Яңғыҙ булыр *егеткә* ҡыҫыр ҡатын тап булыр (189).

егетлек

*Егетлек* бүрек кейеүҙә түгел, батырлыкта (293).
*Егетлек* ерҙә ҡалмаҫ (293).
*Егетлегеңде* белғең килһә, ҡыҙға яусы ебәр (130).
Күп белеп аҙ һөйләү — *егетлек* һәнәре (347).

еҙнә

Агайым кемде алһа — еңғәм шул,
    Апайым кемгә барһа — *еҙнәм* шул (147).
Атай — *еҙнә,* инәй — ҡаҙна (151).
Етмәҫтең еңен тотқансы, *еҙнәм* еңен тотһамсы (190).
Эттең ҡойроғон ҡырҡһаң, *«еҙнәм»* тир (315).

еңгә

Агай алғанда, *еңгә* йыйганда яҡшы (146).
Агайым алгансы, *еңгәм* килгәнсе (яҡшы) (441).
Ағайым кемде алһа — *еңгәм* шул, апайым кемгә барһа —
    еҙнәм шул (147).
*Еңгә* — еҙ энә (160).
*Еңгә* ҡатын ейәндеке (160).
*Еңгә* ҡатында етмеш төрлө хәйлә була (160).
*Еңгәм* сәнсә, мин тартам,
    Мин дә нағыш һырыйым! (62).

*Еңгәнең* ярты ягы — ҡәйнештеке (160).
*Еңгәнән* ете йылга тиклем өмөт (160).
Ерек утын яҡма, *еңгә* ҡатын алма: ерек утындың ҡыҙыуы юҡ, *еңгә* ҡатындың йылыуы юҡ (160).
Ит тапмаган үпкәғә кинәнгән, ҡатын тапмаган *еңгәгә* кинәнгән (132).
Кейәү биреүсән булһа, *еңгә* йөрөүсән була (440).
Кейәү йомарт булһа, *еңгәһе* йүгерек була (133).
Юлы уңыр егеттең *еңгәһе* алдан сығыр (258).

еңгәнеке

Агайҙыҡы алғансы, *еңгәнеке* елгәнсе (146).

## И

инә

Алып — *инәнән,* аргымаҡ бейәнән тыуыр (148).
Ата — алтын һаҙаҡ, *инә* — алтын ҡанат (151).
Ата — ата ҡаҙ, *инә*—*инәп* аҙ (151).
Ата малы менән ул тормаҫ,
*Инә* малы менән ҡыҙ тормаҫ (208).
Ата улды белмәй, *инә* ҡыҙҙы белмәй (151).
Ата үлеү — арҡа һыныу, *инә* үлеү — бәғер итең һулыу (151).
Атанан күргән уҡ юныр, *инәнән* күргән тун бесер (152).
Атанан күргән уҡ юныр, *инәнән* тыуған нагыш тегер (441).
Атаны күреп ул үҫер, *инәне* күреп ҡыҙ үҫер (153).
Атаң яҡшы, *инәң* яҡшы, һин кемгә оҡшан шаҡшы? (190).
Атаһы тороп, улы һөйләгәндән биҙ,
*Инәһе* тороп, ҡыҙы һөйләгәндән биҙ (153).
Атаһы һуҡкан ул уңыр, *инәһе* һуҡкан ул уңмаҫ (153).
Атаһы юҡ ул — ҡуштан, *инәһе* юҡ — инмәй тыштан (153).
Атаһына оҡшап ул тыумаҫ, *инәһенә* оҡшап ҡыҙ тыумаҫ (153).
Атаһының аты бар, *инәһенең* туны бар — иҫәүәнгә ни ҡайгы? (262).
Ахыры заман килһә, атаһы тороп — улы һөйләр, *инәһе* тороп — ҡыҙы һөйләр (341).
Баланың бармағы ауыртыр, *инәнең* йөрәге ауыртыр (156).

**Батыр** ***инәнән*** **тыуыр, арғымаҡ** бейәнән **тыуыр** (157).
Башһыҙ өйҙә ата тороп, ул һөйләр, ***инә*** тороп, ҡыҙ һөйләр (157).
Бер ҡорт ***инәһен*** тотҡан тотош күсен тотор (411).
Илар бала ***инәһенең*** имсәген тешләр (163).
***Инә*** ҡаҙ йомортҡа баҫҡанда, ата ҡаҙ янында бейер (163).
***Инә*** ҡаҙ ҡаңғылдамаһа, ата ҡаҙ бармай (131).
***Инә*** ҡарғышы төшөр ине, инә һөтө ебәрмәй (163).
***Инә*** орт ғәйрәтле булһа, умарта ҡеүәтле була (163).
***Инә*** ҡулы — им (163).
***Инә*** һөтө менән кермәгән бейә һөтө менән кермәҫ (163).
***Инәнең*** һөтө — бал, баланың теле — бал (163).
***Инәң*** үлһә — йылғаң ҡороно, атаң үлһә — таянған тауың ауҙы (163).
***Инәһе*** ниндәй — ҡыҙы шундай (131).
***Инәһе*** типкән ҡолондоң тәне ауыртмаҫ (163).
***Инәһен*** күреп ҡыҙын ал, иңен күреп бүҙен ал (131).
***Инәһенән*** тыуған, бите-ҡулы йыуған (145).
Ҡорттоң ***инәһе*** ҡайҙа ҡунһа, күсе шунда һарыр (87, 174).
Ҡояш янында — йылылыҡ, ***инә*** янында — изгелек (174).
Ҡыҙҙың ***инәһе*** — ҡырҡ, ҡырҡ беренсеһе сыбыҡ (175).
Сит кешенең һөйөүе — үз ***инәңдең*** йоҙроҡ төйөүе (178).
Үгәй ***инә*** бауыр мал — ярҙан ятып ҡул болғар (183).
Үгәй ***инә*** илгәҙәк — үлеп ятһаң, һыу һалмаҫ (183).
Үгәй ***инә*** һарымһаҡ — ғүрҙә ятып ҡул болғай (444).
Үгәй ***инәнең*** яҡшыһы — тамуҡ утының сатҡыһы (183).
Үҙ ***инәһен*** яманлаған ят дошманға тотолор,
Үҙ кешеһен яманлаған ят дошмандан отолор (183).
Фәҡирлек ***инәһе*** — наҙанлыҡ (106).
Эттең ***инәһе*** — бер, атаһы — ҡырҡ (186).

инәй

Атай — еҙнә, ***инәй*** — ҡаҙна (151).
Атай — кешән менән тышау, ***инәй*** — йөрәк менән үҙәк (151).

инәле

Аталы бала — арҡалы, ***инәле*** бала — иркәле (152).

инәһеҙ

Атаһыҙ тороп була — балтаһыҙ тороп булмай.
*Инәһеҙ* тороп була — энәһеҙ тороп булмай (36).
Атаһыҙ ул аҫрама, *инәһеҙ* ҡыҙ аҫрама (153).
Атаһыҙға ат бирмә, *инәһеҙгә* ҡыҙ бирмә (153).
Атаһыҙҙы кейәү итмә, *инәһеҙҙе* килен итмә (127).
Атаһыҙҙы ул итмә, *инәһеҙҙе* ҡыҙ итмә (150, 153).
*Инәһеҙ* ҡорт бал йыймаҫ,
Бал йыйһа ла, мул йыймаҫ (69, 163).
*Инәһеҙ* ҡорт коcһоҙ булыр (69, 163).
Энәһеҙ йөй булмаҫ, *инәһеҙ* йүн булмаҫ (185).

**ир**

Абруй — *ирҙең* ҡеүәте (260).
Ағас нәҫеле ерҙә, *ир* нәҫеле илдә (78).
Аҙман *ирҙең* билдәһе — аҙ һөйләр ҙә күп тыңлар,
Арғымаҡ аттың билдәһе — аҙ уртлар ҙа күп юшар (339).
Айырылған *ир* аҙыр, ҡушылған *ир* уҙыр (334).
Айың-коноң уртаҡ булһын, *ирең* уртаҡ булмаһын (148)
Айыуҙы еңгән — ярты *ир,* асыуҙы еңгән — бөтөн *ир* (297).
Аҡыллы *ир* — ил ағаһы, аҡылһыҙ *ир* — ил бәләһе (362).
Аҡыллы *ир* ҡатынын яманламаҫ (148).
Аҡыллы *ир* шул булыр:
Ҡулындағын алдырмаҫ.
Кеше һайын туҡталып,
Юҡ һүҙ тыңлап ҡаңғырмаҫ;
Барынан да бере шул:
Бөгөнгө эшен таңға ҡалдырмаҫ (35).
Аҡыллы *ирҙең* эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр (362).
Алама булһа ла ир яҡшы, һуҡыр булһа ла ҡыҙ яҡшы (126).
Алты ҡабып ат туйһын, ете ҡабып *ир* туйһын (229).
Алты ҡабып *ир* туйһын, алтмыш ҡабып ат туйһын (193).
Алтын башлы ҡатындан баҡыр башлы *ир* артыҡ (193).
Алтын башлы ҡатынды баҡыр башлы *ир* уҙыр (444).
Алтын *ирең* атыңа тейһә, алтынын ал да утҡа яҡ (148).
Алыҫ юл атты һынай, ауыр юл *ирҙе* һынай (253).
Андыҙлы ерҙә ат үлмәҫ, атлы ерҙә *ир* үлмәҫ (64).

Арт йортто туйҙырған ҡатын *ирҙе* юлға сығармай (149).
Арыҡлыҡтан ат үлмәç, ярлылыҡтан *ир* үлмәç (94).
Арыçлан аста төлкө туҡ, тәүәккәл *ирҙә* ҡайғы юҡ (289).
Арыçландың — ялы, *ирҙең* — һаҡал-мыйығы (262).
Ат аҙғыны тай була, *ир* аҙғыны бай була (95).
Ат аҙғыны тайға эйәрер, *ир* аҙғыны байға эйәрер (94).
Ат аҙғыны тайға эйәрә, *ир* аҙғыны ҡыҙға эйәрә (127).
Ат аҙғыны юрға булыр, *ир* аҙғыны мулла булыр (113).
Ат айында, *ир* йылында һыналыр (150).
Ат барҙа бейә сапмаһын, *ир* барҙа ҡатын алға сыҡмаһын (150).
Ат башына көн килһә.
Ауыҙлығы менән һыу эсер.
*Ир* башына көн килһә.
Итеге менән һыу кисер (399).
Ат иренле, ир моронло килһен (150).
Ат ҡаҡҡанды тай ҡаҡҡан, *ир* ҡаҡҡанды мир ҡаҡҡан (150).
Ат туйған ерендә, *ир* тыуған илендә (79).
Ат тышауһыҙ булмаç, *ир* дошманһыҙ булмаç (199).
Ат һөрөнмәй, *ир* яңылышмай булмаç (324).
Ат әйләнеп, ҡаҙығын табыр,
һыу әйләнеп, юлығын табыр.
*Ир* әйләнеп, илен табыр (79).
Ат яҡшыһы арҡанда, *ир* яҡшыһы — тарханда (194).
Ат яҡшыһы санала беленә, *ир* яҡшыһы баҙарҙа беленә (221).
Ат яҡшыһы тауҙа, *ир* яҡшыһы яуҙа беленер (290).
Ата һүҙен тотмаған, әсә һүҙе йоҡмаған — яуға сабыр *ир* булмаç (151).
Атаң барҙа *ир* таный, нәçелең барҙа ил таный (153).
Атты ҡамсы үлтерер, *ирҙе* намыçы үлтерер (194).
Атты ҡамыты йүгертә, *ирҙе* намыçы йүгертә (262).
Атһыҙ *ир* — ҡанатһыҙ ҡош (66).
Атһыҙ *ир* — ҡулһыҙ кеше (66).
Атың барҙа юл таны, аҡылың барҙа *ир* таны (194).
Ауыҙы ҡыйыҡ булһа ла, байҙың ҡыҙы *ир* һайлар (127).
Ауыр йөктө ат тарта, ауыр эште *ир* тарта (36).
Ауыр эшкә ир сыҙам (154).
Аш хурлама — ҡоçторор, *ир* хурлама — боçторор (154).

Ашлыҡ уңһа — ерҙән, ҡатын уңһа — *ирҙән* (154).
Аягына тартһа — башына юҡ, башына тартһа — аягына юҡ — йүнһеҙ *ирҙең* көнө шул (95).
Бай булһаң — илең һөйөр, һау булһаң — *ирең* һөйөр (154, 386).
Бала — бауыр ите, *ир* — йөрәк ите (154).
Бала көйөгө — йөрәктә, *ир* көйөгө — итәктә (155).
Бала ҡәҙерен әсә белер, ил ҡәҙерен *ир* белер (79).
Бар булһаң, биргәнеңде әйтмә, *ир* булһаң, еңелгәнеңде әйтмә (**221**).
Башҡа килер ҡаза *ирҙән* аҡыл таптырмаҫ (399).
Белдекле *ир* биргән малын кире алмаҫ (222).
Бер *ир* ҡатын алһа, алтмыш ҡатын илар (128).
Бер *ирҙең* ҡатыны үлһә, алтмыш ҡатын ҡыуана.
Бер ҡатындың *ире* үлһә, алтмыш ҡатын ҡайғыра (128).
Бер ҡатында ҡырҡ *ир* хәйләһе булыр (194).
**Бер** ҡатындың *ире* үлһә, ҡырҡ ҡатынга көндәш була, ти (129).
Береһе *ир* булгансы, икенсеһе ер була (158).
Бизмән менән гер бергә, ҡатын менән ыр бергә (158).
Бирәм, тигән бей булмаҫ, ҡурҡаҡ әҙәм ыр булмаҫ (292).
Бойҙай яҡшыһы ерҙән, ҡатын яҡшыһы *ирҙән* (158).
Бөтөн сереңде *ireңә* һөйләп бөтөрмә (159).
Булмаҫ ыр буйраҡ һыуҙа балыҡ тота (194).
Булмаҫ *иргә* бөкрө ҡатын (159).
Булыр ыр алты йәшендә башмын тир,
Булмаҫ ир алтмыш йәщендә йәшмен тир (39).
Бурлыҡ ыр балала сыбыртҡынан, ҡыҙ балала энәнән башлана (325).
Бүре аҙыгы менән ыр аҙыгы юлда (194).
Ғәйрәт — ир менән атта, матурлыҡ — күҙ менән ҡашта (265).
Ғәйрәтле *ирҙә* мал тороp (210).
Дуҫым кем? — *Ирем.* Дошманым кем? — *Ирем* (160).
Дуҫың да, дошманың да ыр булһын (202).
Ер күрке — иген, ыр күрке — гилем (368).
Ер ҡәҙере игендә, ыр ҡәҙере белемдә (368).
Ерҙең даны *ирҙән* (81).
Ерҙең йәме иген менән, *ирҙең* йәме белем менән (450).

Етем бала тип кәмһетмә: бәхете булһа, ир булыр (161).
Иҙел кисмәй ил булмаç, ҡурҡаҡ егет *ир* булмаç (293).
Иҙәне ер булһа ла, *ире ир* булһын (439).
Иҙәне ер, ишеге ел булһа ла, егете *ир* булһын (131).
Иҙәнең ер булһа ла, *ирең ир* булһын (162).
Икенең бере: йә *ир,* йә ҡатын баш булһын (162)..
Ил барҙа *ир* хур булмаç, *ир* барҙа ил хур булмаç (82).
Ил бөтмәһә, *ир* бөтмәç (131).
Ил дауһыҙ булмаç, *ир* дауһыҙ булмаç (82).
Ил илдән ҡалһа, *иргә* намыç (82).
Ил ирекһеҙ булһа, ир күрекһеҙ булыр (82).
Ил күрмәк — бер бурыс, *ир* һынамаҡ — бер бурыс (82).
Ил намыçы *ир* муйынында (83).
Ил намыçы ярлы итмәç, *ир* намыçы ярлы итер (195).
Ил терәге — *ир, ир* терәге — бисә (83).
Ил яҙмышы — *ир* яҙмышы (83).
Илгә ҡушылһаң — *ир* булырһың.
Илдән айырылһаң — *хур* булырһың (83).
Илдең биле нык булһа, *ирҙең* күңеле туҡ булыр (83).
Илдең көнө — *ир* менән, *ирҙең* көнө — ил менән (83).
Илдең хаҡын ир даулар, ир дауламаһа, кем даулар? (83).
Илдең эше ир муйынында, *ирҙең* эше ил ҡуйынында (83).
Илдә *ир* үлмәç (84).
«Илем» тимәç *ир* булмаç, «өйөрөм» тимәç ат булмаç (84).
Илен һөйгән *ир* булыр (84).
Иленән биҙгән *ир* уңмаç, күленән биҙгән ҡаҙ уңмаç (84).
Иллегә еткәç, *ирҙәр* ҙә ипкә килә (387).
Ипһеҙ ҡыҙ үҙенә *ир* тапмаç (131).
*Ир* аҙыгы менән ат аҙыгы юлда (254).
*Ир* аҙығы юлында, бүре аҙыгы морононда (254).
*Ир* аҡыллы булһа, ҡатын күндәм була (163).
*Ир* аҡыллыһы өс йылгыһын алдан уйлар.
Ҡатын аҡыллыһы өс көнлөгөн алдан уйлар (163).
Ир аҡылы — бер алтын, ил аҡылы — мең алтын (84).
*Ир* алдамай, ин алдай (195).
*Ир* арымаһа, дау арымаç (119).
*Ир* арыçланы — ата балаһы, ҡайҙа барһа ла сер бирмәç (195).
*Ир* аçылы — һиммәтле, ҡыҙ аçылы — ҡиммәтле (196).

*Ир* аҫылы эштә беленә (41).
*Ир* — ат, ҡатын — арба (163).
*Ир* аты менән, ҡатын *ире* менән маҡтаныр (164).
*Ир* баҡҡанды ил баҡкан, *ир* ҡаҡҡанды мир ҡаҡҡан (164).
*Ир* бала — алтын, алтын табаҡтан аш ашар (164).
*Ир* бала — ата-инәғә таяу, ҡыҙ бала — өйғә яҡкан буяу (164).
*Ир* бала — йортка терәк, ҡыҙ бала — йорт эсендә биҙәк (164).
*Ир* бала тап, иркенләп ят (164).
*Ир* балаға ат кәрәк, ҡыҙ балага — ҡанат (164).
*Ир* «бармам» тиғән еренә биш барыр (254).
*Ир* батырлығына таянһа, ҡатын матурлығына таяныр (164).
*Ир* батыры эштә беленер (293).
*Ир* — баш, ҡатын — муйын (164).
*Ир*— баш, ҡатын — түш (164).
йр башына килһә килһен, ил башына килмәһен (84, 401).
*Ир* башына яу килһә, ирлеғе китер башынан.
Бей башына яу килһә, бейлеге китер башынан (119).
*Ир* — беләк, ҡатын — терәк (164).
*Ир* биреү — йән биреү (164).
*Ир* битен асҡансы, ғүр битен ас (164).
*Ир* булған *ир* — еғерме бištә баш булыр,
*Ир* була алмаған *ир* — иллелә лә йәш булыр (196).
*Ир* булған *ир* — ирекле (196).
*Ир* булған кеше этеп йыкһын, тартып торгоҙһон (164).
*Ир* булһаң, ер бул, ер барыһын да кутәрә (196).
*Ир* булһаң, *ирғә* таян (196).
*Ир* булһын, ипле булһын (196).
*Ир* ғазабы — ғүр ғазабы (164).
*Ир* ғүмере — бер көн (196).
*Ир* ғәйрәте тауҙы ҡом итә (41).
*Ир* ғәйрәтле булһа, ҡатын ғибрәтле була (164).
*Ир* даны менән мал үтә, ата даны менән ҡыҙ үтә (164).
*Ир* ҙә *ир* булын ҡатындан тыуған (164).
*Ир* иғеҙ, имғәк яңғыҙ (164).
*Ир* иғеҙе имғәктә (196).
*Ир* ике һөйләмәҫ (196).
*Ир* ике һөйләһә, үҙ башына (196).

*Ир* ике һөйләһә — үҙенә бәлә, хан ике һөйләһә — иленә бәлә (85).
*Ир* икмәге ирекле, ашай белһәң, кимекле (164).
*Ир* икмәге ирекле, ҡыҙҙар һөйә егетте (131).
Ир икмәк түгел (164).
Ир илендә ҡәҙерле (85).
Ир имгәккә ҡалһа ла ирлек итер (402).
Ир ирек өсөн үлер (196).
Ир ирекле башын ҡол итмәҫ (196).
Ир ирлеген итер, итәк-еңен йыртыр (164).
Ир ирлеген итер, моратына етер (196).
Ир иткән дә — ҡатын, ер иткән дә — ҡатын (164).
Ир йолаһы өскә саҡлы (131).
Ир йөрәгенә таяныр (196).
Ир йыуаш булһа ла, тәҡдирҙән ҡотолмай (387).
Ир йәше ике утыҙ, ҡатын йәше — бер утыҙ (387).
Ир — келәт, ҡатын — йоҙаҡ (164).
Ир кеше бер әйтер, бер әйтһә лә өҙә әйтер (344).
Ир кеше йөрөһә, мутлыгы асылыр, ҡатын йөрөһә, гәйебе асылыр (132).
Ир кеше өйҙә ятмаҫ (164).
Ир кешегә бер йылмайып ҡараһаң, ҡар өҫтөнән ялан аяҡ йүгерер, ти (164).
Ир кешенең бер һүҙе — ҡатын кешенең йөҙ һүҙе (196).
Ир килтерә белһен, ҡатын еткерә белһен (164).
Ир кисмәҫлек йылга юҡ (196).
Ир көнләшмәгән — ишәк, ҡатын көнләшмәгән — ҡарсаҡ (164).
Ир күңеле — иркенлек (196).
Ир күп өйҙә утын булмаҫ, ҡатын күп өйҙә һыу булмаҫ (164).
Ир күрке — ҡатын, ҡатын күрке — *ир* (165).
Ир күрке — мал, үҙән күрке — тал (210).
Ир күрмәй гүр күрмә (165).
Ир ҡаҙнаһы — иҫке һүҙ (344).
Ир ҡайгыһы илдә (85).
Ир ҡайғыһы итәктә, бала ҡайғыһы йөрәктә (165).
Ир ҡанаты ат була (69, 197).
Ир ҡанаты ат булыр, ҡатын ҡанаты *ир* булыр (165).

*Ир* ҡартайһа ла, дау ҡартаймаҫ (119).
*Ир* ҡартая, күңел ҡартаймай (387).
*Ир* ҡоралы — ҡамсылыр, ҡулда барҙа ҡәҙере юҡ (41).
*Ир* ҡулынан ҡош туймаҫ (165).
*Ир* ҡуштаны илгә яраған, ҡатын ҡуштаны *иргә* яраған (16
*Ир* ҡуштаны түрәгә яҡын, ҡатын ҡуштаны *иргә* яҡын (44
*Ир* ҡәҙере ил менән (85).
*Ир* ҡәҙерен *ир* белер (197).
*Ир* ҡәҙерен эш төшкәндә белерһең (165).
*Ир* маҡтана, ҡорал еңә (119).
*Ир* маҡтаныр, ҡорал эшләр (41).
*Ир* малһыҙ булмаҫ, еғет йәрһеҙ булмаҫ (132).
*И р* менән *ир* араһы — ер менән күк араһы (197).
*Ир* менән ҡатын араһына инғәнсе, ике ут араһына ин (165
*Ир* менән ҡатын араһына инғәнсе, ҡылыс менән ҡьи
араһына кер (442).
*Ир* менән ҡатын — бер йән, бер тән (165).
*Ир* менән ҡатын икеһе бер сыбыҡтан ҡыуылған (165).
*Ир* менән ҡатын — икеһе лә бер ҡамырҙан әүәләнгән (165)
*Ир* менән ҡатын талашыр, түшәгендә ярашыр (165).
*Ир* менән ҡатындың тупрағы бер (165).
*Ир* муйынында ҡыл арҡан серемәҫ (197).
*Ир* мәлһеҙ булмаҫ, еғет ерһеҙ булмаҫ (197).
*Ир* өйҙөң бер сатын тотор, ҡатын өйҙөң өс сатын тотор (16Е
*Ир* өйҙән сыҡһа — бәрәкәт, ҡатын-ҡыҙ өйҙә торһа — бәрә
(165).
*Ир* өйләнмәй тәүфиҡ танмай (132).
*Ир* таба, ҡатын тота (165).
*Ир* — табыусы, ҡатын — өләшеүсе (165).
*Ир* табышы менән мырҙа (210).
*Ир* — татлы сир (165).
*Ир* тауышлы ҡатында әҙәп булмаҫ,
Ҡатын тауышлы *ирҙә* ғәйрәт булмаҫ (165).
*Ир* терәге — ер (85).
*Ир* — тора белһәң *ир,* тора белмәһәң — сир (165).
*Ир* — тыуған илендә, ат — туйған ерендә (85).
*Ир* унған булһа, ҡатын йылдам була (165).
*Ир* үҙенән күрер, ирлекһеҙ юлдашынан күрер (402).

*Ир* үлде — итәк йыртылды (165).
*Ир* үлһен дә дан ҡалһын (197).
*Ир* үлһә, ил көйөнөр, дошман һөйөнөр (85).
*Ир* үлһә лә, йола үлмәҫ (85).
*Ир* үтә алмаҫ йылға юҡ, теләнмәгән мулла юҡ (113).
*Ир* хазинаһы — иҫке һүҙ, уның сырағы — иҫке дуҫ (19
*Ир* хаҡы — тәңре хаҡы (165).
*Ир* хурлағанды ил хурлар, *ир* маҡтағанды ил маҡтар (
*Ир* хәстәрле булһа, ҡатын таҫтарлы була (165).
*Ир* һәнәре эш булыр (41).
*Ир* һуғыштан ҡайтыр, һуғыш хәлен ҡатынынан і (165).
*Ир* һынамаҡ — бер бурыс (197).
*Ир* шашҡанда билдәле, ат сапҡанда билдәле (197).
*Ир* әйләнеп ҡулға төшөр, ҡош әйләнеп турға төшөр (1 (
*Ир* юлда һыналыр, ат арбала һыналыр (254).
*Ир* яҡшыһы илгә ярай (85).
*Ир* яңылышып ҡулға төшөр, ҡош яңылышып турға (326).
*Ир* ярлы булһа яураҡ булыр, атябыҡ булһа тайлаҡ (**102**).
*Иргә* — баш,
*Ир* балаға — аяҡ,
Ҡыҙ балаға — ҡанат,
Ҡатынға — ҡойроҡ (246).
*Иргә* бер ҡат барыу — ғәҙәт, икенсегә — оят (132).
*Иргә* бирһәң ашыңды — ирҙәр һыйлар башыңды,
Эткә бирһәң ашыңды — эттәр һөйрәр башыңды (23'
*Иргә* — ҡатын, ҡатынға — утын (166).
*Иргә* — ҡатын, мейескә — утын (кәрәк) (165).
*Иргә* таянма, илгә таян (166).
*Иргә* ышанма, Иҙелгә таянма (166).
*Ирҙе* ҙур иткән дә ҡатын, хур иткән дә ҡатын (166).
*Ирҙе ир* иткән — ҡатын, ҡатынды ҡатын иткән — *ир* (
*Ирҙе ир* иткән — ҡатын, ҡатынды ҡатын иткән — уты:
*Ирҙе* иртә ҡартайтҡан — насар ҡатын,
Ҡатынды иртә ҡартайтҡан — сей утын (166).
*Ирҙе* көлдөргән дә ҡатын, бөлдөргән дә ҡатын (166).

*Ирҙе* михнәт еңә алмаҫ (402).
*Ирҙе* намыҫ ярлы иткән (197).
*Ирҙе* әҙәм иткән дә ҡатын, әрәм иткән дә ҡатын (166).
*Ирҙең* атын аты сығарыр, ҡатындың атын ояты сығарыр (166).
*Ирҙең* атын йә аты сығарыр, йә ҡатыны сығарыр (166).
*Ирҙең* атын ҡатын сығарыр, ҡатындың атын утын сығарыр (442).
*Ирҙең* даны иленән, халҡы менән еренән (85).
*Ирҙең ирҙән* нимәһе артыҡ? —
Яҡшылыҡ иткән эше артыҡ (311).
*Ирҙең* йәше ике илле — береһе шәкәр, береһе бикәр (388).
*Ирҙең* көсө беләктә лә йөрәктә (197).
*Ирҙең* малы — илдең малы (210).
*Ирҙең* нәфсеһе — бер, ҡатындың нәфсеһе — туғыҙ (166).
*Ирҙең* уңмағаны — икмәкһеҙ, ҡатындың уңмағаны — күлдәкһеҙ (166).
*Ирҙең* һүҙе үлгәнсе, үҙе үлһен (197).
*Ирҙең* юлдашы ла ат, моңдашы ла ат (69).
*Ирҙең* яманы уғрылыҡ ҡылыр,
Ҡатындың яманы уйнаш ҡылыр (132, 166).
*Ирҙә* ҡыйыулыҡ булһа, эштә ҡыйынлыҡ булмай (197).
*Ирҙән* ашмаҡ бар, илдән ашмаҡ юҡ (85).
*Ирҙән* ишәк көнләшмәй, ҡатындан түшәк көнләшмәй (166).
*Ирҙән* китһәң дә, илдән китмә (85).
*Ирҙән* ҡайтҡан яуҙан ҡаты (166).
*Ирҙән* оялғандың балаһы булмаҫ (166).
*Ирҙәр* айырылһа, ил таралыр (85).
.Ирҙәр араҡынан иҫерә, ҡатындар һүҙҙән иҫерә (412).
*Ирҙ(л)зр,* бисәһе йүнһеҙ булһа, сирләр (166).
*Ирҙәр* — имән тамыры, ҡатындар — бойҙай ҡамыры (166).
*Ирҙәр* енләнһә, муллаға барыр, мулла енләнһә, кемгә барыр? (113).
*Ирҙәр* мал таба, ҡатындар ҡапсыҡ тегә (166).
*Ирҙәр* туйҙа, ҡатындар курниста була (132).
Ирҙәр һөйөр һауҙы, ҡатындар һөйөр байҙы (166).
*Ирҙәр* эш бешерә, ҡатындар аш бешерә (166).
*Ирҙәргә* — ирлек, ҡатындарға — хурлыҡ (132).

*Irҙәргә* эш булһын, ҡатын-ҡыҙға һүҙ булһын (197).
*Ире* барҙың — көнө бар (166).
*Ире ир* булһын, иҙәне ер булһын (132).
*Ире* өмә әйткән, ҡатыны баланға киткән (76, 190).
*Ире* сығыр ишектән, ҡатыны сығыр тишектән (190).
*Ире* табылһа, өйө табылыр (132).
*Ире* ямандың иңенән, ҡатыны ямандың еңенән билдәле (166).
Ирекле баштан *ир* үлмәҫ (197).
*Ирем* илгә сыҡһа — мирҙыҡы, ҡайтып килһә — минеке (190).
*Ирем* китте ҡалаға, мин киттем далаға (190).
*Ирем* — ҡара ерем (191).
*Ирем* үлде, иргә барҙым — башыма имгәк алдым,
Ҡатыным үлде, ҡатын алдым — башыма ҡайғы алдым (191).
*Ирем* һүҙе аш кеүек, ҡатыным һүҙе таш кеүек (191).
*Ирен* һөйгән ҡатындың өйөнә нур яуыр (166).
*Ирен* ямандаған ҡатындан оиз. ҡатынын ямандаған *ирҙән* биҙ (166).
Иренгәнде *ир* алмаҫ (132).
Ирене ҡыбырлаһа ла ир булһын (166).
*Иренә* хеҙмәт иткән — иленә хеҙмәт иткән (167).
*Ireң* булмаҫтайға иренеңде бирмә (132).
*Ireңдән* айырылғансы, күкрәгеңдәге йәнеңдән айырыл (167).
Иркә ҡатын *ирҙең* һаҡалына тотонор (167).
*Ирмен* тиған *ир* эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр,
Ҡатынмын тигән ҡатын эсендә бишекле бала ятыр (167).
Иртә торған *ир* уңыр (42).
Ирән ерҙә *ир* үлмәҫ (85).
Ирәүән барҙа *ир* үлмәҫ, андыҙ барҙа ат үлмәҫ (388).
Иҫерек *ирҙе ир* тимә (412).
Ишәк арығанын белмәҫ, *ир* ҡартайғанын белмәҫ (388).
Ишәк ауырығанын, *ир* ҡартайғанын белмәҫ (167).
Йомарт *ирҙең* итәге киң (267).
Йортто тотҡан — *ир,* өйҙө тотҡан — ҡатын (167).
Йотсолоҡ йомарт *ирҙең* дә ҡулын бәйләй (102).
Йүнһеҙ *иргә* аҡса бирһәң, әйләнеп ҡайтмаҫ (226).
Йыллығын уйламаған *ирҙән* биҙ, айлығын уйламаған ҡатын-дан биҙ (167).

Йыраҡ тип ханға тел тейҙермә — ҡулы етер,
Насар тип *ирҙе* әрләмә — ҡарыуы етер (168).

Йырҙан *ир* йәшәрмәһә лә, күңел йәшәрер (413).

Кеше бәхете кешегә им булмай, кеше *ире ир* булмай (168).

Кеше *иренә* ышанып, түшәк йәймә (133).

Кешнәгән айғырҙың өйөрөн күр, маҡтанған *ирҙең* өйөн күр (169).

Көндөҙ йоҡлаған *ир* булмаҫ (43).

Көтөү ташлаған малды бүре алыр, ил ташлаған *ирҙе* ғүр алыр (**86**).

Күлде ҡамыш матурлай, *ирҙе* намыҫ матурлай (197).

Күп әйткән *ир* бер әйткән ҡатынға тормай (347).

Күрше ҡатындың *ире* үлһә, ҡырҡ ҡатынға ғауға төшә (134).

Кәзә «тоҙ» тип, *ирҙәр* «ҡыҙ» тип ҡартайыр (134).

Ҡаҙ ҡанаты — ҡауырһын, *ир* ҡанаты — ат (71).

Ҡамсат бүрек — түр күрке, түңәрәк һаҡал — *ир* күрке (250).

Ҡамыш һыуҙап туймаҫ, ҡатындар *ирҙән* туймаҫ (171).

Ҡарт булһа ла *ирең* булһын, ҡыйыҡ булһа ла өйөң булһын (135).

Ҡарт кыҙ *ир* һайламаҫ, үлгәп кеше ер һайламаҫ (135).

Ҡасып киткән ил булмаҫ, ҡурҡаҡ еғет *ир* булмаҫ (294).

Ҡатын аҙһа — *ир* башына, түрә аҙһа — ил башына (87).

Ҡатын беләге ир һыйлар, *ир* беләғе ил һыйлар (171).

Ҡатын ғәйрәтле булһа, *ир* ғибрәтле була (171).

Ҡатын *ир* тупрағынан, *ир* мал тупрағынан яралған (171).

Ҡатып ҡанаты — *ир, ир* ҡанаты — ат (172).

Ҡатын ҡарар *ирғә, ир* ҡарар ерғә (172).

Ҡатын ҡәрендәше ҡаҙан янында, *ир* ҡәрендәше ишек төбөндә (172).

Ҡатын өйҙә, *ир* тышта булыр (172).

Ҡатын теләһә, ишәктән *ир* яһар, *ирҙән* ишәк яһар (172).

Ҡатын уңғаны *иргә* яраған, *ир* уңғаны илгә яраған (45).

Ҡатын һынағың килһә — өйҙәш ин, *ир* һынағың килһә — юлға сыҡ (172).

Ҡатындарҙың теле уҙһа, *ирҙәрҙең* ҡулы уҙа (172).

Ҡатындың һараны, *ирҙең* йомарты яҡшы (172).

Ҡатын-ҡыҙ күрке — сәс тә ҡаш, *ирҙәр* күрке — мыйыҡ та һаҡал (272).

Ҡатынһыҙ ир — йүгәнһеҙ ат (172).
Ҡатыны һәлкәү булһа, *ире* ялҡау булыр (172).
Ҡатыны яман *ир* аҙыр (173).
Ҡомһоҙ ер булмаҫ, ғәйепһеҙ ир булмаҫ (174).
Ҡорал эшләр — *ир* маҡтаныр, ҡылыс киҫер — ҡул маҡтаныр (**121**).
Ҡояш тапһыҙ, *ир* ғәйепһеҙ, ил дауһыҙ булмаҫ (121).
Ҡул телдән айырылмаҫ, һөйәк иттән айырылмаҫ, һүҙ эштән айырылмаҫ, *ир* һүҙенән айырылмаҫ (197).
Ҡурҡаҡ *ир* — аяҡлы сир (294).
Ҡуштан *ирғә* яраһа ла, илғә ярамай (174).
Ҡуштан ҡатын *ирғә* яраған, ҡуштан егет түрәгә яраған (104).
Ҡуштан ҡатын *ире* сыҡһа — кейенер, *ире* ҡайтһа — көйөнөр (174).
Ҡуянды ҡамыш үлтерә, *ирҙе* намыҫ үлтерә (273).
Ҡыҙ байлыгы — күркәм холоҡ, *ир* байлығы — тәүәккәл (136).
Ҡыҙ баланың дәрте күкрәктә, *ир* баланың дәрте йөрәктә (136).
Ҡыҙ күңелендә — балалы бишек, *ир* күңелендә — эйәрле ат (136) .
Ҡыҙ ҡылығы менән, *ир* эше менән һөйҙөрөр (175).
Ҡыҙҙы бәхетле иткән — ир (137).
Ҡыҙың булһа — *ирҙә* булһын, *ирҙә* булмаһа — ғүрҙә булһын (137) .
Ҡыйыҡ булһа ла, өй булһын, ҡарт булһа ла, *ир* булһын (176).
Ҡырҡ улың булғансы, ҡыптыр *ирең* булһын (176).
Ҡәйнеш — ярты *ир, ир* юғында бөтөн ир (176).
Мал ашаған еренә, *ир* тыуған иленә ҡайтыр (87).
Мал тапмаҫ *ир* булмаҫ, бала тапмаҫ ҡатын булмаҫ (176).
Мал торған ерен, *ир* тыуған илен онотмаҫ (87).
Матур ҡатын — *ир* күрке (176).
Матур ҡатын — *ир* күрке, батыр еғет — ил күрке (295).
Мир бөтмәһә, *ир* бөтмәҫ (176).
Мығырҙаҡ *ирғә* — мығырҙаҡ ҡатын (177).
Мәҡәл — һүҙҙең атаһы, вәғәҙә — *ирҙең* вафаһы (349).
Намыҫлы *ир* хур булмаҫ (275).
Ни күрһә лә, *ир* башы менән ат башы күрә (197).
Нужна күрмәй *ир* булмай (213).
Осорорға ел көслө, еңелергә *ир* көслө (198).

Сирле булһаң — *ирең* һөймәҫ, ярлы булһаң — туғаның һөймәҫ (178).

Сүбәк баш *ир* булғансы, сепрәк баш ҡатын булғаның яҡшы (198).

Сүп баҫҡан ер боҙолор, йоҡо баҫҡан *ир* боҙолор (47).

Табаҡ күрке аш менән, *ирҙең* күрке эш менән (48).

Тауҙың башын болот киҫер, *ирҙең* башын юҡ киҫер (214).

Тәртә дулап ат булмаҫ, ҡатын дулап *ир* булмаҫ (181).

Тәүге *ир* — *ир* йолаһы, икенсеһе — йөҙ ҡараһы (181).

Уңмаған ат тәртә һындыра, уңмаған ҡатын *ирен* туҙҙыра (182).

Ут асыуын — табанан, *ир* асыуың — баланан (192).

Утыҙҙа *ир* — ил күрке (393).

Утыҙҙа *ир* ут баҫыр (393).

Үҙәккә үткән ел яман, илен һатҡан *ир* яман (90).

Үтеп киткән ямғырҙы ямылсы алып ҡыуырмы?
Аҫыл *ирҙең* балаһы аҫылһыҙ булып тыуырмы? (184).

Халҡы яман хан аҙыр, ҡатыны яман *ир* аҙыр (184).

«Халҡым» тиғән *ир* — алтын (91).

Хәйерһеҙ ҡатын *ир* бөлдөрөр, хәйерһеҙ түрә ил бөлдөрөр (92).

Һаран *ирҙә* мал торор (215).

Һауаны йондоҙ, *ирҙе* һаҡал, ҡатын-ҡыҙҙы сәс матурлай (282).

Һимеҙлекте ҡуй күтәрер, ауырлыҡты *ир* күтәрер (198).

Һонәр — *ирҙең* ҡанаты (52).

Һөнәрле *ир* үргә оса, һөнәрһеҙ *ир* күлгә оса (52).

һөнәрһеҙ *ир* — аяҡлы сир (52).

һөнәрһеҙ *ир* — ҡанатһыҙ ҡош (52).

Һүҙенән ҡайтҡан — ир түгел (198).

Һыйырҙың һөтө — телендә, *ирҙең* бәхете — илендә (92).

Һыу ағыр ҙа — таш ҡалыр, *ир* үлер ҙә — дан ҡалыр (296).

Һыу — һыйған ярында, *ир* — тыуған яғында (92).

һыуһыҙ ерҙә балыҡ тормаҫ, йүнһеҙ *ирҙә* байлыҡ тормаҫ (445).

Һыуы менән ер ҡәҙерле, иле менән *ир* ҡәҙерле (92).

Һәр кемдә үҙ ҡайғыһы, ҡарт ҡыҙҙа *ир* ҡайғыһы (142).

Ырыуы юҡ *ир* булмаҫ, олгоһө юҡ тун булмаҫ (185).

Эт аҙғыны буранда ҡоторор, *ир* аҙғыны урамда ҡоторор (283).

Эт туйған ерен эҙләй, *ир* тыуған ерен эҙләй (93).

Эт — туйған ерендә, бисә — һыйған ерендә, ***ир*** — тыуған ерендә (93).

Эшкә ашмаған ***ир*** — башыңа сир (186).

Эшләнмәгән эш ***иргә*** ҡот, яҡшы эшләһә, илгә ҡот (56).

Әкрен иргә ҡатын баш (186).

Әтәс ҡойроғо менән, ир мыйығы менән, ҡатын-ҡыҙ сәсе менән матур (284).

Юлдың тиғеҙе, малдың һимеҙе, ***ирҙең*** оҫтаһы, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы (357).

Яҡшы ат ***ирҙең*** данын сығарыр (76).

Яҡшы ат, яҡшы ҡатын ***ирҙең*** данын сығарыр (187).

Яҡшы ***ир*** — ил күрке, яҡшы ҡатын — ***ир*** күрке (187).

Яҡшы ***ир*** менән ҡатын хур булмаҫ (187).

Яҡшы ҡатын өҫтөнән ***ир*** йөрөмәй, яҡшы ***ир*** өҫтөнән ҡатын йөрөмәй (143).

Яҡшы ҡатын яман ***ирҙе ир*** итер, яман ***ир*** яҡшы ҡатынды ер итер (187).

Яҡшы ҡатын яман ***ирҙе*** моратына еткерер (187).

Яҡшы ҡатындың ***ире*** кейеменән билгеле (188).

Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ — һәр кешенең эшелер,
Яманлыҡҡа яҡшылыҡ — ***ир*** кешенең эшелер (318).

Яман ат, яман ҡатын — ***ирҙе*** шулар ҡартайтыр,
Яман бала, яман ҡорал — ***ирҙе*** шулар һарғайтыр (188).

Яман аттың ялын һаҡлағансы, яҡшы ***ирҙең*** гәрен һаҡла (188).

Яман UD узе һайлап алған ҡатынды үҙе яманлар (188).

Яман ***ирҙе*** яҡшы ҡатын кеше итер (188).

Яман ***ирҙән*** яҡшы ҡатын алдараҡ (198).

Яман ***ирҙән*** яҡшы ҡатын артыҡ (188).

Яман ҡатын ***ирен*** кеше алдында хур итер (188).

Яман ҡатын ***иренән*** яңғыҙ атын һуйҙырыр (188).

Яман ҡатын үҙе лә көн күрмәҫ, ***ирена*** лә кон күрһәтмәҫ (189).

Яман ҡатындан буйҙағым яҡшы, яман ***ирҙән*** яйҙағым яҡшы (189).

Ямғыр менән ер йәшәр, фатиха менән ***ир*** йәшәр (198).

Ямғыр менән ер йәшәрә, аҡса менән ***ир*** йәшәрә (226).

Ярлы булһаң — күршең һөймәҫ, сирле булһаң — ***ирең*** һөймәҫ (108).

ир-аҙамат

*Ир- аҙамат* билгеһе — тышта мырҙа, өйҙә ҡол (163).

ир-ат

*Ир-ат* булһа, йорт-ерөн маҡта,
Ҡатьщ.кыҙ булһа, аш-һыуын маҡта (234).
*Ир-ат* өйҙә ултырһа ла, күңеле тышта,
Ҡатын-ҡыҙ тышта йөрөһә лә, күңеле өйҙә (163).

ирҙеке

Дау — *ищеке,* яу — илдеке (118).

ирҙән-иргә

*Ирҙән-иргэ* йөрөгәнсе, гүрҙән гүргә йөрө (166).

ир-егет

Бүре тотор бурҙай эт бөйөрөнән беленер,
Бүре һуғыр ***ир-егет*** беләгенән беленер (68).
Имән ағастың эйелгәне - һынғаны, ***ир-егеттең*** оялғаны -
**үлгәне (195).**
Ир-егет башына эШ төшкәндә һыналыр (196).
*Ир-егет* бер көрәштә ике йығылмаҫ (197).
*Ир-егет* — ил көҙгөһө (85).
*Ир-егет* майҙан тотор (196).
Ир-егет мал даулаһа, матур ҡыҙ йәр һайлай (13 ). 1
*Ир-егет* ни күрмәй, ИР күңеле ни белмәй (196).
Ир-егет өйҙә тыуыр, яУ?а ҮлеР (196).
*Ир-егет* өйҙән сыҡһа, өйөрөнә ҡушылыр (196).
*Ир-егет* үҙе өсөн ть!Уа’ иле өсөн Үлә (196.)
*Ир-егет* үлемдән -куРкмаҫ (196).
*Ир-егетте* юлдашь1на ҡарап беләләр (203)
*Ир-егеттең* аҫылы ил эшендә танылыр (85).
*Ир-егеттең* ике юлдашы бар: береһе — батырлыҡ, икенсе
һе — тәүәккәллек (293).
*Ир-егеттең* оялыуЫ - имән агастың бөгөлөүе (196).
*Ир-егеттең* үлгәне — имән агастың һынганы (196).

*Ир-егеттең* эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр (196).
*Ир-егеттең* юлдашы — тәүәккәллек (196).
*Ир-егеттең* яҡшыһы ил менән (85).
Түшке айылдың батҡанын эйәһе белмәҫ, ат белер;
*Ир-егеттең* ҡәҙерен ағай-эне белмәҫ, ят белер (180).

ирле

*Ирле* бисә — сирле бисә, ирһеҙ бисә — бауһыҙ уймаҡ (167).
*Ирле* ғүмер — иркә ғүмер (167).
*Ирле* Иҙел кискәндә, ирһеҙ ултырып ҡала (442).
*Ирле* иренә таяна, ирһеҙ биленә таяна (167).
*Ирле* кеше Иҙел кискән, ирһеҙ кеше утҡа төшкән (167).
*Ирле* ҡатын — терәкле, маллы ҡатын — йөрәкле (167).

ирлек

Ир башына яу килһә, *ирлеге* китер башынан.
Бей башына яу килһә, бейлеге китер башынан (119).
Ир имғәккә ҡалһа ла *ирлек* итер (402).
Ир ирлеген итер, еренә етер (196).
Ир *ирлеген* итер, моратына етер (196).
Ирҙәргә — *ирлек,* ҡатындарға — хурлыҡ (132).

ирһеҙ

Ашыҡҡан ҡыҙ *ирһеҙ* ҡалыр (128).
Икеғә ышанған — берһеҙ, уйнашҡа ышанған — *ирһеҙ{*131),
Имешкә ышанған *ирһеҙ* ҡалған (344).
Ирле Иҙел кискәндә, *ирһеҙ* ултырып ҡала (442).
Ирле иренә таяна, *ирһеҙ* биленә таяна (167).
Ирле кеше Иҙел кискәндә, *ирһеҙ* кеше утҡа төшкән (167).
Ирле ҡатын *ирһеҙ* ҡатындың хәлен белмәҫ (167).
*Ирһеҙ* ҡатын — йүғәнһеҙ ат (167).
*Ирһеҙ* ҡатын һәр ирғә яҡын (167).
*Ирһеҙ* ҡатынға, йүғәнһеҙ атҡа ышанма (167).
*Ирһеҙ* ҡатындар ҙа үлмәй, донъя рәхәте күрмәй (167).
Уйнашҡа ышанған *ирһеҙ* ҡалған (140).
Ултырған ҡыҙ урынын табыр, ашыҡҡан ҡыҙ *ирһеҙ* ҡальгр (141).

## Й

**йәр**

Ғәйепһеҙ *йәр* эҙләгән йәрһеҙ ҡалыр (129).
Донъя күрке *йәр* менән (130).
Екмәһәң дә ат яҡшы, һөймәһәң дә *йәр* яҡшы (130).
Ир-егет мал даулаһа, матур ҡыҙ *йәр* һайлай (131).
Йыйған малың, һөйгән *йәрең* ятҡа китмәһен (133).
Йән аҙығы *йәр* булыр (133).
Йәнең уртаҡ булһа ла, *йәрең* уртаҡ булмаһын (168).
*Йәр* бирмәк — йән бирмәк (133).
*Йәреңдең* ҡәҙерен айырылғас белерһең (168).
Кемдәр малын кем йыймай, кемдәр *йәрен* кем һөймәй (145).
Ҡуйынындағы *йәрен* алғансы, эсендәге йәнен ал (135).
Ҡысыған ерҙән ҡул китмәй, һөйгән *йәрҙән* к үҙ китмәй (137).
Менгән атың аҡбуҙ булһын, һөйгән *йәрең* йәш ҡыҙ булһын (138).
Оялсан егет *йәр* тапмаҫ (138).
Һөйгән *йәр* — һөйәгең елеге (141).
Һөймәгән *йәр йәр* түгел, ташлаһаң да йәл түгел (142).
Һөрәнләгән ҡыҙыл тел һөйгән *йәрҙән* айырған,
Һөйләй белгән сәсән тел яу килгәндә ҡайырған (355).
Яңы тун кейергә яҡшы, яңы *йәр* һөйөргә яҡшы (144).

**йәрһеҙ**

Ғәйепһеҙ йәр эҙләгән *йәрһеҙ* ҡалыр (129).
Дәртһеҙ кеше — күсәк, *йәрһеҙ* кеше — ишәк (130).
Егет *йәрһеҙ* булмаҫ (130).
Ир малһыҙ булмаҫ, егет *йәрһеҙ* булмаҫ (132).

## К

**кейәү**

Ай тормай ат маҡтама, йыл тормай *кейәү* маҡтама (148).
Ат тоҙға килә, *кейәү* ҡыҙға килә (150).
Атаһыҙҙы *кейәү* итмә, инәһеҙҙе килен итмә (127).

Ашыҡҡан ҡыҙ *кейәүгә* барһа ла мандымаҫ (128).
Бер ҡыҙ *кейәүгә* сыҡһа, ҡырҡ ҡыҙ төш күрә (129).
Еренә күрә еләге, ҡыҙына күрә *кейәүе* (161).
Еткән ҡыҙ *кейәүҙән* ҡурҡмаҫ (131).
Йүнһеҙ *кейәү* йорт тотмаҫ (186).
*Кейәү* аҙнаһы айҙан оҙон (133).
*Кейәү* аты менән көл түкмә (168).
*Кейәү* биреүсән булһа, еңгә йөрөүсән булыр (440).
*Кейәү* йомарт булһа, еңгәһе йүгерек була (133).
*Кейәү* килде — хан килде (168).
*Кейәү* — ҡамсат бүрек (168).
*Кейәү* ул булмаҫ, килен ҡыҙ булмаҫ (168).
*Кейәү* һыйы — хан һыйы (168).
*Кейәүгә* бирәһе ҡыҙ түгел, ашҡа һалаһы тоҙ түгел (308).
*Кейәүгә* торһа ла — ҡамау, ултырһа ла — ҡамау (168).
*Кейәүҙең* түре — улдың тупһаһы (168).
*Кейәүең* көйһөҙ булһа, тешең һыҙлагандан яман булыр (168).
*Кейәүең* ҡыуалаһа — ишек бауы тот,
Улың ҡыуалаһа — түргә менеп ултыр (442).
*Кейәүең* ҡыуһа — ишек тот, улың ҡыуһа — бишек тот (168).
*Кейәүең* орошһа — ишек ҡара, улың ҡыуһа — түргә табан (442).
*Кейәүең* тауышы сыҡһа — ишек бауын тот,
Улың тауышы сыҡһа — түргә сыҡ (442).
*«Кейәү-кейәү»* тиә, елкәм ергә тейә (191).
Килен ҡәйнә тупһаһынан, *кейәү* ҡайны тупһаһынан яралыр (169).
Килен үнкәлән, таш алыр, *кейәү* үпкәләп, аш алыр (169).
Көҙгө көн — *кейәү* аҡылы (413).
Көҙгө ҡатыҡ, көмөш ҡашыҡ *кейәүем* менән ҡыҙыма;
Яҙгы ҡатыҡ, ярыҡ ҡашыҡ киленем менән улыма (191).
Көҙгө тон *кейәүгә* ҡыҫҡа (170).
Көйһөҙ *кейәү* кейәүләп ятҡансы, көйлө *кейәү* кәләшен алын ҡайтҡан (133).
Көйһөҙ *кейәүҙең* көйө табылмаҫ (170).
Күлдәгең ситән башына, үҙең *кейәү* ҡуйынына (252).
Ҡапҡа ауыҙына ҡоҙа килһә, ҡабам менән орсогом;

***Кейәүем*** менән ҡыҙым килһә, һабам менән турһыгым (191).
Ҡыҙыңа тиң ***кейәү*** килһә, ҡалым алма, тиген бир (137).
«Туйҙым» тигән ***кейәү*** тугыҙ мөсәй кимергән (192).
Улың кемде һөйһә, киленең шул булыр.
Ҡыҙың кемде һөйһә, ***кейәүең*** шул булыр (182).
Улың менән ирешһәң, түренә ултырып ireш.
***Кейәүең*** менән ирешһәң, ишек тотҡаһын тотоп ireш (182).
Әсәһеҙҙе «килен» тимә, атаһыҙҙы ***«кейәү»*** тимә (186).
Яҙға сыҡҡан атты яуҙан да йәлләмә.
Көҙгә кергән атты ***кейәүеңә*** лә бирмә (76).
Яҙгы атты ялсыңдан да алма, көҙгө атты ***кейәүеңдән*** дә ҡыҙ-ган (436).

кейәүлә

Көйһөҙ кейәү ***кейәүләп*** ятҡансы, көйлө кейәү кәләшен алып ҡайтҡан (133).

килен

Ай айламай ат маҡтама, йыл йылламай ***килен*** маҡтама (148).
Алга киткән кешенең эте үлән ашар,
Кирегә киткән кешенең ***килене*** урлан ашар (148).
Атаһыҙҙы кейәү итмә, инәһеҙҙе ***килен*** итмә (127).
«Ашамайым» тигән ***килен*** ашаган алтмыш белен (245).
Бай килене булғансы, ярлы ҡыҙы булһамсы (111).
Байҙың ***килене*** булгансы, ярлының ҡыҙы бул (98).
Бер ***килен*** алһаң, билеңде бер ерҙән, ике ***килен*** алһаң, ике ерҙән, өс ***килен*** алһаң, өс ерҙән быуырһың (158).
Бер ***килен*** — йот, бер ***килен*** — ҡот (158).
Бирнә биргән — бикә ***килен*** (158).
Ебәк иләй белмәгән йөн тетә, ***килен*** көтә белмәгән өй көтә (160).
Ике ***килен*** бешергән аш гел тоҙ булыр, йә гел тоҙһоҙ булыр (162).
Кейәү ул булмаç, ***килен*** ҡыҙ булмаç (168).
Килбәтле ҡыҙ ***килен*** булғас күренер (133).
***Килен*** алама, ҡәйнә насар (191).

*Килен* алгансы — үҙ улың, *килен* алғас — кеше улы (169).
*Килен* алдым — һөйөндөм, һалмаһына төйөлдөм (191).
*Килен* алһаң, үҙеңдән юғарынан ал, ҡыҙ бирһәң, үҙеңдән түбәнгә бир (169).
*Килен* белгәне — бер нағыш (191).
*Килен* булһаң — ҡәйнәгә ярамаҫһың, ҡҙйнә булһаң — *киленгә* ярамаҫһың (169).
*Килен* кеше ким кеше, алабай менән тиң кеше (169).
*Килен* кеше — ким кеше, көнләксегә тиң кеше.
Ҡәйнә кеше — уллы кеше, губернаторға тиң кеше (169).
*Килен* кеше — сит бауыр (169).
*Килен* килбәтле булһын, һүҙе ширбәтле булһын (145, 169).
*Килен* — килендәшкә көндәш (169).
*Килен* — киленсәк, ҡыҙ — ҡырҡынсаҡ (169).
*Килен* килер, *килен* менән киле һабындай теле килер (169).
*Килен* көнө — эт көнө (169).
*Килен* ҡаҡҡа төшмәҫ (169).
*Килен* ҡәйнә тупрағынан яралыр (169).
*Килен* ҡәйнә тупһаһынан, кейәү ҡайны тупһаһынан яралыр (169).
*Килен* ҡәйнә усағынан ярала (443).
*Килен* ҡәйнә әҙенән китер (169).
*Килен* ҡәйнәгә оҡшар (169).
*Килен* малы — нағыш, башы — һагыш (169).
*Килен* саҡтың рәхәте — ҡыҙ саҡтың михнәте (169).
*Килен* таянып төшкән мал килендеке була (169).
*Килен* төшһә, текло аягы менән төшһөн (169).
*Килен* туны туҙҙы — *килен* ғүмере уҙҙы (191).
*Килен* үпкәләп — таш алыр, кейәү үпкәләп — аш алыр (169).
*Киленгә* ҡарағансы кирегә ҡара (169).
*Киленде* йылһыҙ маҡтама (169).
*Килендең* аяғынан, ҡуйсының таяғынан (169).
*Киленем* әйбәттән түгел, мейесем әйбәттән (191).
*Килененең* сибек булһа — бирҙе хоҙай.
*Килененең* убыр булһа — орҙо хоҙай (170).
Кире китерҙең *килене* уғрылыҡ итер (170).
Киске шаңдаҡ ҡыҙарһа, *киленем* ул тапҡандай.
Иртәнге шаңдаҡ ҡыҙарһа, илем яуға сапҡандай (418).

Киткән *килен* килбәтле (170).
Көҙгө ҡатыҡ, көмөш ҡашыҡ кейәүем менән ҡыҙыма;
Яҙгы ҡатыҡ, ярыҡ ҡашыҡ *киленем* менән улыма (191).
Көйгән икмәк — *килендеке* (170).
Ҡаза килһә, *килендән* күрерҙәр (170).
Ҡайнаға ҡайҡайып тормаç, *килен* кирелеп тормаç (170).
Ҡуйҙың тояғынан, *килендең* аяғынан һына (174).
Ҡурҡаҡ *килен* ҡуй башынан да ҡурҡҡан (174).
Ҡыҙ биргән боçоп ятыр, *килен* алған — губернатор (136).
Ҡыҙ биргән ергә ебәктән дә йомшаҡ бул,
*Килен* алған ергә дегәнәктән дә ҡаты бул (136).
Ҡыҙ оҙатҡан яланғас ҡалыр, *килен* алған түренә урын һалыр (136).
Ҡыҙ сағым — солтан саҡ, *килен* сағым — олтан саҡ (175).
Ҡәйнәһенә күрә *килене (*176).
Ҡәйнәһенән оялган *килен* бала тапмаç (176).
Маҡталган *килен* туйҙа хур була (176).
Оло *килен* ҡатаһы кесе *киленгә* ярамай (177).
Орошҡаҡ булһа — улың яу, ҡарышҡак булһа — *килененң* яу (443).
Тауыҡ керһә — сүп сыгыр, *килен* керһә — һүҙ сыгыр (179).
Улым бер булһа, *киленем* биш булыр (192).
Улым, һиңә әйтәм, *киленем,* һин тыңла (192).
Улың асыуланһа — түргә мен дә сәй эс,
*Киленең* асыуланһа — ишек тотҡаһын тот (182).
Улың кемде һөйһә, *киленең* шул булыр,
Ҡыҙың кемде һөйһә, кейәүең шул булыр (182).
Уңған *килен* һалмаһынан билгеле (182).
Үҙемдең *киленем* яман, ҡыҙымдың ҡәйнәһе яман (193).
Хәҙерге *килендең* китер ере киң (184).
һоймәç улың йорт тотор, һоймәç *киленең* һөйәгең тотор (184).
Әбей — *килен,* үҙем — ул (193).
Әсәһеҙҙе «килен» тимә, атаһыҙҙы «кейәү» тимә (186).
Яҡшы *килен* — *килен,* яман *килен* — үлем (187).
Яҡшы *килен* серҙәшеңдәй булыр, яҡшы улың ҡорҙашыңдай булыр (187).
Яҡшы *килен* яҙ килер, яман *килен* көҙ килер (143).
Ялҡау ҡәйнәгә — һәпрә *килен* (188).

**килендеке**

Килен таянып төшкән мал *килендеке* була (169).
Китек һалма — *килендеке* (170).
Көйгән икмәк — *килендеке* (170).

**киләндәш**

Ағай-эне татыу булһа, менерғә ат етә,
Киләндәштәр татыу булһа, ашарға аш етә (441).
Килен — *киләндәшкә* көндәш (169).

**киленсәк**

Килен — *киленсәк,* ҡыҙ — ҡырҡынсаҡ (169).

**көндәш**

Ағай-энең бар ерҙә «дошманым юҡ» тимә,
Апһының бар ерҙә *«көндәшем* юҡ» тимә (146—147).
Бер ҡатындың ире үлһә, ҡырҡ ҡатыиға *көндәш* була, ти (129).
Килен — килендәшкә *көндәш* (169).
*Көндәш* күргәндең ҡыҙын алма (133).
*Көндәштең* көлө лә *көндәш* (170).
Өйҙәш булғансы, *көндәш* бул (178).
Өйҙәш — *көндәш* (205).
Өйҙәш *көндәштән* яман (178).
Өйҙәш менән торғансы, *көндәш* менән тор (178).
Өйҙәш тә бер, *көндәш* тә бер: ҡысҡырыш та талаш (178).
Яуыздың юлдашы күп, яҡшының *көндәше* күп (322).

**көндәшле**

*Көндәшле* өйҙә көн дә көйөнөс (170).
*Көндәшлегә* төн оҙон, көнлөксөгә көн оҙон (170).
*Көндәшленең* төнө лә уртаҡ (170).
Көткәнгә көн оҙон, *көндәшлегә* төн оҙон (170).

**кәләш**

Көйһөҙ кейәү кейәүләп ятҡансы, көйлө кейәү *кәләшен* алып ҡайтҡан (133).
*Кәләш* алһаң төн ҡыҫҡара (134).

# Ҡ

ҡайнаға

***Ҡайнаға*** ҡайҡайып тормаç, килен кирелеп тормаç (170).

ҡайны

Атаға ул булмаһаң, ***ҡайныға*** ҡол булырһың (151).
Атайым йорто һаламдыр — һарай булып күренә,
Ҡайным йорто ҡабыҡтыр — тамуҡ булып күренә (190).
Килен ҡәйнә тупһаһынан, кейәү ***ҡайны*** тупһаһынан яралыр (169).
Ҡайғым юҡта ҡайғы иттем ***ҡайным*** карттың үлемен (191).

ҡа н-ҡәрҙәш

Ата-инәһен һөймәгән ҡыҙ яман,
***Ҡан-ҡәрҙәшен*** һөймәгән ул яман (151).

ҡатын

Аҙғын ***ҡатын*** йөрөр-йөрөр ҙә, өйөнә еткәс, йүгерер (148).
Ай байыһа — йондоҙ бар, ***ҡатын*** үлһә — балдыҙ бар (189).
Айһыҙ атың маҡтама, йылһыҙ ***ҡатын*** маҡтама (148).
Аҡ сәлләле мулланан аҡ яулыҡлы ***ҡатын*** артыҡ (112).
Аҡса алһаң, һанап ал, ***ҡатын*** алһаң, һынап ал (126).
Аҡыллы атын маҡтар, тинтәк ***ҡатынын*** маҡтар (362).
Аҡыллы атын маҡтар, урта йүләр ***ҡатынын*** маҡтар, үтә йүләр үҙен маҡтар (363).
Аҡыллы ир ***ҡатынын*** яманламаç (148).
Аҡыллы ***ҡатын*** — хазина (148).
Алан-йолан йә атыңды алыр, йә ***ҡатыныңды*** алыр (261).
Алты ***ҡатын*** ашҡа килһә, аштың быуы күренмәй (229).
Алтын башлы ***ҡатындан*** баҡыр башлы ир артыҡ (193).
Алтын башлы ***ҡатынды*** баҡыр башлы ир уҙыр (444).
Аптыраған ***ҡатын*** абышҡаһын «атай» тигән (149).
Арба ватылһа — ат, быҙау үлһә, ***ҡатын*** гәйепле (149).
Арба яҡшы йөрөһә — дегеттән, ***ҡатын*** яҡшы йөрөһә — егеттән (441).

Арбаны деғет тота, *катынды* еғет тота (441).
Арбаны йөрөткән дегет, *катынды* йөрөткән егет (149).
Арғымаҡтың билгеһе — ҡаҙылыҡ йыймаҫ, ял йыйыр.
Яман егет билгеһе — *катын* алмаҫ, мал йыйыр (149).
Арт йортто туйҙырған *катын* ирҙе алға сығармай (149).
Артҡы айылың ныҡ булһа, атың тулап ни ҡылыр?
Алған *катының* яҡшы булһа, йортоң тулап ни ҡылыр? (149) .
Аҫмаған ҡаҙанды йөҙө ҡара *катын* көткән (149).
Аҫтындағы атыңа ышанма, ҡуйынындағы *катыныңа* ышанма (149).
Ат алһаң, арба кәрәк, *катын* алһаң, бары ла кәрәк (127).
Ат алһаң, өйөң менән кәңәшләш, *катын* алһаң, ауылың менән кәңәшләш (439).
Ат алһаң, яҡындан ал, *катын* алһаң, алыҫтан ал (127).
Ат алыу — *катын* алыу түгел (уңмаһаң, ташлап булмай) (**221**).
Ат барҙа бейә сапмаһын, ир барҙа *катын* алға сыҡмаһын (150) .
Ат менән *катындың* башын ҡаты тот (150).
Ат яманы тай менән уйнар, *катын* яманы бай менән уйнар (150).
Ата алмаған атынан күрер,
Ҡайтып килеп *катынынан* күрер (36).
Аттың шәбе — кешелә, *катын* шәбе күршелә (150).
Аты икәүҙең аяғы тынмаҫ, *катыны* икәүҙең ҡолағы тынмаҫ (150).
Атым бар тип атланма, *катыным* бар тип маҡтанма (150).
Атына асыуланған — *катынын* ҡыйнаған (190).
Атың ашамһаҡ булһа — уңдың, *катының* ашамһаҡ булһа — бөлдөң (151).
Атың насар булһа ла, *катының* яҡшы булһын (151).
Атың насар булһа, һатып ҡотолорһоң;
Этең насар булһа, атып ҡотолорһоң;
*Ҡатының* насар булһа, нисек ҡотолорһоң? (151).
Атың яман булһа, һатып ҡотолорһоң;
Ага-энең яман булһа, ҡасып ҡотолорһоң;
*Ҡатының* яман булһа, нисек ҡотолорһоң? (151).

Ауылсы *катын* — ҡабарсы (194).
Ашлыҡ уңһа — ерҙән, *катын* уңһа — ирҙән (154).
Аяҡлы ҡаза күрәһе еғет аяғы һыҙлау *катын* алыр (128).
Бай байлығын итә: ай һайын *катын* ала, ауыл һайын өй һала (95).
Байҙың *катыны* үлһә — түшәге яңырыр,
Ярлының *катыны* үлһә — башы ҡаңғырыр (98).
Байлыҡ көнөҙә инанма, *катындар* һүҙенә алданма, йүгерек атҡа таянма (99).
Баҡмаһаң — бала китер, ҡарамаһаң — *катын* китер (154).
Бала тапмаҫ *катын* булмаҫ — тороном әйт,
Мал тапмаҫ еғет булмаҫ — тоторон әйт (208).
Бала уңған *катындың* бер ҡулын бәйләй, уңмаған *катындың* ике ҡулын бәйләй (155).
Балалы *катындың* балағы сыҡҡан (190).
Баланы бишектә, *катынды* йәшлектә өйрәт (156).
Балаң үлһә, бер төнгө йоҡоң осор.
*Ҡатының* үлһә, бер өйөрлө йылҡың сығыр (156).
Балаһыҙ *катын* — емешһеҙ ағас (157)^
Балдыҙы сибәр кеше *катынына* үлем теләй (157).
Белемле *катын* башыңа ҡарай.
Белемһеҙ *катын* йәшеңә ҡарай (128).
Бер ир *катын* алһа, алтмыш *катын* илар (128).
Бер ирҙең *катыны* үлһә, алтмыш *катын* ҡыуана,
Бер *катындың* ире үлһә, алтмыш *катын* ҡайғыра (128).
Бер *катын* алдында икенсе *катынды,* маҡтама (194).
Бер *катын* биҙәнеү менән, бер *катын* төҙәнеү менән (194).
Бер *катынға* ҡәнәғәт — ғүмер буйы хуш ҡалған,
Башҡаларҙы эҙләгән — ҡатынынан буш ҡалған (158).
Бер *катында* ҡырҡ ир хәйләһе булыр (194).
Бер *катында* ун тауыҡтың косо бар (194).
Бер *катындың* ире үлһә, ҡырҡ *катынға* көндәш була, ти (129).
Бер *катындың* хәйләһе ҡырҡ дөйәгә йөк булыр (194).
Биҙәү *катын* — бала тапмаған *катын* (442).
Биҙәү *катын* — бикә булыр (158).
Биҙәү *катын* биҫтә булыр (442).
Бизмән менән ғер бергә, *катын* менән ир бергә (158).

Бойҙай яҡшыһы ерҙән, *-ҡатын* яҡшыһы ирҙән (158).
Бөлдөргән дә *-ҡатын,* көлдөргән дә *татын* (158).
Булмаҫ иргә бөкрө *татын* (159).
Булмаҫ *татындан* бөкрө тыуыр (159).
Бысраҡ ҡатын йылына етмеш йөк ҡыл ашатыр (159).
Донъяның төҙөклөгө лә, бөҙоҡлого ла *ҡатындарҙан* (160).
Дәүләт-байлыҡ дуҫ-иш арҡаһында, яҡшы исем *татын* арҡаһында (160).

Егеп сыҡҡан атың яҡшы булһын,
Ултырып сыҡҡан *татының* яҡшы булһын (160).

Егет инем — солтан инем,
Ҡыҙ йәрәштем — хан булдым,
*Ҡатын* алдым — хур булдым (144).

Еңгә *татын* ейәндеке (160).
Еңгә *татында* етмеш төрлө хәйлә була (160).
Ерек утын яҡма, еңгә *татын* алма: ерек утындың ҡыҙыуы юҡ, еңгә *татындың* йылыуы юҡ (160).
Иген уңмаһа — бер йыллыҡ, *ҡатын* уңмаһа — ғүмерлек (162).
Иҙел менән боҙға таянма, ат менән *ҡатынға* ышанма (162).

Ике *татын* алғандың вайраны бар,
Ике һыйыр һауғандың айраны бар (69).

Ике *татын* алғандың дауы өйөндә.
Яман *татын* алғандың яуы өйөндә (162).

Ике *татын* алғандың ҡолағы тынмаҫ (162).
Ике *татын* бергә килһә — баҙар була, өсәү бергә килһә — йәрминкә (195).
Икенең бере: йә ир, йә *татын* баш булһын (162).
Икмәк уңмаһа — бөтә, *татын* уңмаһа — ғүмер буйы китә (163).

Икмәк юғы ямандыр — ҡаты-ҡото кимертә,
*Ҡатын* юғы ямандыр — ҡарт әбейҙе һөйҙөртә (131).

Ир аҡыллы булһа, *татын* күндәм була (163).

Ир аҡыллыһы өс йылғыһын алдан уйлар,
*Ҡатын* аҡыллыһы өс көнлөгөн алдан уйлар (163).

Ир — ат, *татын* — арба (163).
Ир аты менән, *татын* ире менән маҡтаныр (164).
Ир батырлығына таянһа, *татын* матурлығына таяныр (164).
Ир — баш, *татын* ■— муйын (164).

Ир — баш, *патын* — түш (164).
Ир — беләк, *патын* — терәк (164).
Ир ғәйрәтле булһа, *ҡатын* ғибрәтле була (164).
Ир ҙә ир булып *ҡатындан* тыуған (164).
Ир иткән дә — *ҡатын,* ер иткән дә — *ҡатын* (164).
Ир йәше ике утыҙ, *ҡатын* йәше — бер утыҙ (387).
Ир — келәт, *ҡатын* — йоҙаҡ (164).
Ир кеше йөрөһә, мутлығы асылыр, *ҡатын* йөрөһә, ғәйебе асылыр (132).
Ир кешенең бер һүҙе — *ҡатын* кешенең йөҙ һүҙе (196).
Ир килтерә белһен, *ҡатын* еткерә белһен (164).
Ир көнләшмәгән — ишәк, *ҡатын* көнләшмәгән — ҡарсаҡ (164) .
Ир күп өйҙә утын булмаç, *ҡатын* күп өйҙә һыу булмаç (164).
Ир күрке — *ҡатын, ҡатын* күрке — ир (165).
Ир ҡанаты ат булыр, *ҡатын* ҡанаты ир булыр (165).
Ир ҡуштаны илгә яраған, *ҡатын* ҡуштаны иргә яраған (165).
Ир ҡуштаны түрәгә яҡын, *ҡатын* ҡуштаны иргә яҡын (442).
Ир менән *ҡатын* араһына ингәнсе, ике ут араһына ин (165).
Ир менән *ҡатын* араһына ингәнсе, ҡылыс менән ҡылыс араһына кер (442).
Ир менән *ҡатын* — бер йән, бер тән (165).
Ир менән *ҡатын* икеһе бер сыбыҡтан ҡыуылған (165).
Ир менән *ҡатын* икеһе лә бер ҡамырҙан әүәләнгән (165).
Ир менән *ҡатын* талашыр, түшәгендә ярашыр (165).
Ир менән *ҡатындың* тупрағы бер (165).
Ир өйҙөң бер сатын тотор, *ҡатын* өйҙөң өс сатын тотор (165).
Ир таба, *ҡатын* тота (165).
Ир — табыусы, *ҡатын* — өләшеүсе (165).
Ир тауышлы *ҡатында* әҙәп булмаç.
*Ҡатын* тауышлы ирҙә ғәйрәт булмаç (165).
Ир уңған булһа, *ҡатын* йылдам була (165).
Ир хәстәрле булһа, *ҡатын* таçтарлы була (165).
Ир һуғыштан ҡайтыр, һуғыш хәлен *ҡатынынан* ишетер (165) .
Иргә — баш,
Ир балага — аяҡ,
Ҡыҙ балага — ҡанат,
*Ҡатынға* — ҡойроҡ (246).

Ирғә — ***катын, ҡатынға*** — утын (166).
**Иргә – *катын,* мейескә — утын (кәрәк) (165).**
Ирҙе ҙур иткән дә ***катын,*** хур иткән дә ***катын*** (166).
Ирҙе ир иткән — ***катын, ҡатынды ҡатын*** иткән — ир (166).
Ирҙе ир иткән — ***катын, ҡатынды ҡатын*** иткән — утын (166).
Ирҙе иртә ҡартайтҡан — насар ***ҡатын, ҡатынды*** иртә ҡартайтҡан — сей утын (166).
Ирҙе көлдөргән дә ***ҡатын,*** бөлдөргән дә ***ҡатын*** (166).
Ирҙе әҙәм иткән дә ***ҡатын,*** әрәм иткән дә ***ҡатын*** (166).
Ирҙең атын аты сыгарыр, ***катындың*** атын ояты сығарыр (166).
Ирҙең атын йә аты сығарыр, йә ***ҡатыны*** сығарыр (166).
Ирҙең атын ***катын*** сығарыр, ***ҡатындың*** атын утын сығарыр (442).
Ирҙең нәфсеһе — бер, ***катындың*** нәфсеһе — туғыҙ (166).
Ирҙең уңмағаны — икмәкһеҙ, ***ҡатындың*** уңмағаны — күлдәкһеҙ (166).
Ирҙең яманы уғрылыҡ ҡылыр, ***ҡатындың*** яманы уйнаш ҡылыр (132, 166).
Ирҙән ишәк көнләшмәй, ***ҡатындан*** түшәк көнләшмәй (166).
Ирҙәр араҡынан иҫерә, ***ҡатындар*** һүҙҙән иҫерә (412).
Ирҙәр — имән тамыры, ***ҡатындар*** — бойҙай ҡамыры (166).
Ирҙәр мал таба, ***катындар*** ҡапсыҡ теғә (166).
Ирҙәр туйҙа, ***катындар*** курниста була (132).
Ирҙәр һөйөр һауҙы, ***катындар*** һөйөр байҙы (166).
Ирҙәр эш бешерә, ***катындар*** аш бешерә (166).
Ирҙәрғә — ирлек, ***катындарға*** — хурлыҡ (132).
Ире өмә эйткән, ***ҡатыны*** баланға киткән (76, 190).
Ире сығыр ишектән, ***ҡатыны*** сығыр тишектән (190).
Ире ямандың иңенән, ***ҡатыны*** ямандың еңенән билгеле (166).
Ирем үлде, ирғә барҙым — башыма имғәк алдым.
***Ҡатыным*** үлде, ***ҡатын*** алдым — башыма ҡайғы алдым (191).
Ирен һөйгән ***ҡатындың*** өйөнә нур яуыр (166).
Ирен яманлаған ***ҡатындан*** биҙ, ***ҡатынын*** яманлаған ирҙән биҙ (166).

Иркә *катын* ирҙең һаҡалына тотонор (167).
Ирле '*катын* ирһеҙ ҡатындың хәлен белмәҫ (167).
Ирле -*катын* — терәкле, маллы '*катын* — йөрәкле (167).
Ирмен тигән ир эсендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр,
*Ҡатынмын* тигән *катын* эсендә бишекле бала ятыр (167).
Иртә торган егеттең ырыҫы артыҡ,
Иртә торган *катындың* өлөшө артыҡ (42).
Ирһеҙ *катын* — йүгәнһеҙ ат (167).
Ирһеҙ *катын* һәр иргә яҡын (167).
Ирһеҙ *катынға,* йүгәнһеҙ атҡа ышанма (167).
Ирһеҙ *катындар* ҙа үлмәй, донъя рәхәте күрмәй (167).
Иске күлдәк тәнгә яҡын, үҙ *катының* йәнгә яҡын (167).
Иҫәпле *катын* ит еймәҫ (167).
Иҫәр атына асыуланһа, *катынын* ҡыйнар (167).
Иҫәр этен маҡтар, өйгә ҡайтһа, *катынын* маҡтар (368).
Ит тапмаган үпкәгә кинәнгән, *катын* тапмаган еңгәгә кинәнгән (132).
Йортто тотҡан — ир, өйҙө тотҡан — *катын* (167).
Йыллыгын уйламаган ирҙән биҙ,
Айлыгын уйламаған *катындан* биҙ (167).
Йәш *катынға* йәнен бирер, ҡарт *катынға* йүнен бирер (191).
Кесе *катын* — кеше *катыны* (168).
Кешегә атыңды бир, *катыныңды* бирмә (168).
Күрше *катындың* ире үлһә, ҡырҡ *катынға* гауға төшә (134).
Күршенен тауыгы ҡаҙҙай, *катыны* ҡыҙҙай (204).
Ҡамыш һыуҙан туймаҫ, *катындар* ирҙән туймаҫ (171).
Ҡамыш һыуҙан туймаҫ, *катындар* туйҙан туймаҫ (134).
Ҡаныҡҡан *катын* ҡырлыҡты ярма итә (171).
Ҡарамагандың *катыны* ташлар, баҡмагандың малы ташлар (71).
Ҡарга ҡарҡылдап, уйнашсы *катын* илап ышандырыр (171).
*Катын* аҙһа — ир башына, түрә аҙһа — ил башына (87).
*Катын* алмаҡ бик кәрәк, көн дә батман ит кәрәк (135).
*Катын* алмаҡ — ҡыҙ алмаҡ (135).
*Катын* алһаң, белеп ал, алдын-артын ҡарап ал (171).
*Катын* алһаң — күреп ал, ат алһаң — менеп ал (135).
*Катын* алһаң, утын ал, бер ягырлыҡ артыҡ ал (135).
*Катын* алһаң, утын ал, тәү мәлендә ҡотон ал (135).

*Ҡатын* алһаң — утын ал, утын алһаң — ҡороһон ал (171).
*Ҡатын* алһаң, һайлап ал, аяҡ-ҡулын бәйләп ал (135).
*Ҡатын* артынан мал килә, ҡыҙ артынан дан килә (135).
*Ҡатын* беләге ир һыйлар, ир беләге ил һыйлар (171).
*Ҡатын* булһаң да, ҡарарлы бул (197).
*Ҡатын* ғүмере — ҡырҡ йыл (391).
*Ҡатын* ғәйрәтле булһа, ир ғибрәтле була (171).
*Ҡатын* ир тупрағынан, ир мал тупрағынан яратылған (171).
*Ҡатын* кеше ҡамыр менән ҡартая, бала менән һарғая (171).
*Ҡатын* күп булһа, сүместе эт ялар (172).
*Ҡатын* ҡанаты — ир, ир ҡанаты — ат (172).
*Ҡатын* ҡарар иргә, ир ҡарар ергә (172).
*Ҡатын* ҡәрендәше ҡаҙан янында, ир ҡәрендәше ишек төбөндә (172).
*Ҡатын* менән *татын* талашһа, йәшлеғе менән ҡартлығын әйтер.
Бай менән ярлы талашһа, барлығы менән юҡлығын әйтер (104).
*Ҡатын* өйҙә, ир тышта булыр (172).
*Ҡатын* өҫтөнә *татын* — ут өҫтөнә утын (172).
*Ҡатын* сырағы ҡырҡ, бер янмаһа, бер яныр (172).
*Ҡатын* теләһә, ишәктән ир яһар, ирҙән ишәк яһар (172).
*Ҡатын* тота белмәгән көң иткән, ебәк тота белмәгән йөн иткән (172).
*Ҡатын* унғаны ирғә яраған, ир уңғаны илгә яраған (45).
*Ҡатын* үлеү — ҡамсы һабы һыныу (172).
*Ҡатын* үлһә — юлдан табыла, бала үлһә — билдән табыла (172).
*Ҡатын* һынағың килһә — өйҙәш ин, ир һынағың килһә — юлға сыҡ (172).
*Ҡатын* яҡшы булһа — ҡаҙна, уҫал булһа — ҡаза (172).
*Ҡатын* яман булһа — ҡунаҡ китер.
Улың яман булһа — дәүләт китер (172).
*Ҡатын* — ямау түгел, һүтеп ташлан булмай (192).
*Ҡатындар* теле — утлы киҫәү (197).
*Ҡатындар* һүҙе менән йөрөһәң, әжәлең етмәй үлерһең (197).
*Ҡатындар* һүҙенә алданма, йүгерек атҡа таянма (197).
*Ҡатындарҙың* күңелендә ни — телендә шул (197).

*Ҡатындарҙың* теле уҙһа, ирҙәрҙең ҡулы уҙа (172).
*Ҡатынды* кеше иткән — егет, арбаны яҡшы иткән — дегет (172).
*Ҡатынды* яҡшы күрһәткән — алдындағы балаһы,
Ыйырҙы яҡшы күрһәткән — артындағы танаһы (172).
*Ҡатындың* һараны, ирҙең йомарты яҡшы (172).
*Ҡатынмын* тигән *ҡатында* ат башындай алтын ята (172).
*Ҡатыны* сибәрҙең дуҫы күп булыр (172).
*Ҡатыны* үлгән ҡыҙлы ауылға ҡарап илай (443).
*Ҡатыны,* үлгән — ҡыҙлы йортҡа ҡарап илаған (173).
*Ҡатыны* һәлкәү булһа, ире ялҡау булыр (172).
*Ҡатыны* эшлекһеҙҙең ҡулынан энә китмәҫ (173).
*Ҡатыны* юҡтың яҡыны юҡ (173).
*Ҡатыны,* яҡшы кешеғә бәхет кәрәкмәй,
*Ҡатыны,* яман кешеғә ләхет кәрәкмәй (173).
*Ҡатыны,* яман ир аҙыр (173).
*Ҡатынынан* айырылғандың канаты ҡайырылған (173).
*Ҡатының* — ғүмерлек юлдашың (173).
*Ҡатының* йыбытҡы булһа, энә-ебеңде үҙең тоторһоң (173).
*Ҡатының* тинтәк булһа, ҡамсың йыуан булһын (173).
*Ҡатының* үлһә — өйөң китер, башыңдан көйөң китер (173).
*Ҡатының* һәпрә булһа, өҫтөң шәпрә булыр (173).
*Ҡатының* һәпрә булһа, энәңде үҙең күҙләрһең (443).
*Ҡатының* яҡшы булһа, арғымаҡ менерһең,
*Ҡатының* яман булһа, һарғайып киберһең (173).
*Ҡатының* яҡшы булһа, ожмах кәрәкмәй (173).
*Ҡатының* яман булһа — ғазраилың шул (173).
*Ҡатыныңа* яһалдырыҡ һал, атыңа һағалдырыҡ һал (173).
*Ҡатыныңды* бик маҡтаһаң, никахың боҙоҡ булыр (173).
*Ҡатыныңды* ҡапыл бөкмә, ауырлығын арҡаңа йөкмә (173).
*Ҡатыныңды* хөрмәтлә, теҙгенен ҡулға көрмәклә (173).
Ҡашығаяҡ шылтыраған һайын *катын* айырмайҙар (173).
Ҡуштан *катын* ирғә яраған, ҡуштан егет түрәгә яраған (104).
Ҡуштан *катын* ире сыҡһа — кейенер, ире ҡайтһа — көйөнөр (174).
Ҡуштан *катын* матур була (174).
Ҡыҙ — бер төнлөк, *катын* — ғүмерлек (136).

Ҡыҙ сағында — ҡыҙыл ут, *-катын* булғас, ҡәҙере юҡ (192).
Ҡыҙ тип ҡыҙыҡма, бер көн *-катын* булыр (136).
Ҡыҙҙар кейенһә, көлгә оҡшай, *-ҡатындар* кейенһә, ҡыҙға оҡшай (250).
Ҡыҙҙарға — ҡанат, малайҙарға — аяҡ,
Хужаға — баш, *-ҡатынға* — түш.
Ҡунаҡҡа — ҡойроҡ майы (247).
Ҡыҫыр *-ҡатындан* бала таптырма (46).
Ҡыҫыр *ҡатындан* ҡытҡылдаған тауыҡ артыҡ (176).
Ҡәрендәштең байы яҡшы, *-ҡатындың* һауы яҡшы (176).
Майыңды ҡыштан сығарма, *-ҡатыныңды* бәҫтән сығарма (176).
Мал тапмаҫ ир булмаҫ, бала тапмаҫ *-катын* булмаҫ (176).
Матур *-катын* — ир күрке (176).
Матур *-ҡатын* — ир күрке, батыр еғет — ил күрке (295).
Мығырҙаҡ ирғә — мығырҙаҡ *-катын* (177).
Өйҙө өй иткән — *-катын* (177).
Өйҙә ике *-катын* булһа, иҙән һеперелмәҫ (178).
Өйрәк китһә — ҡаҙ ҡалыр, *катын* китһә — ҡыҙ ҡалыр (178).
Өс нәмә кешене ҡартайтыр: йөрөмһөҙ ат, үтмәҫ бысаҡ, яман *ҡатын* (178).
Селләлә тун кейғән *катын* үлгән (251).
Сүбәк баш ир булғаныңсы, сепрәк баш *катын* булғаның яҡшы (198).
Сығынсы ат тәртә һындыра, уңмаған *ҡатын* ҡашығаяҡ һындыра (179).
Таҙа *катын* тараҡан тотмаҫ (179).
Татыу булһа *катының,* ары торһон алтының (179).
Тимерсе бысаҡҡа, *ҡатындар* ҡосаҡҡа туймаҫ (180).
Тинтәк кеше *ҡатынын* маҡтар (371).
Тинтәк суҡмар йыйыр, тиле *ҡатын* йыйыр (180).
Туҡал *катын* төлкө булыр, уны алған көлкө булыр (180).
Тырнаҡ үҫтергән *катындан* йыраҡ ҡас (198).
Тәртә дулап ат булмаҫ, *катын* дулап ир булмаҫ (181).
Тәүғе *катын* — мал аҫрарға, һуңғы *ҡатын* — йән аҫрарға (181).
Уйнашсы *катын* күҙенән, инсафлы *ҡатын* һүҙенән билғеле (140).

Ул тапҡан — уңған *ҡатын,* ҡыҙ тапҡан — наҙлы *ҡатын* (181).

Уңған *ҡатын* ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатыр (182).

Уңған *ҡатын* ул табыр, изғе *ҡатын* ҡыҙ табыр (182).

Уңмаған ат тәртә һындыра, уңмаған *ҡатын* ирен туҙҙыра (182).

Уңмаған ат тәртә һындыра, уңмаған *ҡатын* ҡашығаяҡ һындыра (182).

Уңмаған *ҡатындың* балаһы тыңлауһыҙ булыр (182).

Урта тиле атын маҡтар, үтә тиле *ҡатынын* маҡтар (183).

Уҫал *ҡатынға* тарыма, тарыһаң арыма (183).

Уҫал *ҡатындан* аждаһа ҡурҡҡан (198).

Ут усаҡта яҡшы, *ҡатын* ҡосаҡта яҡшы (183).

Утҡа барған *ҡатындың* утыҙ ауыҙ һүҙе бар (198).

Үҙен маҡтаған — бер ахмаҡ, *ҡатынын* маҡтаған — мең ахмаҡ (183).

Үткер бысаҡ, һимеҙ ит — табын ҡәҙерен килтерер.
Яман *ҡатын,* ялҡау ат — әжәлдән элек үлтерер (184).

Халҡы яман хан аҙыр, *ҡатыны* яман ир аҙыр (184).
Халҡы ямандың бейе аҙыр, *ҡатыны* ямандың өйө аҙыр (184).

Халҡын алдаған бей уңмаҫ, *ҡатыны* ғәмһеҙ өй уңмаҫ (184).
Хәйерһеҙ *ҡатын* ир бөлдөрөр, хәйерһеҙ түрә ил бөлдөрөр (92).

Һаран *ҡатын* ҡунаҡ алдында балаһын ҡыйнар (281).

Һөйәркәне маҡта, *ҡатын* менән тор (184).

Һуңғы *ҡатын* — һум алтын (185).

Һыйыр алһаң, тояғына ҡара, *ҡатын* алһаң, ырыуына ҡара (142).
Һыйыр тулап — ат булмаҫ, *ҡатын* тулап — баш булмаҫ (185).

Һыуға барған *ҡатындың* алтмыш ауыҙ һүҙе бар (445).

Һәр башҡа — бер үлем, яман *ҡатын* алғанға — ике үлем (185).

Шапшаҡ *ҡатындың* ашын эсмә, һүҙен ишетмә (185).

Әкрен иргә *ҡатын* баш (186).

Юлға сыҡһаң — атың үлмәһен, өйгә ҡайтһаң — *ҡатының* үлмәһен (186).

Юлдашың яман булһа, йыраҡ йөрөн төн ҡатма.
*Ҡатының* яман булһа, кеше алдында һүҙ ҡатма (186).

Яҡшы ат, яҡшы *ҡатын* ирҙең данын сығарыр (187).

Яҡшы ир — ил күрке, яҡшы *ҡатын* — ир күрке (187).
Яҡшы ир менән *ҡатын* хур булмай (187).
Яҡшы *ҡатын* — донъя тотҡаһы (187).
Яҡшы *ҡатын* — йән аҙығы, яман *ҡатын* — баш ҡаҙығы (187).
Яҡшы *ҡатын* йән кеүек, яман *ҡатын* ен кеүек (187).
Яҡшы *ҡатын* йәшәртер, яман *ҡатын* ҡартайтыр (187).
Яҡшы *ҡатын* — өй йәме (187).
Яҡшы *ҡатын* — өй күрке, яҡшы кейем — туй күрке (252).
Яҡшы *ҡатын* өҫтөнән ир йөрөмәй,
Яҡшы ир өҫтөнән *ҡатын* йөрөмәй (143).
Яҡшы *ҡатын* юҡтан ҡорап туйҙырыр,
Яман *ҡатын* яңғыҙ атың һуйҙырыр (187).
Яҡшы *ҡатын* яман ирҙе ир итер,
Яман ир яҡшы *ҡатынды* ер итер (187).
Яҡшы *ҡатын* яман ирҙе моратына еткерер (187).
Яҡшы *ҡатын* — ярты ырыҫ (188).
Яҡшы *ҡатындың* ире кейеменән билгеле (188).
Яҡындан *ҡатын* алһаң, ҡолағың ҡаты булһын (143).
Ялған *ҡатын* бала танмаған (188).
Ялҡау *ҡатынға* бала һылтау (193).
Яман ат тай менән уйнар, яман *ҡатын* бай менән уйнар (188).
Яман ат эйәһен ҡартайтыр, яман *ҡатын* ирен ҡартайтыр (188).
Яман ат, яман *ҡатын* — ирҙе шулар ҡартайтыр.
Яман бала, яман ҡорал — ирҙе шулар һарғайтыр (188).
Яман атҡа менгәнсе, йәйәү йөрө талғансы,
Яман *ҡатын* алғансы, буйҙаҡ йөрө ҡанғансы (144).
Яман еғет туй боҙор, яман *ҡатын* өй боҙор (188).
Яман ир үҙе һайлап алған *ҡатынды* үҙе яманлар (188).
Яман ирҙе яҡшы *ҡатын* кеше итер (188).
Яман ирҙән яҡшы *ҡатын* алдараҡ (198).
Яман ирҙән яҡшы *ҡатын* артыҡ (188).
Яман *ҡатын* алһағыҙ, йыйынға инер ул тыумаҫ (188).
Яман *ҡатын* ирен кеше алдында хур итер (188).
Яман *ҡатын* иренән яңғыҙ атын һуйҙырыр (188).
Яман *ҡатын* түркенсәк (188).
Яман *ҡатын* түшәгенән билгеле (189).

Яман *ҡатын* үҙе лә көн күрмәҫ, иренә лә көн күрһәтмәҫ (189).
Яман *ҡатын* яман эт менән бер (189).
Яман *ҡатындан* буйҙагым яҡшы, яман ирҙән яйҙағым яҡшы (189).
Яман *ҡатындан* дейеү бәрейе лә ҡасҡан (189).
Яман *ҡатындың* бысағы үтмәҫ, теле үткер (189).
Яман *ҡатындың* ҡосағы — яҡшы *ҡатындың* бысағы (189).
Яман *ҡатындың* теле әсе, ябаға тайҙың тире әсе (189).
Яңғыҙ булыр егеткә биҙәү *ҡатын* тап булыр (189).
Яңғыҙ *ҡатын* — ярғанат (189).
Ярлы булһаң — туғаның яратмай,
Сирле булһаң — *ҡатының* яратмай (108).
Ярлы булыр егеткә ҡазалы мал тап булыр,
Яңғыҙ булыр егеткә ҡыҫыр *ҡатын* тап булыр (189).
Яулыҡ ябынғандың бары ла *ҡатын* түгел,
Бүрек кейгәндең бары ла батыр түгел (296).
Яуыз *ҡатындан* шайтан ҡасҡан (193).

**ҡатындыҡы**

Ҡапҡа төшһә — *ҡатындыҡы* (171).

**ҡатын-ҡыҙ**

Иләктә һыу тормаҫ, *ҡатын-ҡыҙ* ауыҙында һүҙ тормаҫ (195).
Ир өйҙән сыҡһа — бәрәкәт, *ҡатын-ҡыҙ* өйҙә торһа — бәрәкәт (165).
Ир-ат булһа, йорт-ерен маҡта,
*Ҡатын-ҡыҙ* булһа, аш-һыуын маҡта (234).
Ир-ат өйҙә ултырһа ла, күңеле тышта,
*Ҡатын-ҡыҙ* тышта йөрөһә лә, күңеле өйҙә (163).
Ирҙәргә эш булһын, *ҡатын-ҡыҙға* һүҙ булһын (197).
*Ҡатын-ҡыҙ* күп булған йортта һыу булмаҫ (172).
*Ҡатын-ҡыҙ* күрке — сәс тә ҡаш, ирҙәр күрке — мыйыҡ та һаҡал (272).
*Ҡатын-ҡыҙ* ҡырҡҡа етһә, ҡотора, ти (172).
*Ҡатын ҡыҙҙың* аҡылы ел өргәнсе ете төрлөгә әйләнә, ти (197).
*Ҡатын-ҡыҙҙың* ҡартаһы ҡырҡ (172).

*Ҡатын-ҡыҙҙың* сәсе оҙон, аҡылы ҡыҫҡа (197).
*Ҡатын-ҡыҙҙың* хәйләһенә шайтан да түҙә алмаҫ (197).
*Ҡатын-ҡыҙҙың* эше тауыҡ сүпләп бөткөһөҙ (172).
Өйҙөң йәме — *катын-кыҙ* (177).
Уғры менән юлдаш булма, *катын-кыҙ* менән серҙәш булма (198).
Һауаны йондоҙ, ирҙе һаҡал, *катын -кыҙҙы* сәс матурлай (282).
Әтәс ҡойроғо менән, ир мыйығы менән, *катын-кыҙ* сәсе менән матур (284).

**ҡатынлы**

Ике һыйырлының айраны бар, ике *катынлының* вайраны бар (162).

**ҡатынһыҙ**

Күп һайланһаң, *катынһыҙ* ҡалырһың (134).
*Ҡатынһыҙ* ир — йүгәнһеҙ ат (172).

**ҡоҙа**

Алыҫ ерғә *коҙа* булһаң, артыу-артыу аш килер.
Яҡын ерғә *коҙа* булһаң, артыу-артыу һүҙ килер (149).
Бай менән *коҙа* булһаң, наҙланып маҙаңды алыр,
Ярлы менән ҡоҙа булһаң, теләнеп маҙаңды алыр (96).
Дуҫтың иҫкеһе яҡшы, *коҙаның* яңыһы яҡшы (160).
Ике бай *коҙа* булһа, араларында юрға йөрөр (102).
Ҡамыр бешереү — *коҙа* төшөрөү (236).
Ҡапҡа ауыҙына *коҙа* килһә — ҡабам менән орсоғом (436).
Ҡапҡа ауыҙына *коҙа* килһә, ҡабам менән орсоғом;
Кейәүем менән ҡыҙым килһә, һабам менән турһығым (191).
*Ҡоҙа* ашы мул булһа, ҡоҙағый йомартлана (247).
*Ҡоҙа* булғансы нык һораш, *коҙа* булғас, нык һыйлаш (135).
*Ҡоҙа* менән ҡоҙаса уйнаһа, һыйыр уңа (173).
*Ҡоҙаға* ҡуян һурпаһы, *коҙаһының коҙаһына* — һурпаһының һурпаһы (173).
*Ҡоҙаның коҙаһы* — ҡонан ҡуйҙың һурпаһы (173).

Ҡырҡ өйҙә *коҙа* булһа, ҡырғын килмәҫ (176).
Эт менән *коҙа* булһаң, һөйәк менән туй итерһең;
Яман менән өйҙәш булһаң, яу менән көн итерһең (314).
Эт менән *коҙа* булһаң, һөйәк менән туй үткәрерһең (186).
Эттең бажаһы күп, *коҙаһы* юҡ (186).
Юҡ менән *коҙа* булғансы, бар менән барымталы бул (186).
Ябағаны яуға менмә, ялы бар, тип,
Яман менән *коҙа* булма, малы бар, тип (187).
Яңы *коҙа* барҙа иҫке *коҙа* ишек төбөндә ултырыр (193).
Яңы *коҙа* килгәс, иҫке *коҙа* ятып илаған (193).
Ярлы менән *коҙа* булғансы, бей менән барымталы бул (109).

**коҙағый**

Ҡоҙа ашы мул булһа, *коҙағый* йомартлана (247).
*Ҡоҙағый* килде — ҡот килде (173).
Ҡулында бар — *коҙағый,* ҡулында юҡ — ҡомағый (174).
Өс көн торғас, иҫемә төштө, иҫәнме әле, *коҙағый?* (360).
Эт менән эт булғансы, бесәй менән *коҙағый* бул (314).

ҡоҙа-ҡоҙағый

*Ҡоҙа-коҙағый* аш ашар, арала йөрөгән ни ашар? (173).

ҡоҙалыҡ

Ағай-эненең ҡыҙығы — алыш-биреш,
*Ҡоҙалыктың* ҡыҙығы — барып килеш (147).

ҡоҙаса

*Ҡоҙа* менән *коҙаса* уйнаһа, һыйыр уңа (173).
*Ҡоҙаса* күңел аса (173).
*Ҡоҙасаң* биргәнде ҡуйыныңа ал, *коҙасаң* әйткәнде күңелеңә
һал (173).

ҡыҙ

Алама булһа ла, ир яҡшы, һуҡыр булһа ла, *кыҙ* яҡшы (126).
«Алла» тиһәң, мулла *кыҙын* бирә,
«Бисмилла» тиһәң, бисәһен дә ҡушып бирә (112).

Алыҫтан ат алма, яҡындан *ҡыҙ* алма (126).
Ат аҙғыны тайға эйәрә, ир аҙғыны *ҡыҙға* эйәрә (127).
Ат алһаң — ауылың менән, *ҡыҙ* алһаң — ырыуың менән кәңәшләш (127).
Ат матуры — арҡанда, *ҡыҙ* матуры — тарханда (127).
Ат менән *ҡыҙҙы* ауылдан алма (127).
Ат тоҙ тип ҡартайыр, егет *ҡыҙ* тип ҡартайыр (194).
Ат тоҙға килә, кейәү *ҡыҙға* килә (150).
Ат урлаған бур булыр, *ҡыҙ* урлаған дуҫ булыр (439).
Ат урлаған бур булыр, *ҡыҙ* урлаған хур булыр (127).
Ат эҙләгән яуға юлығыр, *ҡыҙ* эҙләгән туйға юлығыр (127).
Ата байлығы улға йоҡмаҫ, әсә байлығы *ҡыҙға* йоҡмаҫ (151).
Ата-инәһен һөймәгән *ҡыҙ* яман,
Ҡан-ҡәрҙәшен һөймәгән ул яман (151).
Ата малы менән ул тормаҫ, инә малы менән *ҡыҙ* тормаҫ (208).
Ата улды белмәй, инә *ҡыҙҙы* белмәй (151).
Атанан тыумай ул булмаҫ, әсәнән тыумай *ҡыҙ* булмаҫ (153).
Атаны күреп ул үҫер, инәне күреп *ҡыҙ* үҫер (152).
Атаһы күрер — улы һөйләр, әсәһе күрер — *ҡыҙы* һөйләр (153).
Атаһы тороп, улы һөйләгәндән биҙ.
Инәһе тороп, *ҡыҙы* һөйләгәндән биҙ (153).
Атаһы һуҡҡан *ҡыҙ* бала бәхетһеҙ була, ти (153).
Атаһыҙ ул аҫрама, инәһеҙ *ҡыҙ* аҫрама (153).
Атаһыҙға ат бирмә, инәһеҙгә *ҡыҙ* бирмә (153).
Атаһыҙҙы ул итмә, инәһеҙҙе *ҡыҙ* итмә (150, 153).
Атаһын күр ҙә — улын ҡос, әсәһен күр ҙә — *ҡыҙын* ҡос (127).
Атаһын күр ҙә — улына *ҡыҙ* бир (127).
Атаһына оҡшап ул тыумаҫ, инәһенә оҡшап *ҡыҙ* тыумаҫ (153).
Аусы ау аулай, яусы *ҡыҙ* яулай (127).
Ауыҙы ҡыйыҡ булһа ла, байҙың *ҡыҙы* ир һайлар (127).
Ауылдан *ҡыҙ* алма ла мал алма (127).
Ауыртҡан ерҙән ҡул китмәҫ, уңған *ҡыҙҙан* күҙ китмәҫ (127).
Ахыры заман килһә, атаһы тороп — улы һөйләр, инәһе тороп — *ҡыҙы* һөйләр (341).
Ашҡаҙар менән Ағиҙел
Йөрәктауҙа табышҡан;
Яҡшы егет, яҡшы *ҡыҙ*

Шулай килеп табышҡан.
Яр иткәнде пар иткән,
Айырылтмаҫҡа ҡауышҡан (144).

Аштың йәме тоҙ менән, өйҙөң йәме *ҡыҙ* менән (154).

Ашыҡҡан *ҡыҙ* ирһеҙ ҡалыр (128).

Ашыҡҡан *ҡыҙ* кейәүгә барһа ла мандымаҫ (128).

Бай кешенең *ҡыҙын* алһаң, атаһы менән маҡтаныр.
Ярлы кеше *ҡыҙын* алһаң, өҫтәл аҫтын аҡтарыр (128).

Бай килене булгансы, ярлы *ҡыҙы* булһамсы (111).

Байҙың килене булғансы, ярлының *ҡыҙы* бул (98).

Байҙың *ҡыҙы* урынлы (98).

Байҙың *ҡыҙы* — яҙгы тай, ярлы *ҡыҙы* — йомарлаган май (98).

Бал һаҫымаҫ, *ҡыҙ* ҡартаймаҫ (154).

Башһыҙ өйҙә ата тороп, ул һөйләр, инә тороп, *ҡыҙ* һөйләр (157).

Белемле *ҡыҙ* — бирнәле *ҡыҙ* (128).

Бер *ҡыҙ* кейәүгә сыҡһа, ҡырҡ *ҡыҙ* төш күрә (129).

Бер яҡшы *ҡыҙ* ете улга тора (158).

Берәү улдан күрә, берәү *ҡыҙҙан* (158).

Бирмәҫ *ҡыҙҙың* мәһәре ҙур булыр (129).

Бохар даны менән буҙ үтер, ата даны менән *ҡыҙ* үтер (158).

Булмаҫтайҙан булмаҫ:
Ул да тыумаҫ, *ҡыҙ* ҙа тыумаҫ,
Тыуһа ла тормаҫ (39).

Бурлыҡ ир балала сыбыртҡынан, *ҡыҙ* балала энәнән башлана (325).

Буянган *ҡыҙҙан* оялған *ҡыҙ* матур (249).

Дәүләт килер булһа, ғашиҡ булган *ҡыҙ* кеүек,
Китер булһа, ҡулга тотҡан боҙ кеүек (210).

Егет булһа, батыр булһын, *ҡыҙ* булһа, матур булһын (130).

Егет егәр, *ҡыҙ* сибәр булһын (130).

Егет — ил күрке, *ҡыҙ* — өй күрке (160).

Егет инем — солтан инем,
*Ҡыҙ* йәрәштем — хан булдым.
Ҡатын алдым — хур булдым (144).

Егет — йорттоң терәге, *ҡыҙҙар* — йорттоң биҙәге (160).

Егет күңеле йүләрҙә, *ҡыҙ* күңеле көләрҙә (130).

Егет, *ҡыҙ* алғас, тәүфиҡ таба (130).
Егет ҡыйыу, *ҡыҙ* һылыу булған яҡшы (130).
Егет һөйһә -- ала, *ҡыҙ* һөйһә — ҡала (130).
Егетлегеңде белгең килһә, *ҡыҙға* яусы ебәр (130).
Егеттең бер йорто — *ҡыҙ* тирмәһе, бер йорто — яу эсе (195).
Ер дауы менән *ҡыҙ* дауы бөтмәй (130).
Еренә күрә еләге, *ҡыҙына* күрә кейәүе (161).
Еренә күрә ҡоланы, һыуына күрә йыланы.
*Ҡыҙына* күрә кейәүе, өйөнә күрә иләге (161).
Ете атаға еткәс, *ҡыҙ* бауыры алышыр (130).
Ете ул өйләндергән — бай булған, ете *ҡыҙ* биргән — бөлгән (161).
Етем *ҡыҙға* — еҙ төймә (161).
Етен башын ел киҫә, егет бәғерен *ҡыҙ* киҫә (131).
Еткән *ҡыҙ* кейәүҙән ҡурҡмаҫ (131).
Еткән *ҡыҙ* — киткән *ҡыҙ* (162).
Еткән *ҡыҙҙы* мыйығың менән ҡурҡыта алмаҫһың (131).
Иҙел даны менән боҙ китә, ата даны менән *ҡыҙ* китә (162).
Икмәк тәмле тоҙ менән, йоҡо рәхәт *ҡыҙ* менән (131).
Икмәк тәмле тоҙ менән, өйҙөң йәме *ҡыҙ* менән (163).
Ил маҡтаған егеткә *ҡыҙ* бармай (131).
Инәһе ниндәй — *ҡыҙы* шундай (131).
Инәһен күреп *ҡыҙын* ал, иңен күрен бүҙен ал (131).
Ипһеҙ *ҡыҙ* үҙенә ир тапмаҫ (131).
Ир аҫылы — һиммәтле, *ҡыҙ* аҫылы — ҡиммәтле (196).
Ир бала — ата-инәгә таяу, *ҡыҙ* бала — өйгә яҡҡан буяу (164).
Ир бала — йортҡа терәк, *ҡыҙ* бала — йорт эсендә биҙәк (164).
Ир балаға ат кәрәк, *ҡыҙ* балаға — ҡанат (164).
Ир даны менән мал үтә, ата даны менән *ҡыҙ* үтә (164).
Ир икмәге ирекле, *ҡыҙҙар* һөйә егетте (131).
Иргә — баш.
Ир балаға — аяҡ.
*Ҡыҙ* балаға — ҡанат,
Ҡатынға — ҡойроҡ (246).
Ир-егет мал даулаһа, матур *ҡыҙ* йәр һайлай (131).
Ишеге ямандың өйөнә барма, әсәһе ямандың *ҡыҙын* алма (132).

Йәмһеҙ булһа ла — бай *кыҙы* матур, ярлы *кыҙы* матур булһа ла — йәмһеҙ (102).
Йәмһеҙ *кыҙҙы* ҡосаҡлагансы, йәмле *кыҙҙың* янында тор (133).
Йәш *кыҙ* алыу йәшәртә (133).
Кейәүгә бирәһе *кыҙ* түгел, ашҡа һалаһы тоҙ түгел (308).
Кейәү ул булмаҫ, килен *кыҙ* булмаҫ (168).
Килбәтле *кыҙ* килен булгас күренер (133).
Килен алһаң, үҙеңдән югарынан ал.
*Кыҙ* бирһәң, үҙеңдән түбәнгә бир (169).
Килен — киленсәк, *кыҙ* — ҡырҡынсаҡ (169).
Килен саҡтың рәхәте — *кыҙ* саҡтың михнәте (169).
Китер *кыҙҙың* эше күп (170).
Киткән *кыҙ* ипле була (170).
Киткән *кыҙ* — киҫкән икмәк (170).
Көҙгө ҡатыҡ, көмөш ҡашыҡ кейәүем менән *кыҙыма;*
Яҙгы ҡатыҡ, ярыҡ ҡашыҡ киленем менән улыма (191).
Көндәш күргәндең *кыҙын* алма (133).
Күлдең йәме ҡаҙ менән, туйҙың йәме *кыҙ* менән (134).
Кәзә «тоҙ» тип, ирҙәр *«кыҙ»* тип ҡартайыр (134).
Ҡайта сапҡан буҙ яман, ҡайтып килгән *кыҙ* яман (171).
Ҡайта яуған ҡар яман, ҡайта килгән *кыҙ* яман (171).
Ҡайын йәме — туҙ менән, өйҙөң йәме — *кыҙ* менән (171).
Ҡалаҡ тотһа, хан *кыҙының* ҡулы ҡабара (103).
Ҡанҡа ауыҙына ҡоҙа килһә, ҡабам менән орсогом;
Кейәүем менән *кыҙым* килһә, һабам менән турһығым (191).
Ҡар башына ҡар етер, *кыҙ* башына *кыҙ* етер (135).
Ҡарт *кыҙ* ир һайламаҫ, үлгән кеше ер һайламаҫ (135).
Ҡасҡан *кыҙҙы* ҡарагы килә, япҡан ашты ашагы килә (404).
Ҡатын алмаҡ — *кыҙ* алмаҡ (135).
Ҡатын артынан мал килә, *кыҙ* артынан дан килә (135).
Ҡомга һипкән беленмәҫ, *кыҙга* биргән — күренмәҫ (135).
Ҡош аягынан, *кыҙ* ирененән эләгер (135).
Ҡош моронһоҙ булмаҫ, *кыҙ* урынһыҙ булмаҫ (135).
Ҡумыҙҙағы ҡыл моңло, етем үҫкән *кыҙ* моңло (174).
Ҡупың яман булһа ла, эсендә ашы булһын.
*Ҡыҙың* яман булһа ла, башында аҡылы булһын (135).

*Ҡыҙ* аҡсаһы — йөҙ аҡсаһы (135).
*Ҡыҙ* аҡсаһы — тоҙ аҡсаһы (135).
*Ҡыҙ* аҡылы һуң төшөр, һуң төшһә лә, мул төшөр (135).
*Ҡыҙ* ауыҙында ҡыҙыл тел (136).
*Ҡыҙ* байлығы — күркәм холоҡ, ир байлығы — тәүәккәл (136).
*Ҡыҙ* бала — ҡаңғыла яткан уҡ (174).
*Ҡыҙ* бала — ҡунаҡ ҡына (174).
*Ҡыҙ* бала миһырбанлы булыр (174).
*Ҡыҙ* бала — өй зиннәте (174).
*Ҡыҙ* бала төшкән ерендә таш булып батһын (136).
*Ҡыҙ* баланы, еткәс, тапшырған яҡшы (136).
*Ҡыҙ* баланы ҡыҙыл эт ҡойроғона бәйләһәң дә китер (136).
*Ҡыҙ* баланың аты эйәрле, башы бәйле (174).
*Ҡыҙ* баланың дәрте күкрәктә, ир баланың дәрте йөрәктә (136).
*Ҡыҙ* баланың сибәр булыуы яҡшы (174).
*Ҡыҙ* — бер төнлөк, ҡатын — ғүмерлек (136).
*Ҡыҙ* биргән боҫоп ятыр, килен алған — губернатор (136).
*Ҡыҙ* биргән ергә ебәктән дә йомшаҡ бул,
Килен алған ергә дегәнәктән дә ҡаты бул (136).
*Ҡыҙ* булһа, ҡыҙ булһын, йондоҙга тиң булһын (174).
*Ҡыҙ* димләүе — бер алтын (136).
*Ҡыҙ* ҙа булһын, быуаҙ ҙа булһын (418).
*Ҡыҙ* егеткә ҡушыла — ебәк булып ишелә (136).
*Ҡыҙ* кемгә бармаҫ ине, егет кемде алмаҫ ине, ҡалым малы булмаһа (136).
*Ҡыҙ* кеше — күрше тауығы (174).
*Ҡыҙ* китте, ҡот китте (145).
*Ҡыҙ* китте — ҡый китте (145).
*Ҡыҙ* күҙләгәндә тон ҡараңгы булһын (136).
*Ҡыҙ* күңелендә — балалы бишек, ир күңелендә — эйәрле ат (136).
*Ҡыҙ* күрмәй — бил сиселмәй, һыу күрмәй — итек сиселмәй (136).
*Ҡыҙ* ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә,
Ул уллы булмаҫ, ата ҡәҙерен белмәһә (175).
*Ҡыҙ* ҡыҙыл алтындан ҡиммәт (175).
*Ҡыҙ* ҡылыгы менән, ир эше менән һөйҙөрөр (175).
*Ҡыҙ* ҡылығы менән һөйкөмлө, ул әҙәбе менән һөйкөмлө (175).

*Ҡыҙ* ҡыяһындағын ҡуймаҫ (175).
*Ҡыҙ* оҙатҡан яланғас ҡалыр, килен алған түренә урын һалыр (136).
*Ҡыҙ* сағым — солтан саҡ, килен сағым — олтан саҡ (175).
*Ҡыҙ* сағында — ҡыҙыл ут, ҡатын булғас, ҡәҙере юҡ (192).
*Ҡыҙ* сәнскәге — беҙ сәнскәге (175).
*Ҡыҙ* тапһаң — ҡыҫылып ят, ул тапһаң — иркенләп ят (175).
*Ҡыҙ* тип ҡыҙыҡма, бер көн ҡатын булыр (136).
*Ҡыҙ* тип ҡыҙыҡма: ҡәйнә *кыҙҙан* ярала (136).
*Ҡыҙ* тыйнаҡ булһа, егет йыйнаҡ була (136).
*Ҡыҙ* үпкәсел булһа, ҡалым малы күп була (136).
*Ҡыҙ* үҫһә — өйҙә ҡытлыҡ, ул үҫһә — өйгә ҡотлоҡ (175).
*Ҡыҙ* һайлаһаң, күҙеңдән бигерәк ҡолағыңа ышан (136).
*Ҡыҙ* һаҡлағансы, тоҙ һаҡла (175).
*Ҡыҙ* яҡшы ергә төшһә — ялпая, яман ерғә төшһә — ҡартая (136).
*Ҡыҙ* яҡшыһы ҡылыҡтан билгеле (136).
*Ҡыҙға* ҡырҡ өйҙән тыйыу (175).
*Ҡыҙҙар* «алдайым» тип алданыр (136).
*Ҡыҙҙар* бүрәнә ярығынан да көлә, ти (197).
*Ҡыҙҙар* исеме ҡылдан нескә (136).
*Ҡыҙҙар* кейенгәнсе, ҡыҫыр һыйыр быҙаулар (250).
*Ҡыҙҙар* кейенһә, көлгә оҡшай,
Ҡатындар кейепһә, *кыҙға* оҡшай (250).
*Ҡыҙҙар* күңеле — ҡырҡ ҡарта (137).
*Ҡыҙҙар* — ҡыҙыл суҡ (175).
*Ҡыҙҙар*— ҡыйғыр тамаҡ (175).
*Ҡыҙҙар кыл* өҫтөндә, ҡылдан төшкәс, тел өҫтөндә (175).
*Ҡыҙҙар* урамда ятҡап ат тиҙәгенән дә көлә, ти (445).
*Ҡыҙҙарға* ҡанат, малайҙарға аяҡ бирһен (175).
*Ҡыҙҙарға* — ҡанат, малайҙарға — аяҡ.
Хужаға — баш, ҡатынға — түш,
Ҡунаҡҡа — ҡойроҡ майы (247).
*Ҡыҙҙы* биреүеңә ҡыуанма, тороуына ҡыуан (137).
*Ҡыҙҙы* бәхетле иткән — ир (137).
*Ҡыҙҙы* өйрәтеү — изге эш, улды өйрәтеү — иң ҙур эш (175).
*Ҡыҙҙы* әсәһе һаҡлаһын, улды — атаһы (175).
*Ҡыҙҙың* инәһе — ҡырҡ, ҡырҡ беренсеһе — сыбыҡ (175).

*Ҡыҙҙың* йәне ҡырҡ, ҡырҡ беренсеһе — сыбыҡ (137).
*Ҡыҙҙың* кемлеге кемәйенән билгеле (137).
*Ҡыҙҙың* күҙе ҡыҙылда (137, 250).
*Ҡыҙҙың* күңеле ҡыл кеүек, көйләмәһәң — тиҙ китер (175).
*Ҡыҙҙың* ҡыҙыуы — ҡуҙҙың ҡыҙыуы (137).
*Ҡыҙҙың* ҡылығы ҡырҡ булыр (175).
*Ҡыҙҙың* тамағы ҡылдай (443).
Ҡыҙлы *ҡыҙҙан* көлмәһен (175).
Ҡыҙлы -*ҡыҙын* ҡыҫтырғанда, ҡыҙпыҙ киҫәү ҡыҫтыра (360).
Ҡыҙлы *ҡыҙын* һөйләгәндә, ҡыҙпыҙ ҡыҙлының наҙын һөйләр (348).
*Ҡыҙы* бар кешегә ҡырҡ яусы килер (137).
*Ҡыҙы* булған тиҙ ҡартайыр (176).
*Ҡыҙы* миңә яраһа, әсәһен бүре алһын (145).
Ҡыҙыл телемде тыйманым — *ҡыҙым* өйөнә һыйманым (192).
Ҡыҙыл төлкө — ер күрке,
Матур егет — ил күрке,
Матур *ҡыҙҙар* — өй күрке (176).
Ҡыҙым — -*ҡыҙ* кеше, килер йөҙ кеше, алыр бер кеше (192).
Ҡыҙым *ҡыҙлы* булмай белмәҫ, улым уллы булмай белмәҫ (176).
*Ҡыҙым* ҡылығы менән һөйҙөрөр (137).
*Ҡыҙым* өйҙә, ҡылығы илдә (192).
*Ҡыҙың* буйға етһә, *ҡыҙы* яҡшы менән күрше бул (176).
*Ҡыҙың* булһа — ирҙә булһын, ирҙә булмаһа — гүрҙә булһын (137) .
*Ҡыҙыңа* тиң кейәү килһә, ҡалым алма, тиғен бир (137).
*Ҡыҙыңдың* төҫөн маҡтама, эшен маҡта (176).
Ҡымыҙға бешкәк, *ҡыҙға* — тыйнаҡ (176).
Ҡымыҙҙы кем яратмай, *ҡыҙҙы* кем һоратмай (137).
Ҡырҡта булһа ла *ҡыҙ* булһын (137).
Мал алһаң барлынан (ал), *ҡыҙ* алһаң — ярлынан (ал) (137).
Матур *ҡыҙҙа* хәйлә күп (137).
Менгән атың аҡбуҙ булһын, һөйгән йәрең йәш *ҡыҙ* булһын (138) .
Менмәһәң дә ат яҡшы, ҡосмаһаң да *ҡыҙ* яҡшы (138).
Нағышлы *ҡыҙ* — яғышлы *ҡыҙ* (177).

Оро ак булhа лың я арышкак бул а *ы ъ* h — *к ӡ ң* яу
(177).
О н *ыӡ* hөйкө лө булыр (138).
0 яты ю т ин ям , кылыг 1 ю *сыӡ* яман (177).
Өй ж ки ә- h — *каӡ* калы>, кат ын китhә — *псъ ӡ* алыр 8 (17 ).
Та гына аран , ашын эс, әсә е ә карап *КЪӠЫҺ* кос(1 39)
Тауӡың күрке таш, *кыӡӡың* күр» е каш (139).
Таушалған *кыӡӡа* төҫ будмаҫ (139).
Т е -*кы* т й иткән јe , ү түрг мене ул ырган (3 9).
Түрә кы *ъ* ркен к, ы і *къ* —бары *ӡы* са к(ТО ).
Тыйнакhкӡ ҫкән *къ ӡӡа* б кәт ют 8 (1 1).
У ар ерӡ ңыш бар *ӡ* бар ерӡә ныш бар 8 ку. (1 1).
У сәӡере и ы б гас белер ул heң,
*Кыӡ* к ӡ н кыӡ ың кызлы б. лгас белерhеңң (18 ).
1 л танкан - - ; ң і ан ка ын *ъ ӡ* т ан ан — н ӡлы ка ь н(8 1) .
У л тыу! а - у бә сә *къ ӡ* гь у ' на — а б бәйлә (8 1).
У л үҫ р ән - губернатор *кыӡ* үҫте гән боҫон яты р (444).
У л— ө өнө с, *кыӡ* — кыуан,С (181).
У л әсә hе - гу берна ор *ыӡ* әсә е өндәшмәй ятыр (18 1).
У л ған *ыӡ* уры н лы рын ере көроу ы (141).
У л ган *ыӡ* рынын габыр ашыккан *ыӡ* ирhеӡ калыр
(1 ’■ 1 )•
Улы барӡың урыны ба , *псыӡы* барӡ кәӡере бар 82 (1 ).
Улың булhа , оло кло и нән күрше б л,
*Кыӡың* булhа, кылыклы менән күрше б\ л (182).
Улы , е ә , *кыӡы* якшы менән дуҫ бул,
*К ь е ә, у:* ы якшь менән і дуҫ бул '7 2 ).
Улын е е іhа, килене' б л ір ң шул у ,
*Кыӡың* емде ө hә, кейә ең ш б лыр 182).
Уңған катын ул тнбыр, паҕе катын *Кыӡ* та 'ыр (182).
У рау б л а ла юл якшы h кыр булhа ла *кыӡ* якш ы (141).
Урланған *кыӡ* — чурлаша н *кыӡ* (141).
У рман а ыӡы тар булыр *ъ ӡӡ* а ӡы бал булыр (141).
У т усакта якшы, *к* ы косакта як н(Ш).
Үӡ *къ ы ма* — үӡәк, үгәй *кыӡ а* — с ү ж (19 ].
Үӡемдең килене ям ман, *къӡымдъ* кәйнә е яман (193 ).
Үӡеңдән бәң ерӡән *кыӡ* ал, юғар ыға кыӡ бирмә (141) .
Хан *кыӡы* ханыш, бармактары камыш 06 (1 ).

Хан *к азь, н а* ла ха а була (J 3 ). 1
Хан *к 4ҙы ның* ку.ᵣ ы ҡумыҙ тотканда абарған 38 (4 ).
Х н *кыҙының* ҡуль энә тотон абарған 38 (4 ).
Хәстәрл *кь ҙ* аç арль 184). (
Һ лманг ы алм һалкын һыуға төшөп к тер төбөнә
*Ҡыҙыңды* бирмә яҡын ауылға илап килер үҙеңә (141).
Һауаға т лрап ө ө ç ят , әсә енә карап *кыҙын* аҡ <184 ).
һәнәрле >улып ул үç1 ен, кылы лы б ып *к> ҙ* ^çh н (18 ). 4
һ әр кемдә *{ҙ* т ай ыһы ҡар ? *кыҙҙа* ир ҡайғыһы 142 ( ).
Эт өрөп, егет йөрөн *і ь ҙ* кө өн артая 396 ( ).
Әсәһ *кыҙъ'* ка) ғ һын а, т *ы ҙы* үҙ к ғыһында (193)
Әсәһе т фәк сә е ю, л *,іҙь* ботакка нә 186ı. ме (
Әсәһе юрға бул а *кыҙ* йөрөшлө бул ( 1 1 6 а 3 ).
Ябаганы я ғам нмә, яманға *ыҙь ң* бирмә 18 Г). (
Яҙ т ышынан билгеле *ъ ы* ҡә ендәшенән '1 3). 4
Я ҙ ғ ы боҙ о ар шай, ' ь ,? ың башьн *ыҙ* ша (18 ). й 7
Я ҡшы а ҡ ҡ I ,v сы кәэ кмә , уғ ған *ь а* яусы кәрәкмә й
(1 3 ).
Я ҡшы ат ы рлайҙар, я к шы *кыҙҙы* ҙурлайҙар (1 3 4 ).
Я шы *кы* иртә тор а һ , толом үрер,
Н сар *кыҙ* то х: р-торм аç телем т елер (143).
Яҡынға *к* фбирһәғ — то оҡ ә әр килер
Ҡырға ыҙ бирһәң оҡ-тоҡ к стәнәс килер [Ь 3 ( 4 ).
Яман 7 ыҙ *и н* яу китер (1 4).
Я ғырҙа т һа шма, бш амдатсыҙһа ла а (144). м
Күр енең тауь лл ҡаҙ аі ҡатыны тсы *ҙа* (201). а
Орсоҡ хәтле б ы бар вıкәнтсы *ҙа* уйы ар 15). б (1

ҡыҙҙай

Күрш ш ң а ыгы та дп ҡатынь ш ( 2 0 1 ). *ыҙҙ*
Орсоҡ хәтле буйы б р , еткән *ыҙҙ* ай уйы бар (15 ).

ҡыҙлы

Т атыны лгән *ы ы* а ылға каран ила u 1 3 ( 4 ).
'1 а ы ы гдг н — *кыҙлы* ор ҡа кар п илаған (1 73 ).
Т ь 7сьң 7ы булма ә ә ҡәҙерен белмә ә,
^ л ул ы ул ма а а әҙерен белмә ә ( 5 h 17 ).

*Ҡыҙлы* йорт — нурлы йорт (175).
*Ҡыҙлы* йорт — фәрештәле йорт (175).
*Ҡыҙлы* кеше — наҙлы кеше,
Уллы кеше — юллы кеше (175).
*Ҡыҙлы* кешенең ҡапҡаһына ҡырҡ ат бәйләнер (175).
*Ҡыҙлы* ҡыҙҙан көлмәһен (175).
*Ҡыҙлы* ҡыҙын ҡыҫтырғанда, ҡыҙһыҙ киҫәү ҡыҫтыра (360).
*Ҡыҙлы* ҡыҙын һөйләгәндә, ҡыҙһыҙ ҡыҙлының наҙын һөйләр (348).
*Ҡыҙлы* өйгә ҡырҡ ат бәйләнер (137).
*Ҡыҙлы* өйгә ҡырҡ өйҙән рәхмәт яуыр (175).
*Ҡыҙлы* өйҙә — ҡырҡ ҡунаҡ (137).
*Ҡыҙлы* өйҙә ҡәҙер бар (175).
*Ҡыҙлы* өйҙөң эте ятмай (175).
Ҡыҙым *ҡыҙлы* булмай белмәҫ,
Улым уллы булмай белмәҫ (176).
Ул ҡәҙерен улың уллы булғас белерһең.
Ҡыҙ ҡәҙерен ҡыҙың *ҡыҙлы* булғас белерһең (181).
Уллы кеше — урта бай, *ҡыҙлы* кеше — ҡыҙыл бай (181).
Уллы ла ҡурҡа, *ҡыҙлы* ла ҡурҡа (181).

**ҡыҙһыҙ**

Ҡыҙлы ҡыҙын ҡыҫтырғанда, *ҡыҙһыҙ* киҫәү ҡыҫтыра (360).
Ҡыҙлы ҡыҙын һөйләгәндә, *ҡыҙһыҙ* ҡыҙлының наҙын һөйләр (348).

ҡәйенһеңле

Шым ултырған *ҡәйенһеңле* талашҡан ҡәйнәнән яман (185).

ҡәйнеш

Еңгәнең ярты яғы — *ҡәйнештеке* (160).
*Ҡәйнеш* — ярты ир, ир юғында бөтөн ир (176).

**ҡәйнә**

Алама *ҡәйнәгә* сәсең менән ер һеперһәң дә ярамаҫһың (148).
Иләнмәгән, һуҡмаған, *ҡәйнәм,* һиңә бер ыштан (360).
Йыуаш *ҡәйнәнән* дә «ыш» тигән һүҙ сыға (168).

Килен алама, *ҡәйнә* насар (191).
Килен булһаң — *ҡәйнәгә* ярамаçһың.
*Ҡәйнә* булһаң — киленгә ярамаçһың (169).
Килен кеше — ким кеше, көнләксегә тиң кеше,
*Ҡәйнә* кеше — уллы кеше, губернаторға тиң кеше (169).
Килен *ҡәйнә* тупрағынан яралыр (169).
Килен *ҡәйнә* тупһаһынан, кейәү ҡайны тунһаһынан яралыр (169).
Килен *ҡәйнә* усағынан ярала (443).
Килен *ҡәйнә* әҙенән китер (169).
Килен *ҡәйнәгә* оҡшар (169).
Ҡабыҡ арба күп шағырлай, ҡарт *ҡәйнә* күп мығырлай (171).
Ҡайғы юҡта ҡайғы булды *ҡәйнәмдең* ҡара ҡайғыһы (191).
Ҡайғыһы булмаған *ҡәйнәһе* өсөн ҡайғырған (170).
Ҡыҙ тип ҡыҙыҡма: *ҡәйнә* ҡыҙҙан ярала (136).
*Ҡәйнә* ҡулына килдем — ҡайғы түренә мендем (192).
*Ҡәйнәмә* баш һалдым — башыма таш алдым (192).
*Ҡәйнәмә* килдем — михнәт күрҙем,
Ҡайма булдым — михнәт бирҙем (192).
*Ҡәйнәһенә* күрә килене (176).
*Ҡәйнәһенән* оялған килен бала тапмаç (176).
Үҙ елкәмде белмәйем, *ҡәйнәмдеке* ҡап-ҡара (192).
Үҙемдең киленем яман, ҡыҙымдың *ҡәйнәһе* яман (192).
Шым ултырған ҡәйенһеңле талашҡан *ҡәйнәнән* яман (185).
Ялҡау *ҡәйнәгә* — һәпрә килен (188).
Яман тсай*нә* йомортканан йөй табыр (189).

ҡәрҙәш

Баш *ҡәрҙәш* булһа ла, мал *ҡәрҙәш* түғел (157).
Дуç — иш менән, *ҡәрҙәш* — ырыу менән (160).
Ете ауылда ете *ҡәрҙәшең* булһын (161).
Ҡан *ҡәрҙәште* мал *ҡәрҙәше* айырған (103).

ҡәрендәш

Ауырыу — аштан, дау — *ҡәрендәштән* (154).
Ауырыу — аштан,
Дау — *ҡәрендәштән.*

Таҙ — таныштан,
Ҡутыр — ҡамыштан (385).
Ашап-эскәндә дуҫ яҡшы, ҡанлы көндә *'кәрендәш* яҡшы (154).
Йән *кәрендәште* мал *кәрендәш* айырған (168).
Ҡанлы көндә *кәрендәш* яҡшы, ашап-эскәндә дуҫ яҡшы (171).
Ҡатын *кәрендәше* ҡаҙан янында, ир *кәрендәше* ишек төбөндә (172).
Ҡәҙер белмәҫ *кәрендәштән* ҡәҙер белгән эт артыҡ (443).
Ҡәҙер белмәҫ *кәрендәштән* ҡәҙер белгән ят яҡшы (176).
*Кәрендәшең* үлһә лә, ҡәҙерләүсең үлмәһен (176).
*Кәрендәштең* байы яҡшы, ҡатындың һауы яҡшы (176).
Тауҙа булыр тарғыл таш, тарыҡһаң, сыға күҙҙән йәш;
Тар ҡултыҡтан уҡ тейһә, тартып алыр *кәрендәш.*
*Ҡәрендәшең* юҡ булһа, далала ҡалыр яңғыҙ баш (192).
Яҙ ҡышынан билгеле, ҡыҙ — *кәрендәшенән* (143).
Яҡын дуҫ йыраҡ *кәрендәштән* яҡын (207).
Яулы көндә ят яҡшы, ҡанлы көндә *кәрендәш* яҡшы (189).

## М

**малай**

Ҡыҙҙарға ҡанат, *малайҙарға* аяҡ бирһен (175).
Ҡыҙҙарға — ҡанат, *малайҙарға* — аяҡ.
Хужаға — баш, ҡатынға — түш.
Ҡунаҡҡа — ҡойроҡ майы (247).
*Малайҙың* ике күҙе юҡ, улдың бер күҙе юҡ (437).

## Н

**нәсәпһеҙ**

Нәҫелен белмәгән *нәсәпһеҙ* булыр (177).

**нәҫел**

Ағас *нәҫеле* ерҙә, ир *нәҫеле* илдә (78).
Ағас та үҙ *нәҫелен* үҙ тирәһенә йыя (147).
Илен белмәгән — белекһеҙ, *нәҫелен* белмәгән — намыҫһыҙ (163).

Кеше *нәҫеле* менән оло булмаҫ, һөнәре менән оло булыр (43).
*Нәҫел — нәҫелгә,* тилсә — тамырға (177).
*Нәҫеле* ниндәй — балаһы шундай (177).
*Нәҫелен* белмәгән нәсәпһеҙ булыр (177).
Тамғаң ай булһын, *нәҫелең* бай булһын (179).
Туғаныңдан биҙмә — *нәҫелең* ҡорор (180).
Үҙе булған егеттең төп *нәҫелен* һорама (440).

нәҫелле

*Нәҫелленең* һүҙе өҫкә сығыр (177).

## О

олатай

Һәр һаҡаллы *олатайың* булмаҫ (185).

## Т

туған

Арғымаҡты яманлап, толпар ҡайҙан табырһың,
Ағай-энеңде яманлап, *туған* ҡайҙан табырһың? (441).
Ауыл тулы *туғаның* булғансы, ауыл һайын берәр булһын (154).
Бай булһаң — үҙ *туған,* ярлы булһаң — тыума ят (110).
Бай менән бай — бер *туған* (96).
Бай *туғандан* болот яҡын (96).
Бай *туғанын* танымай (96).
Башыңа бәлә төшкәндә, *туғаныңды* танырһың (157).
Башыңа бәлә төшһә, *туғаныңды* танырһың (399).
Булыр-булмаҫ *туғандан* булған дуҫ яҡшы (159).
Ике бармаҡ араһына ит үрмәй, *туған* туғанһыҙ көн күрмәй (162).
Ике *туған* араһына ят кермәҫ (162).
Ике *туған* талашыр, атҡа менһә — ярашыр (162).
Ике *туған* татыу булһа, илдәгеһен индерер,
Ике туған аҙар булһа, аралағын алдырыр (162).
Ике *туғандан* айыу ҙа ҡурҡа (162).
Илбаҫар менән илбаҫар бер *туған* (119).

Йыраҡтағы *туғандан* яҡындағы ят артыҡ (168).
Кәкре менән бөкрө бер *туған* (270).
Ҡайғы, шатлыҡ бер *туған* (404).
Сирле булһаң — ирең һөймәҫ, ярлы булһаң — *туғаның* һөймәҫ (178).
*Туған* телем — V3 телем, ҡайҙа барһам — үҙ көнөм (353).
*Туған* телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр (353).
*Туған туғандың* маллыһын ярата (180).
*Туған* тыумасаһына ярамаҫ (180).
*Туғандан* тыуған — тума ят (192).
*Туғандарҙың* татыулығы байлыҡтан артыҡ (180).
*Туғандарың* — ҡулың менән аяғың, дуҫтарың — таяныр таяғың (180).
*Туғанды* йән тартмаһа ла ҡан тарта (180).
*Туғандыҡы* — тубалда (180).
*Туғаныңдан* биҙмә — нәҫелең ҡорор (180).
Тура телен тыя алмаған — *туғанына* һыя алмаған (180).
Тура һүҙ *туғаныңа* ярамаҫ (352).
Тура әйткән *туғанына* ярамаған (450).
Түрә-бейҙә *туған* юҡ, туған бейҙә иман юҡ (89).
Үҙ *туғаның* сит түгел, бер ҡаҡһа, биш тарта (183).
Үҙе яман ***туғанын*** яманлар (183).
Үҙенең башын ҙур тотҡан, ағай-эне башын хур тотҡан — ***туған*** тапмай яуҙа үлер (183).
Файҙа менән зарар — бер *туған* (225).
Яҡшынан яҡшы ни яҡшы?
*Туған* менән тиң яҡшы,
Алтын-көмөш сыҡҡан ерҙән
Атаның өйө иң яҡшы (189).
Яман *туған* бар булһаң — күрә алмай, юҡ булһаң — бирә алмай (188).
Ярлы булһаң — *туғаның* яратмай, сирле булһаң — ҡатының яратмай (108).
Ярлы *туғанын* байҙар һөймәҫ (189).

**туғанлыҡ**

Дуҫлығыңды ҡайҙан beләйем — көлгән көндө килмәнең,
*Туғанлығыңды* ҡайҙан беләйем — бөлгән көндө белмәнең (160).

*Туғанлыҡтың* төбө бер (180).

**туғанһыҙ**

Ике бармаҡ araһына ит үрмәй, туған *туғанһыҙ* көн күрмәй (162).

## У

**уғлан**

Атаһын үлтергәнде *уғлан* онотмаç.
Ҡойроғон киçкәнде йылан онотмаç (153).
Мөгөҙөн һындырғанды болан онотмаç,
Атаһын үлтерғәнде *уғлан* онотмаç (304).
Мөғөҙөн һындырғанды болан онотмаç,
Атаһын хурлағанды *уғлан* онотмаç (176).
Мәмәйле *уғлан* һөймәгә яҡшы (177).
Эйәр арҡаһы *уғланға* ҡалыр (185).

**уғыл**

Уҡыған *уғыл* — атанан оло (372).

**ул**

Аҡыллы өйләнгәнсе, тиленең *улы* булған (126).
Аҡыллы *ул* — алтын ҡул (148).
Ата байлығы *улға* йоҡмаç, инә байлығы ҡыҙға йоҡмаç (151).
Ата малы менән *ул* тормаç,
Инә малы менән ҡыҙ тормаç (208).
Ата *улды* белмәй, инә ҡыҙҙы белмәй (151).
Атаға *ул* булмаһаң, ҡайныға ҡол булырһың (151).
Ата-инәһен һөймәгән ҡыҙ яман,
Ҡан-ҡәрҙәшен һөймәгән *ул* яман (151).
Атанан тыумай *ул* булмаç, әсәнән тыумай ҡыҙ булмаç (152).
Атанан тыуһын *ул.*
Ата юлын ҡыуһын ул.
Ата юлын ҡыумаһа.
Тыуғанынан тыумағаны (444).

Атанан *ул* тыуһа ине, ата юлын ҡыуһа ине,
Биленә һаҙаҡ быуһа ине,
Битенә килер оятты үҙе белеп йыуһа ине (190).
Атанан яҡшы *ул* тыуһа, ҡар өҫтөндә ут ягыр,
Атанан яман *ул* тыуһа, ат өҫтөндә эт ҡабыр (152).
Атаны күреп *ул* үҫер, инәне күрен ҡыҙ үҫер (153).
Атаңдың ғына *улы* булма, халҡыңдың да *улы* бул (79).
Атаһы күрер — *улы* һөйләр, әсәһе күрер — ҡыҙы һөйләр (153).
Атаһы тороп, *улы* һөйләгәндән биҙ.
Инәһе тороп, ҡыҙы һөйләгәндән биҙ (153).
Атаһы һуҡҡан *ул* уңыр, инәһе һуҡҡан ул унмаҫ (153).
Атаһы юҡ *ул* — куштан, инәһе юҡ — инмәй тыштан (153).
Атаһыҙ *ул* аҫрама, инәһеҙ ҡыҙ аҫрама (153).
Атаһыҙҙы *ул* итмә, инәһеҙҙе ҡыҙ итмә (150, 153).
Атаһын күр ҙә — *улын* ҡос, инәһен күр ҙә — ҡыҙын ҡос (127).
Атаһын күр ҙә — *улына* ҡыҙ бир (127).
Атаһына оҡшап *ул* тыумаҫ, инәһенә оҡшан ҡыҙ тыумаҫ (153).
Ахыры заман килһә, атаһы тороп — *улы* һөйләр, инәһе тороп — ҡыҙы һөйләр (341).
Байҙың ҡоло булғансы, ярлының *улы* бул (98).
Байҙың *улы* һыңар күҙле, хеҙмәтсеһе тома һуҡыр (98).
Батырҙың *улы* ла батыр (296).
Башһыҙ өйҙә ата тороп, *ул* һөйләр, инә тороп, ҡыҙ һөйләр (157).
Бер ата тугыҙ *улды* аҫрар, туғыҙ *ул* бер атаны аҫрамаҫ (158).
Бер яҡшы ҡыҙ ете *улга* тора (158).
Берәү *улдан* күрә, берәү ҡыҙҙан (158).
Бирәм тигән *улына* — сығарып ҡуйыр юлына (438).
Булмаҫ йортҡа бөкрө билле *ул* тыуыр (159).
Булмаҫтайҙан булмаҫ:
*Ул* да тыумаҫ, ҡыҙ ҙа тыумаҫ.
Тыуһа ла тормаҫ (39).
Ете *ул* өйләндергән — бай булған, ете ҡыҙ биргән — бөлгән (161).
Кейәү *ул* булмаҫ, килен ҡыҙ булмаҫ (168).
Кейәүҙең түре — *улдың* тупһаһы (168).

Кейәүең ҡыуалаһа — ишек бауы тот, ***улың*** ҡыуалаһа — түргә менеп ултыр (442).
Кейәүең ҡыуһа — ишек тот, ***улың*** ҡыуһа — бишек тот (168).
Кейәүең орошһа — ишек ҡара, ***улың*** ҡыуһа — түргә табан (442) .
Кейәүең тауышы сыҡһа — ишек бауы тот, ***улың*** тауышы сыҡһа — түргә сыҡ (442).
Кем матур — ***ул*** матур, кемде һөйһәң — шул матур (133).
Килен алғансы — үҙ ***улың,*** килен алғас — кеше ***улы*** (169).
Киске шаңдаҡ ҡыҙарһа, киленем ***ул*** тапҡандай.
Иртәнге шаңдаҡ ҡыҙарһа, илем яуға сапҡандай (418).
Көҙгө ҡатыҡ, көмөш ҡашыҡ кейәүем менән ҡыҙыма;
Яҙғы ҡатыҡ, ярыҡ ҡашыҡ киленем менән ***улыма*** (191).
Ҡаты тунды туным тимә, кеше ***улын улым*** тимә (171).
Ҡатын яман булһа — ҡунаҡ китер, ***улың*** яман булһа — дәүләт китер (172).
Ҡыҙ ҡыҙлы булмаç, әсә ҡәҙерен белмәһә.
***Ул*** уллы булмаç, ата ҡәҙерен белмәһә (175).
Ҡыҙ ҡылығы менән һөйкомлө, ***ул*** əҙәбе менән һөйкөмлө (175).
Ҡыҙ тапһаң — ҡыçылып ят, ***ул*** тапһаң — иркенләп ят (175).
Ҡыҙ үçһә — өйгә ҡытлыҡ, ***ул*** үçһә — өйгә ҡотлоҡ (175).
Ҡыҙҙы өйрәтеү — изге эш, ***улды*** өйрәтеү — иң ҙур эш (175).
Ҡыҙҙы әсәһе һаҡлаһын, ***улды*** — атаһы (175).
Ҡыҙым ҡыҙлы булмай белмәç, ***улым уллы*** булмай белмәç (176) .
Ҡырҡ ***улың*** булғансы, ҡынтыр ирең булһын (176).
Малайҙың ике күҙе юҡ, ***улдың*** бер күҙе юҡ (437).
Орошҡаҡ булһа — ***улың*** яу, ҡарышҡак булһа — киленең яу (443) .
Орошҡаҡ булһа — ***улың*** яу, ҡарышҡаҡ булһа — ҡыҙың яу (177) .
Ояты юҡ ***ул*** яман, ҡылығы юҡ ҡыҙ яман (177).
***Ул*** бар ерҙә уңыш бар, ҡыҙ бар ерҙә ҡулыш бар (181).
***Ул*** ҡарғаһа — бер бәлә, ил ҡарғаһа — мең бәлә (90).
***Ул*** ҡәҙерен ***улың*** уллы булғас белерһең.
Ҡыҙ ҡәҙерен ҡыҙың ҡыҙлы булғас белерһең (181).
***Ул*** тапҡан — уңған ҡатын, ҡыҙ тапҡан — наҙлы ҡатын (181).
***Ул*** тыуғанға көн тыуған (181).

*Ул* тыуҙы — илгә тыу тыуҙы (181).
*Ул* тыуһа — тыу бәйлә, ҡыҙ тыуһа — бау бәйлә (181).
*Ул* үҫтергән — губернатор, ҡыҙ үҫтергән — боҫоп ятыр (444).
*Ул* — һойөнөс, ҡыҙ — ҡыуаныс (181).
*Ул* әсәһе — губернатор, ҡыҙ әсәһе өндәшмәй ятыр (181).
*Улга* ҡараган — урамға ҡараған (181).
*Улы* атҡа менеп сапһа, әсәһе ботон ҡыҫыр (182).
*Улы* барҙың урыны бар, ҡыҙы барҙың ҡәҙере бар (182).
*Улы* урманга барһа, атаһы урамға һыймай (182).
*Улы* юҡтың ҡулы юҡ (182).
*Улым* бер булһа, киленем биш булыр (192).
*Улым,* һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла (192).
*Улың* асыуланһа — түргә мен дә сәй эс.
Киленең асыуланһа — ишек тотҡаһын тот (182).
*Улың* булһа, олоҡло менән күрше бул.
Ҡыҙың булһа, ҡылыҡлы менән күрше бул (182).
*Улың* булһа *ул* булһын — буйы-һыны мул булһын (182).
*Улың* етһә, ҡыҙы яҡшы менән дуҫ бул.
Ҡыҙың етһә, улы яҡшы менән дуҫ бул (182).
*Улың* кемде һөйһә, киленең шул булыр.
Ҡыҙың кемде һөйһә, кейәүең шул булыр (182).
*Улың* ҡыуһа, түргә мен (182).
*Улың* менән ирешһәң, түрендә ултырып ireш,
Кейәүең менән ирешһәң, ишек тотҡаһын тотон ireш (182).
*Улың* менән маҡтанма, *улыңдың* эше менән маҡтан (182).
Уңған ҡатын *ул* табыр, изге ҡатын ҡыҙ табыр (182).
Ут ала барған ерендә *ул* тапҡансы ултырған (192).
Үҙеңдән тыумай *ул* булмаҫ, һатын алмай ҡол булмаҫ (106).
Хәйерһеҙ *ул* ата нигеҙен таратыр (184).
Көймәҫ *улың* йорт тотор, һөймәҫ киленең һөйәгең тотор (184).
Һәнәрле булын *ул* үҫһен, ҡылыҡлы булып ҡыҙ үҫһен (184).
Эбей — килен, үҙем — *ул* (193).
Яҡшы килен серҙәшеңдәй булыр.
Яҡшы *улың* ҡорҙашыңдай булыр (187).
Яман булһа ла үҙ *улың* үҙ малыңа эйә булыр (188).
Яман ҡатын алһағыҙ, йыйынға инер *ул* тыумаҫ (188).
Ярлының *улы* — байҙың ҡоло (110).
Ярлының *улы* булғансы, байҙың ҡоло бул (110).

**улан**

Яҙғы буран йәш *улан:* үҙе ҡолай, үҙе илай (417).

**ул-кыҙ**

Ата-инә йәше менән, *ул-кыҙы* эше менән (152).
Ата-инәнең ҡайғыһы — *улда кыҙҙа,*
Улдың-кыҙҙың ҡайғыһы — тауҙа-ташта (152).
Иртә өйләнгән *улынан-кыҙынан* кинәнгән (132).
Туйға барһаң, туйып бар, *улың-кыҙың* ҡуйып бар (140).

**уллы**

Болло кеше бол табыр, *уллы* кеше ял табыр (158).
Килен кеше — ким кеше, көнләксөгә тиң кеше,
Ҡәйнә кеше — *уллы* кеше, губернаторға тиң кеше (169).
Ҡыҙ ҡыҙлы булмаҫ, әсә ҡәҙерен белмәһә,
Ул *уллы* булмаҫ, ата ҡәҙерен белмәһә (175).
Ҡыҙлы кеше — наҙлы кеше,
*Уллы* кеше — юллы кеше (175).
Ҡыҙым ҡыҙлы булмай белмәҫ,
Улым *уллы* булмай белмәҫ (176).
Маллы бай түгел, *уллы* бай (176).
Муллы бай түгел, *уллы* бай (177).
Ул ҡәҙерен улың *уллы* булғас белерһең,
Ҡыҙ ҡәҙерен ҡыҙың ҡыҙлы булғас белерһең (181).
*Уллы* кеше — синлы кеше (443).
*Уллы* кеше — урта бай, ҡыҙлы — ҡыҙыл бай (181).
*Уллы* ла илар, улһыҙ ҙа илар (181).
*Уллы* ла ҡурҡа, ҡыҙлы ла ҡурҡа (181).
Улһыҙҙың мәшәҡәте бер булыр, *уллының* мәшәҡәте ун булыр (181).

**улһыҙ**

Уйынға ышанған — *улһыҙ,* дошманға ышанған — ҡулһыҙ (206).
Уллы ла илар, *улһыҙ* ҙа илар (181).
*Улһыҙҙың* мәшәҡәте бер булыр,
Уллының ун булыр (181).

# Һ

һеңле

Ағаһын күреп эне үҫер, апаһын күреп ***һеңле*** үҫер (147).

# Ы

**ырыу**

Ат алһаң — ауылың менән, ҡыҙ алһаң — ***ырыуың*** менән кәңәшләш (127).
Дуҫ — иш менән, ҡәрҙәш — ***ырыу*** менән (160).
Исемең шән булһын, ***ырыуыңа*** тан булһын,
***Ырыуыңа*** тан килмәһә, ораныңа тан булһын (85).
Көслө ***ырыу*** хан ҡуйыр, үсле ***ырыу*** ҡан ҡойор (86).
Ҡайһы ***ырыу*** көслө — ханды шул ҡуя,
Ҡайһы ***ырыу*** үсле — ҡанды шул ҡоя (86).
Ҡалын ***ырыуҙа*** ҡараҡ бар (328).
Ҡалын ***ырыуҙың*** ҡарағы күп була (86).
Утыҙ тештән сыҡҡан һүҙ утыҙ ***ырыуға*** етер (354).
Һыйыр алһаң, тояғына ҡара, ҡатын алһаң, ***ырыуына*** ҡара (142).
***Ырыуы*** юҡ ир булмаҫ, өлгөһө юҡ тун булмаҫ (185).
***Ырыуына*** күрә йолаһы, биреүенә күрә доғаһы (92).
Эт ***ырыуын*** танымаҫ (186).

**ырыулы**

***Ырыулы*** ил — оялы ҡаҙ (92).
***Ырыулының*** уғы юғалмаҫ (92).

**ырыу-туған**

***Ырыу-туған*** талашыр, дошман килһә, ярашыр (185).

# Э

эне

Ағайым өйө — аҡ йәйләү, ***энем*** өйө — өң төбө (147).
Ағаһын күреп ***эне*** үҫер, апаһын күреп һеңле үҫер (147).

*Эне* өйө — айыу өңө (185).
*Энеһе* яҡшы булһа — ағаһының бәхете.
Балаһы яҡшы булһа — атаһының бәхете (185).

# Ә

**әбей**

Икмәк юғы ямандыр — ҡаты-ҡото кимертә.
Ҡатын юғы ямандыр — ҡарт *абейҙе* һөйҙөртә (131).
*Әбей* белен бешерә, бабай ҡабыҡ төшөрә (64).
*Әбей* — килен, үҙем — ул (193).

**әсә**

Ата байлығы улға йоҡмаҫ, *аса* байлығы ҡыҙға йоҡмаҫ (151).
Ата булмай атайың ҡәҙерен белмәçһең,
*Әса* булмай әсәйең ҡәҙерен белмәçһең (151).
Ата ҡарғышын күк күтәрмәç, *аса* һағышын ер күтәрмәç (152).
Ата һүҙен тотмаған, *эса* һүҙе йоҡмаған — яуға сабыр ир булмаç (151).
Атанан тыумай ул булмаç, *асанан* тыумай ҡыҙ булмаç (152).
Атаһы күрер — улы һөйләр, *асаһе* күрер — ҡыҙы һөйләр (153).
Атаһын күр ҙә — улын ҡос, *асаһен* күр ҙә ҡыҙын ҡос (127).
Бала ҡарама ҡыуышынан төшмәй *(асанан* тыуа) (155).
Бала ҡәҙерен *аса* белер, ил ҡәҙерен ир белер (79).
Бала өсөн *асэнең* йөрәге, атаның беләге һыҙлар (155).
Ишеге ямандың өйөнә барма, *асаһе* ямандың ҡыҙын алма (132).
Ҡыҙ ҡыҙлы булмаç, әсә ҡәҙерен белмәһә,
Ул уллы булмаç, ата ҡәҙерен белмәһә (175).
Ҡыҙҙы *асаһе* һаҡлаһын, улды — атаһы (175).
Ҡыҙы миңә яраһа, *асаһен* бүре алһын (145).
Табағына ҡарап, ашын эс, *асаһена* ҡаран, ҡыҙын ҡос (139).
Телһеҙҙең телен *асаһе* белер (180).
Тыуҙырған *аса* түғел, үçтергән *аса* (181).
Ул *асаһе* — губернатор, ҡыҙ *асаһе* өндәшмәй ятыр (181).
Улы атҡа менен санһа, *асаһе* ботон ҡыçыр (182).

Үгәй *әсә* ураҙа тоттора, ашатып та ҡоҫтора (183).
Үгәй *әсә* үрҙә ҡайнай, үрҙә ҡайнамаһа, гүрҙә ҡайнай (183).
Үҙ *әсәң* бауырһаҡ, үгәй *әсәң* — һарымһаҡ (183).
һауага ҡарап өйөң яҡ, *әсәһенә* ҡарап ҡыҙын баҡ (184).
Эшләгәнең атаң менән *әсәң* өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙең өсөн
(146).
*Әсә* янында бала етем булмай (186).
*Әсәм* яҡын булһа ла, арба артынан баралыр,
Бисәм ситтән булһа ла, янга ултырып баралыр (193).
*Әсәнән* ҡыйшыҡ тыуган ҡашыҡҡа һалһаң да тураймаҫ (284).
*Әсәһе* ҡыҙы ҡайғыһында, ҡыҙы үҙ ҡайғыһында (193).
*Әсәһе* тирәккә менһә, ҡыҙы ботаҡҡа менә (186).
*Әсәһе* юрга булһа, ҡыҙы йөрөшлө була (186).

әсәй

Ата булмай атайың ҡәҙерен белмәҫһең,
Әсә булмай *әсәйең* ҡәҙерен белмәҫһең (151).
Атайым үлгәндә бер туйҙым, *әсәйем* үлгәндә бер туйҙым (190).
*Әсәйең* үгәй булһа, үҙ атайың да ят була (186).

әсәһеҙ

Атаһыҙ бала етем түгел, *әсәһеҙ* бала етем (153).
Атаһыҙ етем — туйҙа етем, *әсәһеҙ* етем — көн дә етем (153).
Атаһыҙ етем — ярты етем, *әсәһеҙ* етем — гел етем (153).
*Әсәһеҙҙе* «килен» тимә, атаһыҙҙы «кейәү» тимә (186).

**Ҡушымта 1.**

**Мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә ҡулланылған ПУЗЗӘО теҙмәһе**
(ҡулланылыш йышлығын күрһәтеп — алфавит тәртибендә)

| № | һүҙҙәр | Йышлығы |
|---|---|---|
| 1 | абышҡа | 1 |
| 2 | аға | 12 |
| 3 | аға-эне | 2 |
| 4 | ағай | 11 |
| 5 | ағайҙыҡы | 1 |
| 6 | ағай-эне | 25 |
| 7 | ана | 6 |
| 8 | апа | 1 |
| 9 | апай | 2 |
| 10 | апһын | 3 |
| 11 | апһын-әзе | 1 |
| 12 | ата | 130 |
| 13 | ата-баба | 1 |
| 14 | ата-инә | 19 |
| 15 | ата-әсә | 4 |
| 16 | атай | 28 |
| 17 | аталы | 2 |
| 18 | атаһыҙ | 10 |
| 19 | баба | 1 |
| 20 | бабай | 1 |
| 21 | бажа | 7 |
| 22 | бала | 251 |
| 23 | бала-саға | 2 |
| 24 | балалы | 13 |
| 25 | балаһыҙ | 8 |
| 26 | балдыҙ | 4 |
| 27 | бикә | 7 |
| 28 | бисә | 21 |
| 29 | бисәнеке | 1 |
| 30 | брат | 2 |
| 31 | ғаилә | 1 |
| 32 | eғет | 152 |
| 33 | егетлек | 4 |
| 34 | еҙнә | 4 |
| 35 | еңгә | 14 |
| 36 | еңгәнеке | 1 |
| 37 | инә | 45 |
| 38 | инәй | 2 |
| 39 | инәле | 1 |
| 40 | инәһеҙ | 8 |
| 41 | ир | 440 |
| 42 | ир-аҙамат | 1 |

| № | Һүҙҙәр | Йыш-лығы |
|---|---|---|
| 43 | ир-ат | 2 |
| 44 | ирҙеке | 1 |
| 45 | ирҙән-иргә | 1 |
| 46 | ир-егет | 21 |
| 47 | ирле | 6 |
| 48 | ирлек | 4 |
| 49 | ирһеҙ | 13 |
| 50 | йәр | 18 |
| 51 | йәрһеҙ | 4 |
| 52 | кейәү | 41 |
| 53 | кейәүлә | 1 |
| 54 | килен | 76 |
| 55 | килендеке | 3 |
| 56 | килендәш | 2 |
| 57 | киленсәк | 1 |
| 58 | көндәш | 11 |
| 59 | көндәшле | 4 |
| 60 | кәләш | 2 |
| 61 | ҡайнаға | 1 |
| 62 | ҡайны | 4 |
| 63 | ҡан-ҡәрҙәш | 1 |
| 64 | ҡатын | 350 |
| 65 | ҡатындыҡы | 1 |
| 66 | ҡатын-ҡыҙ | 17 |
| 67 | ҡатынлы | 1 |
| 68 | ҡатынһыҙ | 2 |
| 69 | ҡоҙа | 21 |
| 70 | ҡоҙағый | 5 |
| 71 | ҡоҙа-ҡоҙағый | 1 |
| 72 | ҡоҙалыҡ | 1 |
| 73 | ҡоҙаса | 3 |
| 74 | ҡыҙ | 271 |

| № | Һүҙҙәр | Йыш-лығы |
|---|---|---|
| 75 | ҡыҙҙай | 2 |
| 76 | ҡыҙлы | 19 |
| 77 | ҡыҙһыҙ | 2 |
| 78 | ҡәйенһеңле | 1 |
| 79 | ҡәйнеш | 2 |
| 80 | ҡәйнә | 25 |
| 81 | ҡәрҙәш | 4 |
| 82 | ҡәрендәш | 14 |
| 83 | малай | 3 |
| 84 | нәсәпһеҙ | 1 |
| 85 | нәҫел | 10 |
| 86 | нәҫелле | 1 |
| 87 | олатай | 1 |
| 88 | туған | 41 |
| 89 | туғанлыҡ | 2 |
| 90 | туғанһыҙ | 1 |
| 91 | уғлан | 5 |
| 92 | уғыл | 1 |
| 93 | ул | 95 |
| 94 | улан | 1 |
| 95 | ул-ҡыҙ | 4 |
| 96 | уллы | 13 |
| 97 | улһыҙ | 3 |
| 98 | һеңле | 1 |
| 99 | ырыу | 12 |
| 100 | ырыулы | 2 |
| 101 | ырыу-туған | 1 |
| 102 | эне | 4 |
| 103 | әбей | 3 |
| 104 | әсә | 30 |
| 105 | әсәй | 3 |
| 106 | әсәһеҙ | 4 |

**Ҡушымта 2.**

Мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә ҡулланылған ПУЗЗЭО теҙмәһе
(ҡулланылыш йышлығы кәмей барыу тәртибендә)

| № | Һүҙҙәр | Йышлығы |
|---|---|---|
| 1 | ир | 440 |
| 2 | ҡатын | 350 |
| 3 | ҡыҙ | 271 |
| 4 | бала | 251 |
| 5 | еғет | 152 |
| 6 | ата | 130 |
| 7 | ул | 95 |
| 8 | килен | 76 |
| 9 | инә | 45 |
| 10 | кейәү | 41 |
| 11 | туған | 41 |
| 12 | әсә | 30 |
| 13 | атай | 28 |
| 14 | ағай-эне | 25 |
| 15 | ҡәйнә | 25 |
| 16 | бисә | 21 |
| 17 | ир-егет | 21 |
| 18 | ҡоҙа | 21 |
| 19 | ата-инә | 19 |
| 20 | ҡыҙлы | 19 |
| 21 | йәр | 18 |
| 22 | ҡатын-ҡыҙ | 17 |
| 23 | еңгә | 14 |
| 24 | ҡәрендәш | 14 |
| 25 | балалы | 13 |
| 26 | ирһеҙ | 13 |
| 27 | уллы | 13 |
| 28 | аға | 12 |
| 29 | ырыу | 12 |
| 30 | ағай | 11 |

| № | Һүҙҙәр | Йышлығы |
|---|---|---|
| 31 | көндәш | 11 |
| 32 | атаһыҙ | 10 |
| 33 | нәҫел | 10 |
| 34 | балаһыҙ | 8 |
| 35 | инәһеҙ | 8 |
| 36 | бажа | 7 |
| 37 | бикә | 7 |
| 38 | ана | 6 |
| 39 | ирле | 6 |
| 40 | ҡоҙағый | 5 |
| 41 | уғлан | 5 |
| 42 | ата-әсә | 4 |
| 43 | балдыҙ | 4 |
| 44 | еғетлек | 4 |
| 45 | еҙнә | 4 |
| 46 | ирлек | 4 |
| 47 | йәрһеҙ | 4 |
| 48 | көндәшле | 4 |
| 49 | ҡайны | 4 |
| 50 | ҡәрҙәш | 4 |
| 51 | ул-ҡыҙ | 4 |
| 52 | эне | 4 |
| 53 | әсәһеҙ | 4 |
| 54 | апһын | 3 |
| 55 | килендеке | 3 |
| 56 | ҡоҙаса | 3 |
| 57 | малай | 3 |
| 58 | улһыҙ | 3 |
| 59 | әбей | 3 |
| 60 | әсәй | 3 |

| № | һүҙҙәр | Йыш-лығы |
|---|---|---|
| 61 | аға-эне | 2 |
| 62 | апай | 2 |
| 63 | аталы | 2 |
| 64 | бала-саға | 2 |
| 65 | брат | 2 |
| 66 | инәй | 2 |
| 67 | ир-ат | 2 |
| 68 | килендәш | 2 |
| 69 | кәләш | 2 |
| 70 | ҡатынһыҙ | 2 |
| 71 | **ҡыҙҙай** | 2 |
| 72 | ҡыҙһыҙ | 2 |
| 73 | ҡәйнеш | 2 |
| 74 | туғанлыҡ | 2 |
| 75 | ырыулы | 2 |
| 76 | абышҡа | 1 |
| 77 | ағайҙыҡы | 1 |
| 78 | апа | 1 |
| 79 | апһын-әзе | 1 |
| 80 | ата-баба | 1 |
| 81 | баба | 1 |
| 82 | бабай | 1 |
| 83 | бисәнеке | 1 |

| № | һүҙҙәр | Йыш-лығы |
|---|---|---|
| 84 | ғаилә | 1 |
| 85 | еңгәнеке | 1 |
| 86 | инәле | 1 |
| 87 | ир-аҙамат | 1 |
| 88 | ирҙеке | 1 |
| 89 | ирҙән-ирғә | 1 |
| 90 | кейәүлә | 1 |
| 91 | киленсәк | 1 |
| 92 | ҡайнаға | 1 |
| 93 | ҡан-ҡәрҙәш | 1 |
| 94 | ҡатындыҡы | 1 |
| 95 | ҡатынлы | 1 |
| 96 | ҡоҙа-ҡоҙағый | 1 |
| 97 | ҡоҙалыҡ | 1 |
| 98 | ҡәйенһеңле | 1 |
| 99 | нәсәпһеҙ | 1 |
| 100 | нәҫелле | 1 |
| 101 | олатай | 1 |
| 102 | туғанһыҙ | 1 |
| 103 | уғыл | 1 |
| 104 | улан | 1 |
| 105 | һеңле | 1 |
| 106 | ырыу-туған | 1 |

## Йөкмәткеһе

Баш һүҙ ........ 5
Һүҙлек ........ 7

абышҡа ........ 7
аға ........ 7
ага-эне ........ 7
ағай ........ 8
ағайҙыҡы ........ 8
ағай-эне ........ 8
ана ........ 9
апа ........ 9
апай ........ 9
апһын ........ 10
апһын-әзе ........ 10
а т а ........ 10
ата-баба ........ 14
ата-инә ........ 14
ата-әсә ........ 15
атай ........ 15
аталы ........ 16
атаһыҙ ........ 16
баба ........ 17
бабай ........ 17
бажа ........ 17
бала ........ 17
бала-саға ........ 25
балалы ........ 26
балаһыҙ ........ 26
балдыҙ ........ 26
бикә ........ 26
бисә ........ 27
бисәнеке ........ 27
брат ........ 28
ғаилә ........ 28
еғет ........ 28
егетлек ........ 33
еҙнә ........ 33
еңгә ........ 33
еңғәнеке ........ 34
инә ........ 34
инәй ........ 35
инәле ........ 35
инәһеҙ ........ 36
ир ........ 36
ир-аҙамат ........ 50
ир-ат ........ 50
ирҙеке ........ 50
ирҙән-иргә ........ 50
ир-егет ........ 50
ирле ........ 51
ирлек ........ 51
ирһеҙ ........ 51
йәр ........ 52
йәрһеҙ ........ 52
кейәү ........ 52
кейәүлә ........ 54
килен ........ 54
килендеке ........ 57
килендәш ........ 57

киленсәк................................ 57
көндәш ................................. 57
көндәшле............................. 57
кәләш .................................. 57
ҡайнаға................................ 58
ҡайны .................................. 58
ҡан-ҡәрҙәш........................... 58
ҡатын .................................. 58
ҡатындыҡы .......................... 70
ҡатын-ҡыҙ ........................... 70
ҡатынлы................................ 71
ҡатынһыҙ ............................ 71
ҡоҙа...................................... 71
ҡоҙағый................................. 72
ҡоҙа-ҡоҙағый ....................... 72
ҡоҙалыҡ ............................... 72
ҡоҙаса .................................. 72
ҡыҙ ...................................... 72
ҡыҙҙай ................................. 81
ҡыҙлы................................... 81
ҡыҙһыҙ................................. 82
ҡәйенһеңле ........... 82
ҡәйнеш ................................ 82
ҡәйнә.................................... 82
ҡәрҙәш ................................ 83
**ҡәрендәш ................................ 83**
**малай........................................ 84**
**нәсәпһеҙ .................................. 84**
**нәҫел ........................................ 84**
**нәҫелле .................................... 85**
**олатай...................................... 85**
**туған......................................... 85**
**туғанлыҡ.................................. 86**
**туғанһыҙ.................................. 87**
**уғлан........................................ 87**
**уғыл ........................................ 87**
**ул............................................... 87**
**улан.......................................... 91**
**ул-ҡыҙ...................................... 91**
**уллы ........................................ 91**
**улһыҙ ...................................... 91**
**һеңле........................................ 92**
**ырыу......................................... 92**
**ырыулы.................................... 92**
**ырыу-туған............................. 92**
**эне............................................ 92**
**әбей.......................................... 93**
**әсә............................................ 93**
**әсәй ......................................... 94**
**әсәһеҙ....................................... 94**

**Ҡушымталар**........................................................................... 95

1. **Мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә ҡулланылған һүҙҙәр теҙмәһе (ҡулланылыш йышлығын күрһәтеп — алфавит тәртибендә)** ........................!............................................ 95
2. **Мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә ҡулланылған һүҙҙәр теҙмәһе (ҡулланылыш йышлығы кәмей барыу тәртибендә)** ................................................................ 97

**Справочное издание**

Автор-составитель

АХТЯМОВ Мухтар Хуснулхакович

**МАТЬ**

**Пословицы и поговорки**

**Словарь**

***(на башкирском языке)***

Редакция мөдире ***Сәуиә Мөхтәруллина***
Мөхәррире ***Венера Сафина***
Рәссамы ***Илфат Сафаров***
Биҙәлеш мөхәррире ***Фазлетдин Ислахов***
Техник мөхәррире ***Надия Пятаева***
Корректоры ***Эльвира Шәйхетдинова***

Нәшр. лиц. № 04380; 26.03.01. Йыйырға бирелде 05.10.01. Баҫырға ҡул ҡуйылды 28.01.02. Ҡағыҙ форматы 60x84Vi6* Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 6,04. Шартлы буяу отт. 6,49. Иеәп-баҫма таб. 3,98. Тиражы 3000 дана.
Заказ № 629.

Башкортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы *«Башкортостан Республикаһы хал ьпстарының телдәрен һажлау, өйрәнеү һәм үçтереү буйынса дәүләт программаһы»на* ярашлы 2001 йылда түбәндәге китаптарҙы сығарҙы:

1. *Аслаева Р. Ғ.* Урыçса-башҡортса дефектология терминдары һүҙлеге.

**Һүҙлек мәгариф, медицина, социаль яҡлау әлкәһендә эшләгән дефектологтарға, логопедтарға, табиптарға һәм урта мәктәп уҡыусыларына, студенттарға, ата-әсәләргә тәғәйенләнә.**

Тиражы 3000 дана.

2. *Камалов А. А., Камалова Ф. У.* Атайсал. (Башҡорт һәм урыç телдәрендә.)

**Был китапта хәҙерге башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары нигеҙ һалған ауылдарҙың исемлеге, уларҙы өйрәнеү сығанактары бирелде. Бында документтар менән дәлилләнгән, ысынбарлыҡка тап килгән мәглүмәттәр генә килтерелде. Китап киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә.**

Тиражы 3500 дана.